**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгәндәр 5 декабрҙән 15-нә тиклем был эште ташламалы хаҡтар менән атҡара ала. Шулай итеп, ВО665 индекслы "Киске Өфө"гә - 445 һум 56 тингә, ВО673 (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) индекслыһына - 451 һум 56 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы һәм тыл ветерандары 398 һум 62 тингә яҙыла алаһығыҙ. Мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырмайыҡ!**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13 - 19 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2014 йыл

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№50 (624)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Суверенитет - ул мотлаҡ шарт!** 5

**Ҡан буйынса башҡорттар...** тамырҙарын иҫкә төшөрһөн 7

**Аҡбуҙат оран ташлай -** батырын эҙләй 8-9

**Рухын юғалтҡан түгел...** мөнәжәт һәм нәсихәттәр әйткән халыҡ беҙ! 10,16

14 ТВ-программа











ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа ҡабул ителгән законға ярашлы, граждандарға хәҙер үҙҙәре йәшәгән ауылдарҙа спиртлы эсемлектәр һатыуҙы тыйыу хоҡуғы бирелә. Һеҙҙең ауылда был мәсьәләгә нисек ҡарайҙар?

***Ришат ҒИБАҘУЛЛИН, Учалы районы Миндәк ауыл хакимиәте башлығы:*** Мин әле мәктәптә уҡыған саҡтарҙа уҡ Бөрйән районының Әбделмәмбәт ауылын яҡшы белә инем, ундағы халыҡтың матур, өлгөлө йәшәү рәүешен күреп, уларға һоҡланып, үҙебеҙҙә лә шундай тәртип булһа ине, тип хыяллана торғайным. Бына хәҙер ең һыҙғанып эшләргә лә форсат тыуҙы. Миндәк ауылы хакимиәте ярайһы ҙур биләмә, сөнки ул элекке өс ауыл советын берләштереп, хәҙерге көндә барлығы 11 ауылдан тора, уларҙа 5 меңгә яҡын кеше йәшәй. Беҙҙең ауылдарҙа ла халыҡ унған, тырыш, тип әйтер инем. Был баһа айырыуса "Айыҡ ауыл-2014" республика конкурсында ҡатнашыусы Баттал ауылына ҡағыла. Ҡайҙалыр кемдәрҙер, ауылда эш юҡ, тип зарлана икән, был батталдарға бөтөнләй ҡағылмай. Халыҡ етеш, мул тормош көтөргә тырышып ята: мал аҫырайҙар, йорт һалып инәләр, йәштәр ҙә ситкә сығып китеү яйын ғына ҡарап тормай: өйләнешәләр ҙә тыуған ерҙә төпләнеп, ата-әсәләре кеүек, матур донъя ҡоралар. Электән эшһөйәрҙәре менән дан тота Баттал ауылы. Социалистик Хеҙмәт Геройы Яныбай Әхмәтйәновтың тыуған төйәге бит был! Быйыл гөрләтеп "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы үткәрҙек. Ауылдың аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр ҡорҙары староста менән бергәләшеп, "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыу башланғысы менән сыҡҡас, батталдар бер һүҙһеҙ хуплап, күтәреп алды был тәҡдимде. Хәйер, уға тиклем дә айыҡлыҡ өлгөһө күрһәтә ине улар: эсеп, боларып йөрөгән кешене күрмәҫһең - һәр кем үҙ эше менән мәшғүл. Ә мәшғүл кешенән боҙоҡлоҡ, яҙыҡ уйҙар алыҫ йөрөй, быныһы үҙегеҙгә мәғлүм. Әлбиттә, ғаилә ғәрипһеҙ булмай, тигәндәй, дөйөм күренеште боҙған бер-ике кеше һәр урында ла осрап тора инде ул, улар менән дә аңлатыу-тәрбиәүи саралар алып барыла. Унан һуң, беҙҙә бит ҡырҙан килгән туристар ҙа йыш була. Магазиндарҙа араҡы һатыу мәсьәләһе буйынса эшҡыуарҙарҙы ла йыйып һөйләшеп торабыҙ. Улар, әлбиттә, үҙ файҙаһын ҡайыра - килем-төшөмдө уйлай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, әгәр ауыл активы, йәғни ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар, ауылда араҡы һатыуҙы бөтөнләй тыйырға тигән тәҡдим менән килә икән, был мәсьәлә БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай тарафынан ҡабул ителгән законға ярашлы ыңғай хәл ителәсәк, тип уйлайым.

(Дауамы 2-се биттә).

КЕМ АЛЫҠ!



Декабрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер шулай уҡ **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, **"История башкирского народа"**, Нияз Мәжитовтың **"История Башкортостана"**, **"Антология поэзии Башкортостана"**, Ә. Әсфәндийәровтың **"История сел и деревень Башкортостана"**, башҡортса **"Дини календарь"**, Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, **"Рәми Ғарипов тормошо һәм ижады"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, башҡортса **"Ҡөрьән Кәрим"** китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал.

УРА!

# НИҺАЙӘТ, ҠЫШ КИЛДЕ!

**Өфө урамдарына, ниһайәт, ҡар яуҙы. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәре урамдарҙы таҙартыу эшенә тотонды. Көн һайын был эшкә 200-300 самаһы берәмек махсус техника йәлеп ителә. Ғөмүмән, миҙгел һынауҙары менән көрәшкә 408 берәмек техника әҙерләнгән.**



Хеҙмәтләндереү территорияһы 21 миллион квадрат метр юлдарҙы һәм эргә-тирәләге участкаларҙы үҙ эсенә ала. Быйыл был майҙандар 10 процентка, йәғни 2 миллион квадрат метрға артҡан. Бер техникаға 52 мең квадрат метр майҙанды хеҙмәтләндерергә тура килә. Муниципалитет ҡала территорияһының 30 процентын таҙартырға бурыслы. Был, нигеҙҙә, урамдарҙың машиналар йөрөгән өлөшө, автомагистралдәр, парктар, скверҙар. Йорт алды участкаларын идара итеү ойошмалары таҙартырға тейеш. Ә инде "ҡыҙыл һыҙат"та урынлашҡан участкалар бина милекселәре йәки ҡуртымға алыусыларға беркетелгән. Был ойошмалар хужалары үҙҙәренә ҡараған территорияларҙа тәртип урынлаштырырға тейеш. Шулай уҡ төҙөкләндереү кимәленә бәйле клиенттарҙың һәм ҡулланыусыларҙың именлеген тәьмин итеү ҙә уларҙың туранан-тура бурысы булып тора.

Тейешле хеҙмәттәр тротуарҙарға һәм юлдарға һибелгән боҙлауыҡҡа ҡаршы реагенттар файҙаланыуҙың оптималь вариантын да ҡараясаҡ. Һуңғы ваҡытта ҡарҙы иретеү һәм боҙлауыҡҡа ҡаршы ҡулланылған бындай реагенттар хаҡында күп бәхәстәр ишетергә тура килә. Ошо химик ҡатнашмаларҙың артығы менән тротуарҙарға, урамдарға һибелеүе бигерәк тә ҡалаларҙа йәшәүселәргә ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра, аяҡ кейемдәренә, автомобилдәрҙең кузов деталдәренә зарар итә, ҡар "буҡкаһы" барлыҡҡа килтерә.

(Дауамы 4-се биттә).

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**БР Дәүләт Йыйылышы - Королтайҙа ҡабул ителгән законға ярашлы, граждандарға хәҙер үҙҙәре йәшәгән ауылдарҙа спиртлы эсемлектәр һатыуҙы тыйыу хоҡуғы бирелә. Һеҙҙең ауылда был мәсьәләгә нисек ҡарайҙар?**

(Башы 1-се биттә).

***Фуат ӘХМӘТОВ, Баймаҡ районы Ярат ауыл хакимиәте башлығы:*** "Айыҡ ауыл-2014" конкурсында ҡатнашыу барыбер ҙә халыҡты йәшәү рәүеше хаҡында уйланырға, килешмәгән ғәмәлдәрҙән арынырға, тәртипкә күнергә өйрәтте. Әле бына алкоголле эсемлектәр һатыуҙы тыйыу тураһындағы законда ҡаралғанса, дөйөм майҙаны 50 кв. метрҙан кәмерәк булған сауҙа нөктәләрендә араҡы бөтөнләй һатылмай башлағас, халыҡ еңел һулап ҡуйырға иткәйне лә, таяҡтың икенсе осо башҡа төшмәксе: был сара көмөшкәселәргә юл асты, улар ҡыуана хәҙер. Әлбиттә, беҙ улар менән һөйләшеп, ауылдаштарҙың айыҡ тормош рәүешен үҙ итергә ынтылышын аңлатып торабыҙ, ләкин көмөшкәсене аңлы рәүештә ҡылынған яуыз шөғөлөнән тыя, ҡулын бәйләй алмайбыҙ, шуныһы үкенесле. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары ошондай хәлде күҙҙә тотоп, алкоголгә ҡаршы законда көмөшкәселәргә ҡарата ла тыйыу һалһын ине. Юғиһә, был осраҡта ауыл граждандарының ғына түгел, хатта урындағы власть органдарының да көмөшкәгә ҡаршы көрәш сараһы, вәкәләтлеге юҡ. Ситтән спирт һатып алып ҡайтып, уға һыу ҡушып һатыусылар ҙа ояттың ни икәнен онотҡан. Ә инде күрәләтә ағыу етештереп йә булмаһа, әле әйткәнемсә, шикле шыйыҡса һатып байырға тырышыусы был әҙәмдәрҙең аңлылыҡ кимәленә иҫәп тотоуы ҡыйын.

***Мәрғизә АРЫҪЛАНОВА, Федоровка районы Бала-Сытырман ауыл хакимиәте башлығы:*** Беҙҙең хакимиәт биләмәһенән быйылғы "Айыҡ ауыл" республика конкурсында Яңы Яуыш ауылы ҡатнашты. Шуға бәйле бөтөн ауылдарыбыҙҙа ла сәләмәт йәшәү рәүешенә ынтылыш өҫтөнлөк итте. Ауыл магазиндарында араҡы һатыуҙан алынһа ла, һыра кәштәләрҙән төшмәне әле, ләкин халыҡ мөрәжәғәттәрен иҫкә алып, беҙ уны ла ауылыбыҙҙын "ҡыуыу" сараһын күрербеҙ, тигән уйҙамын, сөнки башланып торған яҡшы, изге ниәттәрҙе ярым-яртылаш ҡалдырырға ярамай. Ошо йәһәттән көмөшкә эшләп һатыусыларҙың бер ниндәй язаһыҙ, элек нисек эшләһә, шулай шөғөлдәрен дауам итеүе генә башҡа һыйырлыҡ түгел. Минеңсә, иң тәүҙә ана шуларҙың "эшмәкәрлеге"нә сик ҡуйырға ине, юғиһә, полиция ла, башҡа хоҡуҡ органдары ла бындай енәйәтсел ҡылыҡтарға "күҙ йомоуҙан" ары китә алмай.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төнөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТЕРЕ САҠТА ОЛОЛАЙЫҠ ШӘХЕСТЕ!

**Менәүәрә БОХАРБАЕВА, Хәйбулла районы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, хеҙмәт ветераны:** Бөгөн мине иң борсоғаны - беҙҙе халыҡ, милләт булараҡ юҡҡа сығара торған битарафлыҡ. Беҙҙе бөтөнләй икенсе ҡиммәттәр сырмап алған: аҡса табыу, мал ишәйтеү, йорт һалыу, машина алыу кеүек матди байлыҡ туплау бар уйыбыҙ. Баҙар шарттарына күсеүме, бала саҡта күрмәй үҫкән ялтырауыҡлы йыһаздарға ҡыҙығыуымы бер-беребеҙгә ҡарата булған ихтирамлы мөнәсәбәтте, яҡынлыҡты, туғанлыҡ тойғоһон ипләп кенә юҡҡа сығара башланы. Йәштәр ололарҙың кәңәшенә ҡолаҡ һалмағас, хәҙер улар ҙа аҡыл өйрәтеүҙән тартына һәм битарафлыҡҡа бирелә. Сепрәк-сапраҡҡа байып киттек тә, күңелебеҙ һайыҡты. Шул битарафлыҡ туғандар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе лә боҙа. Ҡасандыр яҙылмаған закон буйынса төп йорт иң кесе балаға ҡалдырылһа, бөгөн туғандар ата-әсәһенә һуғыш ветераны булараҡ бирелгән фатирҙы, ата йортон бүлешә алмай үҙ-ара талаша. Бай булырға теләп, кеше аҡсаны туғанлыҡтан да өҫтөн ҡуя хәҙер. Был башҡорт халҡын тарҡауландыра, яйлап юҡҡа сығара торған бер факт.

Икенсе борсоған нәмә - ҡурҡыу тойғоһо. Беҙҙе дөрөҫ аңламаҫтар, тип, әйткән һүҙебеҙ, эшләгән эшебеҙ өсөн ҡурҡабыҙ. Бер ваҡыт ейәнем ауырып китеп, дауаханаға һалдылар. Бала русса белмәй ине, киленемде табиптар: "Балағыҙ менән русса һөйләшегеҙ, бер нәмә аңламай, беҙ уның менән нисек эшләргә тейеш?" - тип әрләп ҡайтарғандар. Киленем хәҙер миңә, ейәнсәрең менән русса һөйләш, ти. Әммә мин ҡаты ғына итеп, бала тәү сиратта туған телен күңеленә һеңдереп, башҡорт рухлы булып үҫеп етергә тейеш, тип ҡуйҙым. Икенсе юлы был проблема ҡуҙғатылманы, ейәнсәрем саф башҡортса һөйләшеп үҫте, һуңынан рус телен дә яҡшылап өйрәнде. Әгәр ҙә шул ваҡытта киленемдең ҡурҡыу тойғоһо миңә лә күсһә, мин дә, ҡурҡып, бала менән русса һөйләшеп китһәк, нисек булыр ине?

Ә бит шундай осраҡтар йыш күҙәтелә. Бер-берендә тураһын әйтеүҙән тыйыу, ауыҙын яптырыу, фекерен белдерергә ирек бирмәү кеүек күренештәр ҙә бар. Шунан кеше әйтер һүҙен әйтә алмай, баҫылып, ахыр siктә битарафҡа әйләнә. Үҙ фекерен ҡурҡмайынса әйтә алған, үҙ көсө менән ниндәйҙер бейеклектәргә өлгәшкән шәхестәребеҙҙе ҙурлай белмәйбеҙ. Уның тура һүҙенән, ҡыйыулығынан, һәр нәмәгә үҙ ҡарашын асыҡ белдереүенән ҡурҡып, уны баҫып, шымдырып ҡуябыҙ ҙа, үлгәс кенә иҫкә төшөрәбеҙ. Талантлы, зыялы милләттәштәрҙе ваҡытында күреп, ололап өйрәнәйек, был башҡорт халҡын күтәрә торған сифаттарҙың береһе бит.

## ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**5 декабрҙән 15-нә тиклем гәзит-журналдарға ташламалы хаҡтар менән яҙылыу иғлан ителде. ВО665 индекслы "Киске Өфө"гә - 445 һум 56 тингә, ВО673 (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) индекслыһына - 451 һум 56 тингә яҙылып була, ә Бөйөк Ватан һуғышы һәм тыл ветерандары өсөн ташламалы хаҡ 398 һум 62 тин тәшкил итә.**

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

- Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға - **252 һум**.
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **252 һум**.

**Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (540 һум 78 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

- Гәзитебеҙгә яҙылып, бүләккә китаптар алыу тураһында 1-се биттә иғланды ҡарағыҙ. Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.
- **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.
- **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.
- Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республиканың муниципаль район һәм ҡала округтары Советтары рәйестәре менән осрашты. Башҡортостанда муниципаль бюджеттарҙың килемлелеге ҡала һәм райондарҙа ҡырҡа айырыла, әммә бөтә ерҙә лә резервтар бар: муниципаль милекте файҙаланыу, инвесторҙар йәлеп итеү һәм эшҡыуарлыҡты үҫтереү. Тик улар инвесторҙарҙың килеүенә юридик һәм техник яҡтан әҙер түгел. Рөстәм Хәмитов муниципалитет етәкселәрен инвесторҙар менән әүҙемерәк эшләргә, уларға уңайлы шарттар булдырырға ҡушты. Президент 1 ноябргә республиканың дөйөм бюджетына 136 миллиард һум килем кереүен иҫкә төшөрөп үтте. Был 2013 йылдың ғинуар-октябренә ҡарата 9 процентҡа күберәк.

✓ Республиканың муниципаль район һәм ҡала округтары Советтары рәйестәре менән осрашыуында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһенә - демографияға туҡталды. Уның билдәләүенсә, һуңғы өс-дүрт йылда төбәктә тыуым арта, ә райондарҙағы хәл киҫкен ҡала. Президент тыуымдың әлеге күрһәткестәрен (йылына 6-7 мең кеше) үткән быуаттың 60-сы йылдары менән сағыштырып, ул ваҡытта халыҡтың тәбиғи артымы "плюс 40 мең" булған, үлемде кәметеү буйынса саралар күреүҙе талап итте. Башҡортостанда уртаса ғүмер оҙайлығы 69,8 йәштән 74-кә етергә тейеш, тип билдәләне Рөстәм Хәмитов.

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республика муниципаль район һәм ҡала округтары хакимиәттәре башлыҡтары һәм медицина учреждениелары менән осрашыуҙа һаулыҡ һаҡлау муниципаль учреждениелары баш табиптарының эшен тәнҡитләп сығыш яһаны, улар алдына үлем осраҡтарын кәметеү һәм күрһәтелгән хеҙмәттәрҙең сифатын күтәреү бурысын ҡуйҙы. Рөстәм Хәмитовтың һүҙҙәренсә, Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау системаһы ҡорамалдар менән йыһазландырыу, кадрҙар әҙерләү буйынса Рәсәйҙә иң яҡшыһы. Былтыр тармаҡҡа республика бюджетынан - 45, 2014 йылда 54 миллиард һум йүнәлтелгән. Шул уҡ ваҡытта был өлкәлә тиҙ арала хәл итеүҙе талап иткән проблемалар ҙа етерлек. Башҡортостан Президенты йыл барышында һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләре буйынса 800-ҙән ашыу мөрәжәғәт алыуын хәбәр итте.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ХӘЛДӘРЕҢ НИСЕК, АУЫЛ ДАУАХАНАҺЫ?



**1982 йылда Белорет районына ҡараған Үрге Әүжәндән үҙебеҙҙең Ишембай районындағы Ҡолғона дауаханаһына күсеп эшләй башланым. Ноябрь урталарында ауыл советы рәйесе Хөдә Рәхмәтулла улы Әхмәтйәнов саҡыртып алды ла: "Дауаханаң буйынса бюджеттан бүленгән 8 мең һум самаһы аҡса бар. Әгәр ҙә уны тотонмаһаҡ, икенсе йылға аҡсаны күпкә кәмерәк бүләсәктәр. Медтехника, мебель, тауар, хужалыҡ тауарҙары магазиндарына барып, нәмәләр кәрәк, шуларҙы алып ҡайт!" - тип, минең алға чек кенәгәһен һалды.**

Декабрь урталарына тиклем Стәрлетамаҡтың "Медтехника" магазинынан физкабинетҡа аппаратуралар һәм башҡа ҡорамалдар, өр-яңы инструменттар, яңы карауаттар, тумбочкалар, түшәк кәрәк-яраҡтары, ауырыуҙар өсөн халат, тапочкалар ташыу менән мәшғүл булдым. Чек кенәгәһен кире ҡайтарған ваҡытта Хөдә Рәхмәтулла улы оло ҡәнәғәтлек менән: "Оһо... Аҡса тотона беләһең икән. Киләһе йылға нимәләр алыу, нимәләр эшләү тураһында уйлашыра тор", - тине. Икенсе йылына инде ауылда яңы дауахана төҙөү эшенә тотоноп киттек. 20 койкалы дауахана өсөн дарыуҙар ҙа кәрәгенсә алынды, ашатыу мәсьәләһе буйынса ла борсолманыҡ. Дауахана баҡсаһында картуф үҫтерҙек, аҙыҡ ҡалдыҡтарын ашатыу өсөн сусҡа алып, уларҙы 5-6 башҡа еткерҙек. Бәрәстәрен һатып, дауаханаға тағы ла кәрәк-яраҡтар алдыҡ.

Ул замандарҙа ауыл дауаханаларын ябыу түгел, киреһенсә, асыу, кадрҙар менән тулыландырыу программаһы тормошҡа ашырылды. Ҡолғонала, Маҡарҙа, Петровскийҙа, Этҡолда, Верхоторҙа, Ишәйҙә, Скворчихала һәм Әхмәрҙә 20 койкалы дауаханалар эшләне. Һәр ауылда тиерлек медпункттар бар ине. Эйе, ысын мәғәнәһендә үҙ халҡын ҡайғыртҡан илдә, хәстәрлекле атайҙай булған ил хужалары, етәкселәре ҡарамағында йәшәгәнбеҙ икән, тип уйлап та ҡуяһың. Утыҙ йыл ваҡыт үтте... Шул арауыҡ эсендә беҙ "Үҫешкән социализм" дәүләтендә йәшәргә тейеш инек. Юҡ бит! Тағы ла илдең аҫты-өҫкә әйләнде... Аңлайышһыҙ үҙгәртеп ҡороуҙар, нәмә эшләгәндәрен дә белеп булмаған ҡырылмаһа ҡырҡ партия, бәшмәк тиҙлегендә үҫеш алған олигархтар, берләштерелгән министрлыҡтар һәм шул уҡ ваҡытта бүлгеләнгәндәре... Бөтөн үҙгәрештәрҙе һәм уларҙың кире яҡтарын һанап та бөткөһөҙ.

Мин ябай ауыл дауаханаларында эшләгән табип булараҡ, халыҡ менән бөгөн шул дауаханаларға ҡағылышлы хәлдәр тураһында фекер алышырға теләйем. Был аҙымға мине 2015 йылдың башынан койкалары булған ауыл дауаханаларын көндөҙгө стационарға әйләндереү һәм уларҙың ҡайһы берҙәрендә күпмелер паллиатив урындар ҡалдырыу тураһындағы Башҡортостан Республикаһы Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 22 октябрҙәге 3129-Д бойороғо этәрҙе.

Советтар Союзының һаулыҡ һаҡлау системаһы һәр кешегә йыл әйләнәһенә һаулығын нығытыу, дауаланыу өсөн ил бюджетынан 2 мең һум самаһы аҡса бүлде һәм был сығым йыл һайын арта барҙы (был йән иҫәбенә финанслау тип аталды). Халыҡ һаны 3 мендән артҡан ауыл советтарында ауыл дауаханалары төҙөүгә мөмкинлек бирелде. Әйтәйек, 3 мең халҡы булған ауыл дауаханаларына йылына 6 миллион һум аҡса бирелеп, статьяларға бүленә ине: 1-се статья: эш хаҡы фонды - дауахanala эшләгән 30-ға яҡын хеҙмәткәрҙең йыллыҡ эш хаҡы күләме. 2-се статья: йыл әйләнәһенә 20 койкала ятып дауаланасаҡ кешеләргә етерлек күләмдә дарыуҙар, бәйләү материалдары һәм башҡаларҙы алыу өсөн тотоноласаҡ аҡса. 3-сө статья: йыл әйләнәһенә уларҙы ашатыу өсөн аҙыҡ-түлек алыуға тотоноласаҡ күләм. Ошондай статьялар дауаханаларҙың ҡеүәтенә, профиленә ҡарап, 12-нән 15-кә етә ине.

Бына ошо - йән иҫәбенә - финанслау Ер йөҙөндә иң алдынғы ысул һаналды һәм уны бүтән илдәр ҙә өйрәнеп үҙләштерҙе, үҙҙәренсә үҙгәрештәр индереп үҫтерҙе. Был ысын мәғәнәһендә "закон менән нығытылған ФОМС" ине. Беҙҙең медицинаға ошо юлдан тайпылмай барырға, бүленгән аҡсаны "бер кеҫәлә" генә йөрөтөп тотонорға һәм уны арттырыу юлдарын эҙләргә, көйләргә кәрәк булған. Үҙгәртеп ҡороуҙар осорона аяҡ баҫыу менән "бюджеттың наҡыҫлығына" һылтанып, Һаулыҡ һаҡлау һәм Социаль үҫеш министрлыҡтарын берләштереү һәм шул министрлыҡҡа һөнәре-белеме менән медицинаға ҡағылышы булмаған белгестәрҙе тәғәйенләү - иң тәүге һәм барлыҡ кире һөҙөмтәләрен бөгөнгәсә татытҡан хата булды. Ошо осорҙа бюджеттың наҡыҫлығына һылтанып, беренсе оптималләштереү тулҡыны үтте. Халыҡ иҫәбе кәмей төшкән һәм ҡалаларға яҡын урынлашҡан ауылдарҙа койка-урын булған дауаханалар бөтөрөлөп, "табип амбулаториялары"на ҡалдырылды, байтаҡ ФАП-тар ябылды. Шулай уҡ үҙәк район дауаханаларындағы койкалар һаны кәметелде. Һөҙөмтәлә ауырыуҙарға бөгөн кардиология, неврология бүлексәләренә ятырға сират көтөп, аҙна-айлап йөрөргә тура килә.

Ғәмәлдә, бөгөн социаль үҫеш тармағы медицинаның елкәһенә менеп ултырып, үҙ йүнәлешен алып бара, үҙенсә эшләргә күнектерә. Был берләштереүҙең иң тәүге һәм төҙәтеп булмаҫтай һөҙөмтәһе: Рәсәйҙе инвалидтар иленә әйләндереү. Колхоз, совхоздарҙа эшләгән һауынсы-малсылар, сөгөлдөрсөләр, тракторсы-шоферҙарҙың күптәренең ғүмер оҙайлығы 65-70-кә лә етмәй. Рәсәйҙә уртаса ғүмер оҙайлығы 58-59 йәш булғанда, шул йәшкә еткәндәрҙе даими инвалидтар тиеп тә була. Шул яҡтан ҡарап та уларға инвалидлыҡҡа күсереүҙе тәҡдим иткәндәрҙер ҙә. Ә ысынында нисек килеп сыҡты? Шап-шаҡтайҙар, йүгереп йөрөп һөмһөҙләшкәндәр инвалидлыҡ алды. Ярай, алһындар ҙа ти. Ә бит булған койкаларҙы һаҡлап ҡалырға, дауаханаларҙы япмаҫҡа мөмкинлек биргән йыл да бүленәсәк бюджет аҡсаһы миллиондарғаса артҡан инвалидтарҙың кеҫәһенә китте. Етмәһә, был инвалидтар мәғәнәһеҙ рәүештә федералдарға һәм төбәктекеләргә бүленеп, льготалар менән тәьмин ителде (бушлай йәки ярты хаҡына дарыуҙар алыу өсөн). Дарыухана селтәрендәге аңлайышһыҙ ҡаршылыҡтар, буталсыҡтар арҡаһында улар рецепт менән дарыуҙар алыуҙан баш тартып, льготаларын "тәңкәләштерҙе", йәғни аҡсалата ала башланы (былар инде асылда шәхси ҡулдарға күскән дарыуханалар селтәренә генә файҙаға булды).

(Дауамы 6-сы биттә).

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

## ГӘЗИТ - МИНЕҢ УҠЫТЫУСЫМ

**"Киске Өфө" гәзитен тулҡынланып көтөп алам. Ул - минең ярҙамсым, таянысым, кәңәшсем. Гәзит -минең уҡытыусым.**

Ауыр саҡтарҙа, тормош ҡуйған һорауҙарға яуап эҙләгәндә "Киске Өфө"мә мөрәжәғәт итәм. Ҡайһы битен генә асма, ниндәй генә рубриканы алма, ул мине йәшәргә өйрәтә. Һәр дәресемде гәзиттән алынған аҡыл менән башларға тырышам. Уҡыусыларымдың үҫешен күреп, битараф булмауҙарына шатланам. Бигерәк тә "Аҡыл-ҡаҙна", "Уңыш ҡаҙан", "Йәшәйеш ҡағиҙәләре" рубрикалары оҡшай. "Диалог"ты яратып уҡыйым, зыялыларыбыҙҙың һүҙен ишетеп ҡыуанам, зиһенде һиҫкәндерерлек фекер ишетеп уйланам. " Тарихнамә", " Фекер төйөнө" рубрикаларын ҡат-ҡат уҡып сығам. Гәзитебеҙҙең башҡорт тарихына, туған телебеҙҙең бөгөнгөһөнә, киләсәгенә битараф булмауы оҡшай. Был ялтырауыҡлы һүҙҙәр түгел. Был минең күңел төпкөлөнән сыҡҡан рәхмәт һүҙҙәрем.

Күптәр аптырай: нисек инде гәзит иптәш булһын? Аңламаусылар бар. Оҙаҡ уйлап, уларға ла яуап таптым: һәр кемдең үҙ юлы, үҙ һуҡмағы, һәр кем күңеленә рухи аҙыҡты үҙе теләгән сығанаҡтан ала. Ә мин Йәншишмә һыуын "Киске Өфө"нән алам. Милләттәштәремде башҡорт баҫмаларына яҙылырға саҡырам. Уҡытыусыларға өндәшәм. Беҙ булмаһаҡ, тағы кем, тип уйлайым. Мин - башҡорт, башҡорт теленә тейешле иғтибар юҡ, тип ҡысҡырырҙан алда, ниндәй милли баҫмаларға яҙылғаның тураһында, ғаиләңдә ниндәй гәзит-журналдар уҡылғанын уйларға кәрәклеген иҫкә төшөрәм. Эште һәр кеше үҙенән башлаһын, күмәкләгән - яу ҡайтарған, тиҙәр бит.

**Венера СИТДИҠОВА,**
**уҡытыусы.**
**Салауат районы.**

## ДӘРЕСКӘ УНҺЫҘ ИНМӘЙЕМ...

**Гәзит, журналдар - кешеләр кеүек. Кемеһелер менән беренсе осрашыуҙа уҡ уртаҡ тел табып, оҙайлы ваҡытҡа үҙеңдең әңгәмәләшең итәһең. Ә икенселәрен, нисек кенә тырышһаң да, күңелеңә яҡынайтып булмай. "Киске Өфө"нө беренсе тапҡыр ҡулыма алып уҡып сыҡҡандан алып, ғүмерлек дуҫым һәм кәңәшсем иттем.**

Эскерһеҙ, ғәҙел, кешелекле булыуы, тормошобоҙҙоң күп өлкәһен төрлө яҡлап яҡтыртыуы менән күңелемә яҡын "Киске Өфө". Һәр битенән изгелек, оптимистик рух, халыҡсанлыҡ, әҙәплелек, намыҫлылыҡ, йылылыҡ бөркөлөп торған гәзит һәр өйҙә аҙна һайын көтөп алынған ҡәҙерле һәм яҡын туғанылай булыуына шикләнмәйем.

Матур телдә яҙылған баҫманы уҡып сығыу - үҙе бер ҡыуаныс. Гәзиттә һәр кем, ниндәй йәштә булыуына, ҡайҙа йәшәүенә, кем булып эшләүенә ҡарамаҫтан, үҙенә файҙалы һәм ҡыҙыҡлы мәғлүмәт таба. Үҙем, тарих уҡытыусыһы булараҡ, бер дәрескә лә "Киске Өфө"һөҙ инмәйем, сөнки унда баҫылған тарихи мәғлүмәттәр менән уҡыусыларымды таныштырыуҙы үҙемдең бурысым, тип һанайым. Халҡыбыҙға ҡағылышлы бай, йөкмәткеле мәҡәләләрҙе бер урынға туплап бирә барыуығыҙ хуплауға лайыҡ. Артабан да кәрәкле, ҡәҙерле һәм абруйлы баҫма булып ҡалыуығыҙҙы теләйем.

**Рөстәм ШӘЙӘХМӘТОВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты төбәк штабының киңәйтелгән ултырышы уҙҙы. Форумда йәмғиәттәге көнүҙәк мәсьәләләр тикшерелде, шулай уҡ уларҙы хәл итеү юлдары билдәләнде. Форумда ҡатнашыусылар республикала йәшәүселәрҙе борсоған төп проблемаларҙы күтәрҙе. Төбәк киң мәғлүмәт сараларына ярҙам, дәүләт һатып алыуҙары, патриотик тәрбиә биреү, дауалау учреждениеларында медицина ҡорамалдарын файҙаланыу һөҙөмтәлелеге, физик мөмкинлектәре сикләнгән кешеләргә социаль ярҙам, иҫке һәм авария хәлендәге торлаҡтан күсереү программаһын тормошҡа ашырыу, уҡытыусыларҙың эш хаҡын күтәреү, медицина учреждениеларын оптималләштереү - ошо һорауҙарҙың барыһын да Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының әүҙем ағзалары контролгә алған.

✓Республиканың баш ҡалаһында шыршы баҙарҙары эшләй башланы. Ҡала бының өсөн 113 сауҙа нөктәһе бүленгән. Яңы йыл шыршылары "Ауыл хужалығы йәрминкәһе", "Юрматы", "Пушкин", "Сипайлово", "Гагарин" сауҙа-сервис комплекстарында, "Алтын", "Көньяҡ полюс", "Шаҡша", "Беҙҙең Өфө", "Кувыкин" сауҙа комплекстарында, "Корсо" сауҙа-сервис комплексы һәм Ленин исемендәге майҙандарҙа, Спорт Һарайы алдында һатыла. Быйыл республикала Яңы йылға 143 мең ылыҫлы ағастар киҫеләсәк.

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов ҡушыуы буйынса, Сибай ҡалаһында "Урал батыр" сәсәндәр үҙәге төҙөләсәк. Киләһе йылдан эшләй башалясаҡ был үҙәктә сәсәнлек серҙәренә төшөндөрөүҙән тыш, сәсәндәр ижадында йыш ҡулланылған уйын ҡоралдарында - ҡыл ҡумыҙ, ҡурайҙа уйнарға ла өйрәтәсәктәр. Артабан Сибай колледжында "Халыҡ ижады" бүлегенә бюджет нигеҙендә студенттар ҡабул итеү ойоштороласаҡ. Әлеге мәлдә "Эпос ғилеме", "Өҙләү", "Импровизация" буйынса уҡыу программалары эшләнә. Үҙәк сәсәниә Асия Ғәйнуллинаның Сибай ҡалаһында ун йылға яҡын эшләп килгән сәсәндәр мәктәбе нигеҙендә төҙөлә.

✓Башҡортостанда иҫке һәм авария хәлендәге йорттарҙа йәшәгән кешеләр ниндәй районға күсереүҙәрен алдан беләсәк. Был хаҡта Өфөлә уҙған БР Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты төбәк штабының киңәйтелгән ултырышында билдәле булды. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Сергей Афонин был мәсьәлә 2015 йылдың беренсе кварталында хәл ителәсәк, тип белдерҙе.

**“Башинформ”дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ҠЫТАЙ МЕНӘН ХЕҘМӘТТӘШЛЕК НЫҒЫЙ

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов етәкселегендәге делегация рәсми визит менән Ҡытай Халыҡ Республикаһынан ҡайтты. Сәфәрҙең төп маҡсаты - юл-транспорт инфраструктураһының, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, ҡала территорияларын төҙөкләндереү үҫеше менән танышыу ине. Күп нәмәне муниципалитет вәкилдәре үҙебеҙҙә ҡулланылышҡа алыр өсөн билдәләп барҙы.**

Өфөләрҙе бигерәк тә ҡала транспортының үҫеше ныҡ ҡыҙыҡһындырҙы. Бөгөн Ҡытайҙа һуңғы туҡталышта алмаштырыу йәки көс йыйҙырып алыу мөмкин булған аккумуляторҙар ҡуйылған электробустар популяр. Былдай транспорт 200 километрға тиклем йөрөй, тимәк, ҡала өсөн уңайлы.

Шулай уҡ Хэфэй ҡалаһының ер аҫты таҙартыу ҡоролмалары эше лә иғтибар үҙәгендә торҙо. Һуңғы бер нисә йылда Өфөлә лә таҙартыу ҡоролмалары модернизацияланып, төрлө күрһәткестәр донъя стандарттарына еткерелгән. Ә инде ҡытайҙарҙың тәжрибәһе ошо йүнәлештә планлы эш алып барыуға булышлыҡ итәсәк.

Сәфәр барышында хужаларҙың территорияларҙы төҙөкләндереү элементтарына - бордюрҙарҙан алып тротуар плиткаһына тиклем гранитран эшләнеүе айырым иғтибарға лайыҡ. Был материал төҙөлөштә лә даими ҡулланыла. Ҡытайҙар иҫәпләүенсә, граниттың хаҡы ҡиммәтерәк булһа ла, уның хеҙмәт итеү ваҡыты ла, башҡа материалдар менән сағыштырғанда, оҙайлыраҡ.

Өфө делегацияһы шулай уҡ Хэфэй ҡалаһының JAC йөк машиналарын, Ankai электр автобустарын эшләү майҙансыҡтарында, Haier көнкүреш техникаһы һәм Lenovo компьютерҙары эшләү предприятиеһында булып, етештереү һөҙөмтәлелеген күтәреү мәсьәләләре, ошо йүнәлештә ҡулланылған методикалар менән танышты. Һуңынан ике ҡала араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Документ иҡтисад, социаль һәм мәҙәни өлкәләге бәйләнештәрҙе күҙаллай.

## ОПТИМИСТАР... ӨФӨЛӘ!

**"Росгосстрах" компанияһы октябрҙә Рәсәй иҡтисадының торошон асыҡлау буйынса үткәргән тикшеренеүҙәр Волга буйы федераль округында йәшәүселәр араһында иң оптимистар Өфөлә (67 процент) һәм Ҡаҙанда (69 процент) булыуын асыҡлаған.**

Өфө халҡының оптимизмы былтырғы менән сағыштырғанда дүрт процентка артҡан. Шулай уҡ үҙҙәре эшләгән предприятие һәм ойошманың иртәгәһе көнөнә ышанысы артыусылар күләме 75 процентҡа еткән (былтыр 72 процент булған). Ил буйынса уртаса күрһәткес - 79 процент.Тулыһынса йәки дөйөм алғанда тормоштары менән ҡәнәғәт булған өфөләр һаны ла арта. Октябрҙә был күрһәткес 82 процент булған (былтыр - 80 процент).

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨФӨ УҠЫТЫУСЫЛАРЫ...



## ярышҡа сәмләнде

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһының "Башҡортостан баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы - 2015" XVIII ҡала конкурсы һәм "Башҡортостан баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2015" XI конкурсы старт алды.**

Быйыл "Башҡортостан баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы - 2015" XVIII ҡала конкурсында бөтәһе 36 педагог үҙ көсөн һынаясаҡ. Жюри ағзаларына 11 төрлө предмет буйынса уҡытҡан белгестәрҙе баһаларға тура киләсәк. Өфө ҡалаһының иң алдынғы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы 19 конкурсант араһынан һайланасаҡ. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов конкурсанттарға уңыштар теләп, был ярыштарҙың ҡала педагогтары өсөн ниндәй ҙур әһәмиәткә эйә булыуын билдәләне.

- Башҡортостандың баш ҡалаһы юғары квалификациялы, белемле уҡытыусылары менән дан тота. Бөгөн ҡаланың дөйөм белем биреү учреждениеларында 5500-ҙән ашыу педагог эшләй. Улар араһында 2 меңдән ашыуы киләсәк быуынды тәрбиәләүҙә индергән өлөштәре өсөн юғары наградаларға өлгәшкән, 250-нән ашыу уҡытыусы "Мәғариф" алдынғы милли проект еңеүселәре. Үткән уҡыу йылы һөҙөмтәләре буйынса БР мәғариф министрының тармаҡ буйынса наградалары менән 200 кеше бүләкләнде, "БР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы" исеме 5 уҡытыусыға бирелде, 13 хеҙмәткәр ҡала округы хакимиәте премияһын алды, 11 педагог БР Президенты премияһына лайыҡ булды. Быйылғы конкурс һөҙөмтәләре лә беҙгә иң юғары квалификациялы белгесте асыҡларға, иң мөһиме, бөтәһенә лә өлгө булырҙай шәхесте билдәләргә мөмкинлек бирер, тип ышанам", - тине Сынтимер Биктимер улы сығышында.

Әйткәндәй, ҡатнашыусылар араһында оҙаҡ йылдар мәктәптә эшләү дәүерендә ҙур тәжрибә туплап өлгөргән уҡытыусылар менән бер рәттән, ярышырға баҙнат итеүсе, уларҙан өйрәнеп үҫеп еткән йәш педагогтар күп. 2014 йылда Өфө ҡалаһының йыл уҡытыусыһы тип танылған рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гүзәл Леонова йәш саҡтан уҡ үҙендә күрһәтә алыу, яңы бейеклектәргә үрләү, мөмкинлектәрендә файҙаланып, һөнәри яҡтан үҫешеү, белемендә камиллаштырыу, тәжрибә туплау ниндәй оло әһәмиәткә эйә булыуын билдәләп, йәш конкурсанттарҙы хупланы. "Башҡортостандың баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы - 2015" XVIII ҡала конкурсы һәм "Башҡортостан баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2015" XI конкурстарын баһалаясаҡ жюри рәйесе, һәр педагогтың эш тәжрибәһен күрмәйенсә, ярыш тураһында нимәлер һөйләү урынһыҙ, тип билдәләп үтһә лә, быға тиклем уҙғарылған ярыштарҙа әйтелгән иҫкәрмәләр, тәнҡит һүҙҙәре иҫәпкә алынғандыр, моғайын. Ярыш 18 декабргә тиклем дауам итә, ә һөҙөмтәләре ғинуар айында конкурсты ябыу тантанаһында билдәле буласаҡ.

УРА!

# НИҺАЙӘТ, ҠЫШ КИЛДЕ!

(Башы 1-се биттә).



Өфө ҡала округы хакимиәтендә лә ошондай проблема булыуын таныйҙар, уны хәл итеү өсөн төрлө варианттар өйрәнелә. Ҡар иретеүсе реагенттарҙы дөрөҫ ҡулланыу, уларҙың ҡулланылышын ҡыҫҡартыу маҡсатында Ҡытай, Финляндия, Скандинавия ярымутрауы илдәренең тәжрибәһе өйрәнелә. Мәҫәлән, Ҡытайҙың тәбиғәт шарттары буйынса Өфөгә оҡшаш Цицикар ҡалаһында реагенттарҙы бөтөнләй ҡулланмайҙар, ҡарҙы "ҡоро" юл менән таҙарталар. Шулай уҡ ҡышын был ҡалала махсус тиҙлек режимы ҡулланыла, һәр кем көн торошона нығ иғтибар итә.

Өфөлә лә ҡом-тоҙ ҡатнашмаларын, реагенттарҙы ҡулланыуҙы кәметергә ҡарар ителде. Урамдарҙы, йорт араларын, тротуарҙарҙы таҙартҡанда механик юлға өҫтөнлөк биреләсәк.

- Ҡаланы ҡарҙан махсус техника ярҙамында механик юл менән таҙартабыҙ. Нығ кәрәк саҡтарҙа ғына самалап ҡом-тоҙ ҡатнашмаһын ҡулланабыҙ, был ҡышҡа 96 тонна ҡатнашма әҙерләнгән. Һуңынан бөтә ҡарҙы ла махсус полигондарға һәм ҡар иретеү пункттарына сығарабыҙ. Ҡыш башынан алып 60 мең тоннанан ашыу ҡар сығарылды ла инде. Ошондай ҡарар ҡабул итеү арҡаһында юлдарҙы таҙартыу сифаты кәмемәне, - тип һөйләне журналистар менән осрашыуҙа Өфө ҡала округы хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы урынбаҫары Сергей Плотников.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөнөң Дим районы "Орион" балалар һәм үҫмерҙәр ижады һарайында "Еңеү байрағы" эстафетаһы башланыуға арналған тантаналы митинг уҙҙы. Байраҡты Башҡортостандың баш ҡалаһына "Еңеү байрағын ҡаршылау" федераль социаль-патриотик акция сиктәрендә килтерҙеләр. Ул Еңеү байрағының музейҙа һаҡланған күсермәһе. Өфө илебеҙҙең ун ҡалаһы менән бер рәттән эстафетаны ҡабул итте. Патриотик эстафетаның башланыу датаһы осраҡлы һайланмаған. 9 декабрь - Ватан Геройҙары Көнө, тап бөгөн Советтар Союзы Геройҙарын, Рәсәй Геройҙарын, Изге Георгий ордены һәм Дан ордены кавалерҙарын хөрмәтләйҙәр. Еңеү байрағы менән бергә ҡалала "Үлемһеҙ полк" маршы башланды.

✓Башҡортостандан 114 уҡыусы Кремлгә Президент шыршыһына барасаҡ. Байрамға саҡырылған уҡыусылар 24 декабрҙә Р. Ғарипов исемендәге Башҡорт гимназия-интернатына йыйыла. 25 декабрҙә делегация махсус рейс менән Мәскәүгә оса. Балаларҙы һәм уларҙы оҙатып йөрөүселәрҙе "Измайлово" ҡунаҡханаа комплексына урынлаштырасаҡтар. Илдең төп шыршы байрамы 26 декабрҙә Дәүләт Кремль Һарайында уҙа. Унда бөтә илдән ете мең тирәһе бала ҡатнаша. Өфөлә һәләтле балалар өсөн Президент шыршыһы 22 декабрҙә үтә.

✓Таллиндың (Эстония) Теллискиви ижади үҙәгендә 2014 йылдың көҙөндә донъя күргән китаптарҙың презентацияһы уҙҙы. Тәҡдим ителгән яңы китаптар араһында "Ағиҙел" башҡорт мәҙәни йәмғиәте рәйесе Флүзә Хәйруллина төҙөгән "Эстония иҫләй. Салауат Юлаев" китабы ла бар. Китап башҡорт халҡының милли геройының тыуыуына 260 йыл тулыуға бағышланған. Китаптың икенсе баҫмаһы октябрҙә донъя күрҙе. Унда Эстонияла һәм Башҡортостанда Салауат Юлаевтың тыуыуына 260 йыл тулыуға арнап уҙғарылған сараларҙың фотоһүрәттәре урын алған.

✓Өфөлә Мәжит Ғафуриҙың йорт-музейында "Боронғо ҡала серҙәре" артефакттар һәм фотоһүрәттәр күргәҙмәһе асылды. Унда "Өфө-II ҡаласығы" ҡомартҡыһының материалдары урын алған. "Өфө-II ҡаласығы" Көньяҡ Уралда иң эре ҡомартҡыларҙан һанала. Ҡаласыҡ 1953 йылда асылған, ҡаҙыныу эштәре 2006 йылда башланған. Күргәҙмә Мәжит Ғафуриҙың йорт-музейында 18 декабргә тиклем эшләйәсәк, инеү ирекле. 19 декабрҙән Яңы йылға ҡәҙәр БР Милли музейында уҙасаҡ республиканың мәҙәни мираҫы объекттары фотокүргәҙмәһендә ҡатнаша.

ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!

**4 декабрҙә Рәсәй Президенты Владимир Путин 11-се тапҡыр Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны. Уның телмәренең күп өлөшө иҡтисадҡа бағышланды. Әммә Путин башҡа мөһим мәсьәләләрҙе лә иғтибарҙан ситтә ҡалдырманы. Бөгөн гәзит уҡыусыларға Мөрәжәғәтнамәләге иң төп цитаталарҙы тәҡдим итәбеҙ.**

# СУВЕРЕНИТЕТ - УЛ МОТЛАҠ ШАРТ!



**Стратегик йүнәлеш тураһында.** Барлыҡ пландарыбыҙҙы тормошҡа ашырыу, дәүләттең төп социаль бурыстарын үтәү өсөн беҙгә иҡтисадта, финанс мәсьәләләрендә, социаль үсеш өлкәһендә һәм, иң мөһиме, стратегик йүнәлешебеҙ ниндәй булырға тейеш, тигән һорауға яуап биреү мотлаҡ. Рәсәй донъя өсөн, хеҙмәттәшлек өсөн, сит ил инвестицияларын йәлеп итеү өсөн, берлектәге проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн асыҡ булып ҡаласаҡ. Әммә үсеш бары тик үҙебеҙҙән торғанын аңларға тейешбеҙ. Әгәр үсеш өсөн эшләнәк, ә хәл-ваҡиғаларҙың унышлы ағышына йәки тышҡы конъюнктураға ғына һылтанмаһаҡ, уңышҡа өлгәшәсәкбеҙ.

**Украина тураһында.** Рәсәйҙең Украинаға ғына түгел, элекке СССР-ҙың туғандаш республикаларына уларҙың суверенитетҡа ынтылыуына ярҙамлашыуы һәм ниндәйҙер кимәлдә 1990 йылдар сигендә ошо процесҡа булышлыҡ итеүе яҡшы билдәле. Шунан алып беҙҙең позицияла бер нәмә лә үҙгәрмәне.

**АҠШ тураһында.** Ҡайһы ваҡыт хатта кем менән һөйләшеү яҡшыраҡ икәнен белмәйһең: ҡайһы бер илдәрҙең хөкүмәттәре менәнме, әллә туранан-тура уларҙың Америкалағы ҡурсалаусылары һәм бағыусылары менәнме.

**Ҡоралланыу тураһында.** Беҙ ҡиммәтле ҡоралланыуға баш тығырға уйламайбыҙ. Әммә яңы шарттарҙа илебеҙҙең оборона ҡеүәтен ышаныслы һәм гарантиялы тәьмин итәсәкбеҙ. Бында бер ниндәй шик булырға тейеш түгел. Рәсәйҙең мөмкинлеге лә, стандарт булмаған юлдары ла бар. Бер кем дә хәрби йәһәттә Рәсәйҙән өҫтөн була алмаясаҡ. Беҙҙең армия заманса, хәрби һәләтле, хәҙергесә итеп әйткәндә, илтифатлы, әммә ҡеүәтле.

**Көнбайыш менән мөнәсәбәттәр тураһында.** Беҙ донъяның күп төрлөлөгө яҡлы. Сит илдәге халыҡҡа ысынбарлыҡты еткерәсәкбеҙ. Барыһы ла Рәсәйҙең боҙоп күрһәтелгән, ялған образын түгел, уның ысын йөҙөн күрһен. Эшлекле һәм гуманитар бәйләнештәрҙе, ғилми, мәғариф, мәҙәни бәйләнештәрҙе әүҙем рәүештә алға һөрәсәкбеҙ. Быны хатта ҡайһы бер илдәрҙең хөкүмәттәре Рәсәй тирәләй ҡабат тимер ҡоршау элергә тырышҡан ваҡытта ла эшләйәсәкбеҙ. Беҙ бер ваҡытта ла үҙ-үҙебеҙгә бикләнеү, ксенофобия, шикләнеүсәнлек, дошмандар эҙләү юлынан китмәйәсәкбеҙ. Былар барыһы ла - көсһөҙлөк күрһәткесе, ә беҙ көслө һәм үҙ-үҙебеҙгә ышанабыҙ.

**Санкциялар тураһында.** Был АҠШтың һәм уның союздаштарының Украиналағы ваҡиғаларға һәм дәүләт түңкәрелешенә, хатта "Ҡырым яҙы"на бәйле беҙҙең позицияға ҡарата реакцияһы ғына түгел. Әгәр ошолар барыһы ла булмаһа ла, улар Рәсәйҙең үсешә барған мөмкинлектәрен тотҡарлау, уға йоғонто яһау, ә иң яҡшыһы - үҙ мәнфәғәттәрендә файҙаланыу өсөн ниндәй ҙә булһа икенсе сәбәп табырҙар ине.

...Алда ауыр, көсөргәнешле мәл, һәм күп нәмә һәр ҡайһыбыҙҙың үҙ урынында нимә эшләүенән тора. Санкциялар һәм тышҡы сикләүҙәр - ҡуйылған маҡсаттарға тиҙерәк, һөҙөмтәлерәк өлгәшеү өсөн стимул ул.

**Капиталға амнистия тураһында.** Рәсәйгә ҡайтарылған капиталды тулыһынса аҡлауҙы тәҡдим итәм. Һәм быны, улар тейешле ҡарар ҡабул итһен өсөн, кешеләргә аңлатырға кәрәк. Нимә ул тулыһынса аҡлау? Әгәр кеше үҙенең аҡсаһын һәм милеген Рәсәйҙә легаллештерә икән, ул был капиталдың ҡайҙан барлыҡҡа килгәнен асыҡлау өсөн төрлө органдарға, шул иҫәптән хоҡуҡ һаҡлау органдарына, саҡырып йөҙәтмәйәсәктәренә ныҡлы гарантия аласаҡ. Ул енәйәт һәм административ эҙәрлекләүгә дусар булмаясаҡ. Уға һалым һәм хоҡуҡ һаҡлау органдарының да һорауы булмаясаҡ. Әйҙәгеҙ, быны хәҙер эшләйек. Әммә бер тапҡыр ғына. Рәсәйгә килергә теләүселәрҙең барыһы ла ошо мөмкинлектән файҙаланырға тейеш.

**Аҡса тураһында.** Беҙ барыбыҙ ҙа аҡса төрлөсә барлыҡҡа килгәнен аңлайбыҙ. Улар төрлөсә эшләп алына. Әммә беҙгә иҡтисад һәм ил тарихында офшор битен ябып ҡуйыу кәрәклегенә инанам.

**Һумдың курсы тураһында.** Бөгөн беҙ валюта килеүенең ҡыҫҡарыуы һәм дәүләт валютаһының - һумдың курсы түбәнәйеүен күрҙек. Рәсәй банкы "йөҙөүсе" курсҡа күсте, әммә был уның һумдың курсына йоғонто яһауҙан ситләшеүен аңлатмай һәм һум курсы финанс спекуляциялары объекты була алмай. Мин Рәсәй Банкын һәм хөкүмәтте Рәсәй валютаһы курсы тирбәлгән ваҡытта спекуляция яһап ҡалырға тырышыусыларҙың барлыҡ теләген юҡҡа сығарыу өсөн ҡаты саралар күрергә саҡырам. Властар был спекулянттарҙың кем икәнен белә, уларға йоғонто яһау ҡоралдары бар. Уларҙы ҡулланыу ваҡыты етте.

Әлбиттә, һумдың көсһөҙләнеүе ҡыҫҡа ваҡытлы инфляция хәүефен көсәйтә. Тәү сиратта килеме түбән булған граждандарҙың мәнфәғәтен яҡларға, ә хөкүмәткә һәм төбәктәргә аҙыҡ-түлек, дарыу, көндәлек тормошта кәрәкле башҡа тауарҙар баҙарындағы хәл-торошто контролдә тоторға кәрәк. Быны эшләргә була һәм эшләү зарур.

**Азатлыҡ тураһында.** Хәҙер иң мөһиме - граждандарға үҙҙәрен асыуға мөмкинлек бирергә. Иҡтисадта, социаль өлкәлә, граждандар инициативаһында үҫеү өсөн азатлыҡ биреү - ул тышҡы сикләүҙәргә лә, эске проблемаларыбыҙға ла иң яҡшы яуап. Граждандар үҙ тормошон яҡшыртыуҙа ни тиклем әүҙем ҡатнаша, ни тиклем улар иҡтисади, сәйәси яҡтан үҙ аллы, Рәсәйҙең ҡеүәте шул тиклем юғарыраҡ буласаҡ.

**Сәләмәтлек тураһында.** Быйыл һаулыҡ һаҡлауҙың глобаль рейтингында Рәсәй беренсе тапҡыр имен ил тип табылған - бында уртаса ғүмер оҙайлығы 70 йылдан артып китә. Әлеге ваҡытта Рәсәйҙә был күрһәткес 71 йыл. Яҡын киләсәктә был һанды уртаса 74 йылға еткерергә, үлем осраҡтарын кәметергә нигеҙ бар. Ошо йәһәттән 2015 йылды йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары менән көрәш йылы тип иғлан итергә тәҡдим итәм.

**Бизнес һәм власть тураһында.** Барыбыҙ ҙа Рәсәйҙең именлеген теләйбеҙ. Бизнес һәм дәүләт мөнәсәбәттәре дөйөм эшмәкәрлек философияһында, партнерлыҡ мөнәсәбәттәрендә һәм тиң хоҡуҡлы диалогта ҡоролорға тейеш.

...Эшлекле мөхиттә, тормоштоң башҡа өлкәләрендәге кеүек үк, яуаплылыҡ, ҡанунды һәм йөкләмәләрҙе үтәү мотлаҡ. Күпселек эшҡыуарҙар тап шулай эшләй ҙә инде. Үҙҙәренең эшлекле сифаттарына һәм социаль абруйҙарына тап төшөрмәҫкә, ысын илһөйәр булараҡ, илгә файҙа килтерергә тырышалар. Шундай кешеләргә йүнәлеш тоторға кәрәк тә инде.

**Бизнес эҙмышын еңеләйтеү тураһында.** Бизнестан сикләүҙәрҙе мөмкин ҡәҙәр алырға, уны бәйләнсек күҙәтеүҙән һәм контролдән азат итергә кәрәк. Һәр тикшереү асыҡ булырға тейеш. Киләһе йылдан башлап бының өсөн махсус реестр эшләй башлаясаҡ, ул ниндәй орган ниндәй маҡсаттан сығып тикшереү үткәргәнен, ниндәй һөҙөмтә алынғанлығы тураһында мәғлүмәт бирергә тейеш. Был бер сәбәпһеҙ, бигерәк тә заказ буйынса тикшереү үткәреүселәрҙең визитына кәртә ҡуясаҡ. Был проблема бизнес өсөн генә түгел, бюджет, муниципаль учреждениелары, социаль НКО-лар өсөн дә көнүҙәк булып тора. Ниһайәт, тоталь, бөткөһөҙ тикшереүҙән баш тартыу зарур. Хәлторош ысынлап та хәүефле һәм ҡағыҙә, тәртип боҙоуҙар күҙәтелгән урындарҙы ғына даими күҙ уңында тоторға кәрәк.

**Дәүләт суверенитеты тураһында.** Әгәр ҡайһы бер Европа илдәре өсөн милли ғорурлыҡ - күптән онотолған атама, ә суверенитет - бик ҙур байлыҡ булһа, Рәсәй өсөн ысынбарлыҡтағы дәүләт суверенитеты - уның йәшәүе өсөн мотлаҡ булған шарт. Тәү сиратта был беҙҙең үҙебеҙ өсөн асыҡ булырға тейеш - йә беҙ үҙ аллы булабыҙ, йә донъяла юғалып ҡалабыҙ.

**Өҫтөнлөктәр тураһында.** Сәләмәт ғаилә һәм сәләмәт милләт, атай-олатайҙарҙан беҙгә киләсәккә ынтылыш менән бергә тапшырылған традицион ҡиммәттәр, үсеш һәм прогрестың бер шарты булараҡ тотороҡлолоҡ, Рәсәйҙең именлеген гарантиялы рәүештә тәьмин иткәндә башҡа халыҡтарға һәм дәүләттәргә ихтирам, илдең законлы мәнфәғәттәрен яҡлау - бына беҙҙең өҫтөнлөктәребеҙ.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һалҡын тейгәндән...

Һалҡын тейгәндә халыҡ дауаларын самаһын белеп ҡулланырға кәрәк. Мәҫәлән, бәләкәй балаларға эфир майҙары, һарымһаҡ менән ингаляция эшләгәндән һуң көслө аллергия башланыуы бар. Аяҡтарҙы ҡайнар һыуға тығып ултырыу яҡшы сара, әммә ул ауырлы ҡатындарға ярамай. Йөрәк ауыртҡанда, ҡан баҫымы юғары булғанда ҡурай еләген ҡулланмағыҙ. Халыҡ дауаһы еңелсә һалҡын тейгәндә, йүткергәндә, тамаҡ ауыртҡанда файҙа бирә.

❖ **Һуған төнәтмәһе.** Һуған менән һарымһаҡта вирус инфекцияһын юҡҡа сығара торған матдәләр бар. Уртаса ҙурлыҡтағы һуғанды ваҡ ҡына итеп турағас, уға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, өҫтөн ябып, 5 минут төнәтергә. Фитонцидтар әүҙем саҡта тиҙ генә эсергә.

❖ **Ныҡ йүткергәндә ҡулланыла торған билдәле сара:** 1-әр өлөш глицерин, лимон һуты, балды бергә ҡушып болғатырға. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсергә.

❖ **Йүткереүҙән тағы бер дауа:** йәшел йәки ҡара торманы соҡоп, уға 1 ҡалаҡ бал һалырға һәм йыйылған һутты эсергә. Ҡара торманы ҡырғыстан үткәреп, һутып һығып, уға бал ҡушып, сәғәт һайын 1 ҡалаҡ эсергә.

❖ **Тамаҡ ауыртҡанда** шалфей, ала миләүшә, аҡ сәскә төнәтмәһе менән тамаҡты сайҡау яҡшы һөҙөмтә бирә. 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға ла, 15-20 минут төнәтергә. Тамаҡты көнөнә 3-4 тапҡыр сайҡарға. Үләндәр урынына эвкалипт төнәтмәһе ҡулланырға була - 1 стакан һыуға 1 балғалаҡ төнәтмә.

### Арыуҙан, талсығыуҙан

❖ 1 ҡалаҡ базилик үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә. Сәй кеүек эсергә, бал ҡушырға ла ярай, тик көнөнә 2 тапҡырҙан артыҡ эсмәгеҙ.

❖ 1 ҡалаҡ ҡырҡбыуын (хвощ) үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә. 1 стакан төнәтмәне 4 өлөшкә бүлеп, көнөнә 4 тапҡыр эсергә. Дауаланыу курсы - 21 көн. Ул организмды таҙарта, һөҙөмтәлә, арыу ҙа юҡҡа сығасаҡ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

**✓ Әлеге ваҡытта алып барылған оптималләштереү, ғәмәлдә, медицина өлкәһен емереүсе оптималләштереүҙең икенсе тулҡыны. Дауаханаларҙы ябыу, койкалар һанын ҡыҫҡартыу саманан сығып китә!**



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БҮРЕ, БҮРЕ, БҮРЕКӘЙ...

**Күп кенә ышаныуҙар һәм магик йолалар бүре культына бәйле. Берәй әйбер йәки мал юғалғанда, башҡорттар бүренең тарамышын яндырған. Әммә быны эшләрҙән алда нимәләр юғалтыуҙары тураһында барыһына ла иғлан иткәндәр һәм бүре тарамышы яндырырға ниәтләнеүен белдергәндәр. Был йоланы башҡарғандан һуң, бур аяғы һәм ҡулдары тартышып үлә, тип ышанғандар.**

Йола түбәндәге ҡарғау менән оҙатылған:

*Бүре, бүре, бүрекәй!*
*Бәлә килде башыма,*
*Үҙең килсе ҡаршыма!*
*Күҙем тулған йәшемә,*
*Бүре, бүре, бүрекәй,*
*Атым уғры ҡулында.*
*Ҡороп ҡатһын юлында,*
*Шул ҡарғышым уйымда.*
*Бүре, бүре, бүрекәй!*
*Табып бирсе уғрыны,*
*Харап итмә тоғроно -*
*Бар теләгем шул ине.*

Өлкән быуын вәкилдәре, былдай юл менән язаланған бурҙың тартышып үлеүен күреүҙәре тураһында ла һөйләй. Был йола бик борондан килә, унда тотем-бүрегә туранан-тура мөрәжәғәт итеү күренеше күҙәтелә. Ҡыҙылса, яман шеште арбағанда имселәр үҙҙәре бүре ролендә сығыш яһап, бүре булып олоған һәм "һам", тип, тешләү хәрәкәттәре яһаған.

Ҡурған өлкәһендә йәшәүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙың күлдәгендә һәм алъяпҡысындағы бүре табаны тип йөрөтөлгән биҙәктә, ағас ижау тотҡаһындағы бүре башы фигураһы ла һаҡлауы ролен үтәгән, күрәһең. Легендалар буйынса, Төркөстандан Уралға күсенеүсе башҡорттарҙың бүре башы төшөрөлгән әләме булған. Уларға уны Европаға сәйәхәттәре алдынан һундарҙың ханы Атилла бүләк иткән, тигән мәғлүмәт һаҡланған. Йәнәһе, ошо орнаментҡа ҡарап, уларҙы башҡорттар тип йөрөтә башлағандар. Был легендар мотив фольклор экспедицияларында йыйылған документтарҙа ла осрай. XVII-XVIII быуаттарҙа үҫәргән, түңгәүер, бөрйән ырыуы башлыҡтарының түшен бүре башы төшөрөлгән знактар биҙәгән. Бүре башы символикаһы менән эмблемалар башҡорттар араһында XIX быуатҡа тиклем һаҡланған.

XIX быуаттың аҙағында генерал-майор П. С. Назаров "Күк бүре" тип йөрөтөлгән йола байрамын һүрәтләй. "Был йола шунан ғибәрәт: билдәләнгән ваҡытта башҡорттар бер ергә йыйыла, уларҙың берәһе һуйылған кәзә алып килә. Билдә бирелгәс, кәзәле башҡорт һыбай ҡаса, ҡалғандар уны ҡыуа төшә, улар кәзәне алырға тейеш була. Әгәр ҙә кемдер, мәҫәлән, кәзәнең аяғына тотоноп, уны тартып алырға маташҡанда, аяҡ өҙөлөп сыға. Был йола кәзә киҫәктәргә бүленеп бөткәнсе дауам итә". Был күренеш күп кенә халыҡтарҙың туй йолаһында бар.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ХӘЛДӘРЕҢ НИСЕК, АУЫЛ ДАУАХАНАҺЫ?



**(Башы 3-сө биттә).**

Ауыл ФАП-тарын ябыуҙы, ауылды ярҙамһыҙ ҡалдырыуҙы аҡлау, тынысландырыу ниәтендә, әллә күпме шаушыу ҡуптарып, шул ауылдарҙа "ярым шәфҡәт туташтары" булдырыуҙы башлап ебәрҙеләр. Был, йәнәһе лә, шул ауылдарҙағы теремек кенә берәй йәш ҡатын-ҡыҙҙы йәки ир-егетте укол ҡаҙарға, ҡан баҫымын үлсәргә, яралар бәйләргә, ҡайһы бер дарыуҙарҙың ҡулланылышын белергә өйрәтеү. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, кемдең бушлай көнө-төнө ошо эш менән йөрөгәһе килһен? Ә бит ярым шәфҡәт туташтары өсөн (Бөтә Рәсәй кимәлендә) "Тиҙ ярҙам сумкалары", тонометрҙар, градусниктар һәм башҡа кәрәк-ярақтар алынып, урындарға килеп етмәй, ҡабат дарыухана селтәрендә һатылыуы ла бик мөмкин ине. Эш эшләнмәне, ә аҡса китте...

Быйыл йыл башынан "Тиҙ медицина ярҙамы бүлексәләрен" нығытыу эше менән мәшғүл булып киттеләр (йәнәһе, Евростандартҡа тиңләштерәләр). Машиналарға рациялар урынлаштырҙылар. Тәүлекләп эшләгән 3 санитар ставкаһы астылар. Уларҙың айлыҡ эш хаҡы хатта 9-10 меңгә етте. Дөйөм диспетчер үҙәге асылмау сәбәпле, рацияларҙан файҙа юҡ ине. Был юлы мәсьәләгә тиҙерәк төшөндөләр: нинә тәүлегенә 10-15 саҡырыуҙа фельдшерҙың сумкаһын күтәреп йөрөп, ике-өс тапҡыр машина салонын һөртөп алғанға, әллә ниҙә бер носилка күтәрешкәнгә шул тиклем аҡса түләргә? Октябрь башынан был эш туктатылды. Ә күпме аҡса бушҡа түгелде. Медицинаға бүленгән бюджет аҡсаһын ике тармаҡҡа айырыу осоронан алып үҙәк район дауаханаһы аппаратында кадрҙар һаны байтаҡҡа артты. Был медицина кадрҙарының күҙгә күренеп 60-65 процентҡа тиклем кәмегән мәлендә!

Әлеге ваҡытта алып барылған оптималләштереү, ғәмәлдә, медицина өлкәһен емереүсе оптималләштереүҙең икенсе тулҡыны. Дауаханаларҙы ябыу, койкалар һанын ҡыҫҡартыу саманан сығып китә! Улай ғына ла түгел, дауаханаларҙағы койкаларҙың исемдәре лә әлеге социаль йүнәлештә үҙгәртелә. Бигерәк тә бығаса һаҡланып ҡалған ауыл дауаханаларында бөтәһенә лә аңлайышлы "терапевтик койкалар" "паллиатив", "хоспис" койкаларына әйләнеп бара.

Нимә ул "шәфҡәт туташтары тәрбиәһе"ндәге койка ("Койка сестринского ухода" - КСУ)? "Бығә: "КСУ предназначены для проведения курса поддерживающего лечения и временного пребывания граждан, нуждающихся по состоянию здоровья в медицинском и социальном уходе", - тигән аңлатма бирелә. "Паллиатив" һәм "хоспис" койкалар - асылда, һауыға алмаҫтай ауыр хәлдәге ауырыуҙарҙың ауыртыу-һыҙланыуҙарын кәметеп, ғүмерҙәрен оҙайтыу ниәтендә дауаханала бүленгән койка-урындар. Ауыл халҡы борон-борондан үҙҙәренең ауыр хәлдәге туғандарын, атаәсәләрен һуңғы сиккәсә үҙҙәре тәрбиәләргә өйрәнгән (был милли һәм дини ғөрөф-ғәҙәт). Быны былдайҙарға, асылда, "өйҙәге стационар" койкалары ғына кәрәк. Уларға шәфҡәт туташының, табип ҡушыуы буйынса килеп, уколдар эшләп китеүе лә етә.

2015 йылдың ғинуарынан бөтөн республика районлары дауаханаларында КСУ-лар ябылып, көндөҙгө стационарға күсерелә. Беҙҙең Ишембай районында койка-урындар һаҡланып ҡалған Ҡолғона, Маҡар, Петровский ауылдары дауаханаларында ғы 27 КСУ ябыла. Алыҫлығы һәм халҡы күплектән сығып, Ҡолғона һәм Петровскийҙа күпмелер паллиатив койкалар асыла. Тимәк, унда тәүлек әйләнәһенә шәфҡәт туташтары постары эшләйәсәк. Төндә үҙҙәре йәки туғандары килтергән, йәиһә бәләгә тарыған юлдағыларҙы килтергәндә, уларға тәүге ярҙам күрһәтеүсе медицина хеҙмәткәре бар, тиергә була. Ә бына Маҡар дауаханаһында бары көндөҙгө стационарҙа 5-6 койка-урын ғына ҡалыуы бик ҡурҡыныс хәл. Быны хужалар беҙҙә фельдшерлы "Тиҙ медицина ярҙамы" машинаһы булыу менән аҡларға тырыша. Ә беҙҙәге ул машина Ҡолғона һәм Петровский зонаһындағы саҡырыуҙарға ла йөрөй. Әйтәйек, машина Ҡолғонаға китте, ти. Барып ҡайтырға ғына 3 сәғәт тирәһе кәрәк (юлдарҙың ҡот осҡос хәлдә икәнлеген һөйләп тороу урынһыҙ...). Юлда машина ватылыуы ихтимал, ул арауыҡта кеҫә телефондары ла эшләмәй. Тимәк, ҡасан ҡайтыу ҙа билдәһеҙ. Маҡарға һуғылып тормай, ауырыуҙы тура Ишембайға алып китһәләр, тағы ла ике сәғәт үтә. Ошо биш сәғәт буйына дауаханала бер кем дә юҡ. Миненсә, был эште дәүләтсә, хужаларса уйланған эш тип әйтеп булмай. Ярай, шулай ҙа булһын. Ауылдарҙа ауыр хәлдәге, паллиатив койкаларҙа ғына ятырлыҡ ауырыуҙар шулай күп тип уйлайһығыҙмы? Юҡ! Булһа ла 2-3 кеше. Ә шул уҡ паллиатив койкаларҙа терапевтик профилдәге - гипертония кризы, йөрәк өйәнәге, баш мейеһе ҡан тамырҙарының хроник ауырыуҙары, эске ағзаларҙың хроник ауырыуҙары менән яфаланыусылар ятасаҡ. Шулай булғас, терапевтик койкаһың асылы ҡала икән, нинә уның йөҙөн үҙгәртергә? Беҙ уҡыған осорҙа (һәм бөгөн дә): "Показанием для госпитализации больного является необходимость круглосуточного наблюдения медработником за его состоянием и лечение в условиях больничной койки", - тип әйтелә ине. Алда һанап үткән хроник ауырыуҙар киҫкенләшкән осорҙа ауырыу кешене дауаханаға һалырға кәрәк. Шулай булғас, нинә койка-урынды үҙ атамаһы менән атамай, социаль яҡҡа ҡарап үҙгәртергә? Һыуыҡтар төшөп, ҡыш башланыу менән был койка-урындарға райондан йыйылған асарбаҡтарҙы тултыра башлайҙар. Ә уларҙың араһында кемдәр генә юҡ. Йыуындыр, таҙарт, кейендер, ҡара, дауала! Нисек икәнендә хужаларҙың эше юҡ! Был үҙе генә лә административ рәүештә дауаханаларҙа бөтөн СанПиН ҡағиҙәләрен боҙоу булып тора (кешеләрҙе шул хәлгә еткергән илдәр асарбактар өсөн йоҡлау, туҡланыу, йыуыныу һәм айырым дауаланыу урындары аса. Ә беҙҙә проблеманы дауаханалар елкәһенә генә ауҙарып ҡуялар).

Шулай итеп, Маҡарҙа тәүлек әйләнәһенә эшләгән койка-урындар бөтөрөлдө, ти (6-7 кеше эшһеҙ ҡалғандан ни булған?) Әлбиттә, маҡарҙар көндөҙгө стационарҙа дауалана ала, төндәрен кәрәк ваҡытта "Тиҙ ярҙам" саҡырта. Ә күрше Егән, Подгорный, Иҫәкәй, Ибрай, Һарғай ауылдары халҡына ни эшләргә? Ярай, күптәренә йүнәлтмә биреп, Иҫәкәй ФАП-ына ебәрергә мөмкин. Ундағы бер фельдшер дарыуға, отчетҡа, башҡа эштәре менән Ишембайға сыҡҡанда дауаланыу өҙөлә. Шуның өсөн дә унда медсестра ставкаһын асырға кәрәктер. Юҡ! Ауыл дауаханаһы койкаларын ябыу мәсьәләһенең бер осон икенсеһенә нығытмай тороп, был эште атҡарыу үҙе үк оло енәйәт! Ауыл дауаханаларын ябып һуңынан хөкүмәтебеҙ бюджетҡа аҡса килемен артыҡ арттыра алмай. Киреһенсә, күберәк юғалтыуы көн кеүек асыҡ. Әйтәйек, ғаиләлә, 3-4 балаһы булған ирҙе алкоголь интоксикацияһынан ваҡытында дауалай алманыҡ, ти. Дәүләт уның балаларына 18 йәштәре тулғансы пособие түләйәсәк. Шул хәлгә етмәҫ өсөн уны бары 2-4 көн дауаханала дауалап сығарыу кәрәк. Әлеге мәлдәге 100 һумды йәлләп, киләсәктә юғалтасаҡ 100 мең һумды ла күҙаллау зарурҙыр!

Советтар Союзы осоронда: "Ил килеменең яртыһын медицина тәьмин итә", - тиелде. Был бөгөн дә ысынбарлыҡҡа тап килә, әммә үҙебеҙ үк арттырған эшһеҙлеккә генә һылтанып, медицинаны ҡыйырһытыу хөкүмәткә түгел. Быны ябай халыҡ та бик яҡшы аңлай. Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 22 октябрҙәге 3129-Д бойороғо буйынса бөтөн үҙәк район дауаханаларында 25-30 КСУ ябыла. Тимәк, башҡа районларҙа ла беҙҙәге кеүек хәлгә тарығандар байтаҡ, тип була. Бигерәк тә төпкөлөрәк ауылдарҙа. Тик нинәлер былдай хәлдәр йәмәғәтселекте лә, депутаттарыбыҙҙы ла бер ҙә борсомай.

Үҙем яҡын-тирә даирәһенә әйтер һүҙемде әйттем кеүек. Аңлайышлы итеп әйтелгәндер. Ә бына минән аҡыллыраҡтарға, абруйлыраҡтарға, юғарыла ултырыусыларға, аҡыллыға ым да етә, тигәндәй, Ғәбит Садиҡ сәсәндең әйтемдәрен генә ҡабатлайым:

- Ҡайҙа барғанды алда барғандар ҙа белмәй.
- Өҫтән төшкән әмер аҫтан емерә.
- Өҫкә ҡат аҫҡы ҡат өҫтөндә икәнен онотмаһын ине.
- Ҡоллоҡ илендә муллыҡ булмай.

**Рәдис ДҮСӘЛИН,**
**Ишембай районы**
**Маҡар дауаханаһы табибы,**
**Башҡортостандың**
**атҡаҙанған табибы.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Йыл аҙағында, ғәҙәттә, үтеп барған йылдың мөһим ваҡиғаларын барлайҙар. "Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһының тәүге томдары сығыуы ла халҡыбыҙ өсөн ошондай ваҡиғаларҙың береһе булды. Бөтә башҡорт ырыуҙарын да үҙ эсенә аласаҡ күләмле хеҙмәттең йәнәй, балыҡсы, гәрәй (кирәй, гирей), унлар ырыуҙарына ҡараған дүрт томы сыҡты ла инде, яҡын арала ҡаңлы ырыуына арналған томдың тиражы әҙер буласаҡ. Салауат Хәмиҙуллин, Юлдаш Йосопов, Рәфил Аҫылғужин, Рөстәм Шәйхиев, Радик Рысҡолов, Айгөл Ғүмәрова һәм башҡаларҙан торған авторҙар коллективының хеҙмәте халыҡта лайыҡлы баһаһын табып, күптәргә үҙ тамырҙарын белергә тырышыуға, өйрәнә башлауға, аңлауға һәм таныуға этәргес булыр, тип ышанып ҡалабыҙ. "Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһы, халҡыбыҙ тарихының ҡайһы бер биттәре тураһында тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан юлдаш телеканалының билдәле журналисы Салауат ХӘМИҘУЛЛИН һөйләй.**



# ҠАН БУЙЫНСА БАШҠОРТТАР...

## тамырҙарын иҫкә төшөрһөн

### Китап хаҡында бер нисә һүҙ

Милли тамырҙарҙы, милли үҙенсәлекте (идентичность) юғалтыу, ассимиляция проблемаһы бөгөнгө көндә башҡорт халҡының бер өлөшө өсөн киҫкен мәсьәлә булып тора. Был процеҫҡа төньяҡ-көнбайыш башҡорттары нығыраҡ йәлеп ителеүгә ҡарамаҫтан, ошондай уҡ хәл күрше өлкәләрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙҙә лә күҙәтелә. Мәҫәлән, 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә ярашлы Пермь өлкәһенең (хәҙер Пермь крайы) Барҙы районында йәшәгән халыҡтың 95 проценты үҙен башҡорт тип һанаһа, һуңғы халыҡ иҫәбен алыу кампанияһына ярашлы был төбәктә башҡорттар 50-60 процент самаһы ғына тороп ҡалған (уларҙың ҡалған өлөшө татар милләтенә күскән). Ошондай уҡ хәл бер нисә тиҫтә мең башҡорттар йәшәгән Свердловск, Ҡурған өлкәләрендә лә күҙәтелә. Хатта Силәбе өлкәһендә башҡорт районлары иҫәпләнгән Арғаяшта һәм бигерәк тә Ҡоншаҡта ла яйлап милли йөҙҙө юғалтыу процесы бара. Ә Татарстанда иһә (был республиканың бер өлөшө тарихи Башҡортостанға инеүенә һәм бары тик үткән быуаттың 20-се йылдарында ғына Татар АССР-ына биреләүенә ҡарамаҫтан) башҡорттарҙың һаны ун меңгә лә етмәй.

Башҡорт халҡын берләштереү, уны икенсе милләт тарафынан йотолоуҙан һаҡлап алып ҡалыу мөмкинлектәре үткән быуаттың 20-се йылдарында ла, 30-сы йылдарҙа ла, 50-се йылдарҙа ла була. Хатта 90-сы йылдарҙа ла башҡорттарҙың күп өлөшөн һаҡлап алып ҡалырға булыр ине. Үкенескә күрә, башҡорт интеллигенцияһы бөтә ошо мөмкинлектәрҙе лә ҡулынан ысҡындыра.



Иң яҡшы мөмкинлек революциянан һуң тыуа. Был ваҡытта кәрәкле ҡыйыу аҙымдар ҙа күп эшләнә. Әхмәтзәки Вәлиди һәм уның арҡаҙаштары етәкләгән башҡорт милли хәрәкәтенә көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының күп өлөшө йәлеп ителә, Кесе Башҡортостан иғлан ителә. Ләкин көнбайыш башҡорттары Өфө губернаһында тороп ҡала. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Өфө губернаһында йәшәгән башҡорттар Кесе Башҡортостанға ҡушылырға тип хаттар яҙа, хатта 1920 йылда ҡупҡан "ҡара бөркөт", йәки "һәнәктәр ихтилалы" исеме аҫтында билдәле булған күтәрелештең дә сәбәптәренең береһе ошо була. Ул ваҡытта күп мишәрҙәр һәм типтәрҙәр үҙҙәрен башҡорт тип иҫәпләй, башҡорттарға яҡын булырға тырыша. Ләкин берләштерә алырҙай көстөң булмауы арҡаһында (башҡорт хәрәкәтенең лидерҙары илдән киткән була, ә ҡалғандарын совет власы яйлап ҡына сәйәси аренанан ситләштерә) был эш логик аҙағына еткерелмәй. Өфө губернаһының Бөрө һәм Бәләбәй өйәҙҙәре Башҡорт АССР-ына ҡушылһа ла, Минзәлә менән Бөгөлмә өйәҙҙәре яңы төҙөлгән Татар АССР-ында тороп ҡала.

Башҡорт АССР-ында ла хәлдәр яҡшынан булмай. Совет осоронда республиканың төньяҡ-көнбайыш районларында уҡытыу татар телендә алып барыла. Шуға уларҙы башҡорт ғалимдары ла хатта башҡорт тип ҡабул итмәй. Бына шулай Көнбайыш Башҡортостанда йәшәгән башҡорттар, үҙ һөйләштәре һәм географик урынлашыуы арҡаһында, "татар сәйәси милләте" проектына йәлеп ителә һәм бер нисә тиҫтә йылдан һуң үҙҙәренең милли үҙбилдәләнешен юғалта. Әлеге ваҡытта иң ауыр хәл Ҡаңлы ырыуы башҡорттарында күҙәтелә. Был данлы ырыу вәкилдәре араһында үҙҙәрен башҡорт тип иҫәпләгән бер нисә ауыл ғына тороп ҡалған, башҡалары тулыһынса татарлашып бөткән. Әлбиттә, Нефтекаманан Фәнил Шәрипов етәкләгән Ҡаңлы ырыуы хәрәкәте бар, был хәрәкәт ошо ырыу башҡорттарына тамырҙарын аңлатыу буйынса әүҙем эш алып бара, күптәр үҙҙәренең башҡорт икәнен дә таный, ләкин барыбер ҙә үҙҙәрен татар тип һанай. Йәғни, улар ҡан буйынса башҡорттар, аң буйынса татарҙарға әйләнгән.

Үрҙә телгә алынған факторҙарҙан сығып, башҡорт ырыуҙары хаҡында китап сығарыу кәрәкле һәм ваҡытлы эш тип һанайбыҙ. Был милли йөҙөн юғалтҡан башҡорттарға үҙҙәренең тамырҙарын иҫкә төшөрөү өсөн файҙалы буласаҡ. Шулай уҡ башҡорт халҡының төрлөлөгөн, шул иҫәптән һөйләш, диалект төрлөлөгөн күрһәтәсәк.

Китаптарҙың структураһы бик ҡыҙыҡлы. Ул тарихҡа, телгә, диалектологияға арналған өлөштән тора. Бер өлөш идентификация проблемаһына арнала. Халыҡтың ниндәй территорияларҙа йәшәүе хаҡындағы мәғлүмәт Әнүәр Әсфәндийәровтың хеҙмәттәренә, шулай уҡ һуңғы йылдарҙа билдәле булған мәғлүмәттәргә таянып яҙылды. Шулай уҡ китапҡа фольклор материалдары, риүәйәттәр, ревизия сказкалары, революция осоронДағы халыҡ һанын алыу кампаниялары мәғлүмәттәре индерелде. Документтар бихисап урынды ала. Шулай уҡ китаптарға минең "Тарихи мөхит" тапшырыуының "Башҡорт шәжәрәләре" циклынан булған документаль фильмдың дискыһы ла беркетелде. Финанслау булғанда, беҙ бөтә башҡорт ырыуҙары хаҡында томдар сығарырға уйлайбыҙ. Ваҡыраҡ булған ырыуҙарҙы бер томға берләштерәсәкбеҙ, планлаштырыуыбыҙса, ул йәмғеһе 25-26 том буласаҡ.

Башҡорттар төрки этностар араһында иң боронғоһо. Улар хаҡында тәүге телгә алыуҙарҙы VII быуатҡа ҡараған Ҡытай яҙмаларында табабыҙ. Ошо оҙаҡ ваҡыт эсендә башҡорт халҡы даими үҙгәреп тороуына ҡарамаҫтан (яңы ырыуҙар ҡушылған, башҡа милләттәр менән аралашып йәшәү, һ.б.), ул үҙенең халҡының атамаһын, үҙенсәлектәрен һаҡлап алып ҡала алған. Ә ҡайҙа VII быуаттағы башҡорттарҙың замандаштары? Ҡайҙа бәшәнәктәр, оғуҙҙар, ҡыпсаҡтар, Иҙел болғарҙары? Уларҙың береһе лә бөгөнгө көндә айырым милләт булып һаҡланып ҡала алмаған. Шуға күрә халҡыбыҙҙың тамырҙарын белеү, уны һаҡлап ҡалыу үҙебеҙҙең изге бурысыбыҙ булып тора.

**Азамат САЛАУАТОВ яҙып алды.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Майҙан уртаһында көрәш башлана. Ул шунан ғибәрәт: көрәшселәр, майҙанға сығып, ыштанда һәм күлдәктә генә ҡалып, еңдәрен һыҙғанып, бер-береһенең арҡаһы аша билбау һалып һәм уның ике осон ныҡ итеп ҡулдарына урап, алыша башлай. Аяҡтарын кирә баҫып, бер-береһен көстә һәм таһыллыҡта һынап, улар дәғүәсеһен арҡаһына һалырға тырыша. Яйлап ҡына аяҡтарын алмаштырып, урындан-урынға күсеп, бер-береһен йә бер, йә икенсе яҡҡа бороп, йә бер, йә икенсе тубыҡҡа сүгеп, улар дәғүәсеһен баш аша ташларға маташа йәки уны күкрәккә ҡыҫып, уның ҡаршылығын һындырып, уның өҫтөнә йығыла, йәиһә аяҡтарын ерҙән айырып, бер нисә тапҡыр әйләндерә лә, ергә ырғыта.

Майҙанда шулай бер-нисә тиҫтә пар көрәшсе барлыҡҡа килә. Тамаша ҡылыусыларҙың бар иғтибары уларға төбәлә. Әгәр берәйһе еңһә, ул тамашасыларҙың геүләүе аша хуплана. Шулай уҡ көрәште күҙәтеүсе туған-тыумаса алыш барышында ҡағиҙә боҙоуҙы күреп ҡалһа, улар ризаһыҙлыҡ белдереп шаулаша башлай. Еңеүсе бүләктәр таратыусы ҡарт эргәһенә килә һәм йомортҡа, яулыҡ йәки туҡыма ала **(һүрәт)**.



Алған бүләген ул шунда уҡ абруйлы кешегә - атаһына, ағаһына йәки оло берәйһенә тапшыра, улар уға бының өсөн аҡса бирә. Урал арьяғы башҡорттарында бер тапҡыр еңелгән кеше артабан көрәшмәгән. Был ҡағиҙә ҡәтғи һаҡланған. Тиҫтәләгән кешене еңеүселәр араһынан бәһлеүәндәр төркөмө туплана. Улар үҙ-ара көс һынашып, ахырҙа ике генә батыр ҡала. Урыны менән көрәш шул тиклем танылыу яулай, һабантуйҙарға батырҙар әллә нисә саҡрым юл үтеп килә.

Ярышта икенсе урында йүгереү тора. Унда тиҫтәгә тиклем кеше ҡатнаша. Йүгереүселәр балаҡтарын тубыҡҡа тиклем төрөп, күлдәктәрен ыштандарына ҡыҫтырып йүгерә. Ғәҙәттә, 2 километрға йүгерәләр. Йүгереүселәр алдынан һәр саҡ юл күрһәтеп һыбайлы барған. Беренсе булып килгән өс кешенең беренсеһенә - ҙур ит киҫәге, икенсеһенә - ҡабырға, өсөнсөһөнә бәләкәй ит киҫәге бирәләр **(һүрәт)**.



Ҡайһы бер урында йүгереүселәргә таҫтамалдар тараталар. Был бүләктәрҙе еңеүселәр абруйлы ҡунаҡтарға тапшыра, улары иһә уларға аҡса бирә.

Йүгереүҙән һуң бәйге башлана. Һыбайлылар - 6-12 йәшлек малайҙар **(һүрәт)**. Әгәр көн бик эҫе булмаһа, аттарҙы сабыштырырға көн үҙәгендә, икелә сығаралар. Әгәр ныҡ эҫе булһа, киске дүрттә бәйге уҙғаралар. Ғәҙәттә, аттар 6-7 саҡрымға уҙыша. Ошо арауыҡты улар ҡысҡырып, һыҙғырып, аттарын ҡамсылап уҙа. Алыҫтан һыбайлылыр күренеүгә, көрәш туҡталып тора һәм барыһы ла бәйгеселәрҙе ҡаршы алырға юлдың ике яғына теҙелә. Беренсе килеүсене йыйылған халыҡ хуплау ауаздарына күмеп ҡаршылай.



✓ "Ҡайҙа батыр?" - тип, Аҡбуҙат үҙе оран ташлай. Киләсәк быуынды милли рухта тәрбиәләү өсөн ел-дауыл ҡуптарып, артынан мал ҡотон алып сыҡҡан шундай арғымаҡты ауыҙлыҡлаған Урал батыр кеүек герой кәрәк.



**Скульптура жанры сәскә атҡан осорҙа йәшәгән боронғо грек философы Сократ: "Скульптор үҙенең ижадында күңел торошон сағылдырырға тейеш", - тигән. Нисә быуат алмашынһа ла, бөгөн дә был һүҙҙәр мөһимлеген, актуаллеген юғалтмай. Хәҙерге заман скульпторҙарының оҫталығы ла уларҙың гипсҡа, балсыҡҡа, ташҡа күңел торошон күсерә белеүе менән үлсәнә, баһалана. Ҡоробоҙҙоң бөгөнгө ҡунағы билдәле скульптор Өлфәт ҠОБАҒОШОВ менән нәҡ ошо йәнһеҙгә йән өрә алыу серҙәре, унда миллилекте сағылдыра белеү оҫталығы тураһында әңгәмәләштек.**

### Бөтә башланғыстар - уйындарҙан

Һәр эшкә башланғыс бала саҡта уҡ һалына. Минең дә скульптор һөнәрен һайлауым юҡтан ғына түгел, башланғысы алыҫ бала сағыма барып тоташа. Беҙ үҫкәндә ауылда уйын йолалары бик көслө ине, хәҙерге балалар кеүек, көнө-төнө өйҙән сыҡмай, компьютерға текәлеп ултырыу тигән нәмә юҡ. Хатта һәр миҙгелдең үҙ уйыны була торғайны. Мәҫәлән, яҙ етһә, малайҙар менән боҙ буйлап талға барабыҙ. Ҡояш төшкән урынға ғына менеп ултырып, талдан мурҙа үрәбеҙ, уҡ-һаҙаҡ эшләйбеҙ. Һәр бер уҡҡа үҙебеҙҙең тамғабыҙҙы ҡуйып, һырлап, семәрләп юнабыҙ. Башаҡтарҙың төрө иҫ киткес күп була торғайны: ҡырҡма башаҡ, беҙ башаҡ... Уҡ атҡанда осоп, өрөлөп барһын өсөн ҡанаттарын да төрләндереп эшләйһең, уны буяп, матурлап та алаһың. Йәйгеһен был эштәр менән шөғөлләнмәйбеҙ - кеше көлә. Ағас япраҡ ярмаҫ борон өйәңке башына менеп ултырып, үҙ-ара ярыша-ярыша, төрлө тауыш сығарырлыҡ итеп һыбыҙғылар яһап, күмәкләшеп көй сығарып уйнай инек. Уйыныбыҙҙы ла ҡыҙыҡлы итеп ойоштора белдек. Башҡа яҡтарҙа немецтар-совет һалдаттары булып уйнағандарын ишеткәнем бар, ә беҙ француздар-башҡорттар булып һуғыша инек. Ҡулдарға һөңгөләр тотоп, шапкаңдың бер ҡолағын бөкләп, икенсеһен артҡа төшөрөп кейеп алһаҡ, беҙ - башҡорттар. Ә ҡылыс менән ҡоралланып, бүректең ике ҡолағының бауын оҙоноураҡ итеп, өсмөйөшләберәк бәйләп кейһәк, француздарға әйләнәбеҙ. Ҡыш етһә, ҡарҙан траншеялар ҡаҙып, һалдат һындары эшләйбеҙ. Олатайҙар уйнаған ошо уйындар беҙгә тиклем килеп еткән икән, тимәк, беҙ шул рухты, традицияны һаҡлай алғанбыҙ. Ул ғына ла түгел, шул уйындар беҙгә үҙебеҙгә оҡшаған шөғөлдө, шунан сығып, буласаҡ һөнәребеҙҙе һайларға ярҙам иткән.

Ижадында милли рух, тыуған иленә ҡарата һөйөү тойғоһон сағылдыра алыу сифаты ла бала саҡта алған тәрбиәнән, мөхиттән килә. Мин үҫкән саҡта ауылда бөркөт ҡарашлы, олпат кәүҙәле бабайҙар ҙа йәшәне. Мәсет булмағанға күрә, улар йома намаҙына алмашлап бер-береһенең өйөнә йөрөнө. Йыш ҡына беҙ мәктәптән ҡайтып килгәндә баҫмала ҡаршыбыҙға килеп сыға торғайнылар, баштарына сәлдә урағандар, сапан кейгәндәр, таяҡҡа таянғандар. Ҡайһы бер малайҙар, улар килеп етмәҫ элек сығып ҡалайыҡ, тип, баҫманы алдан йүгереп үтһә, туҡтатып: "Атайың кем? Нишләп ололарҙың юлын ҡыйып алдан сыҡтың?" - тип һорашалар. Малайҙар гәйептәрен тойоп, баштарын аҫҡа эйеп кенә баҫып тора. Әммә был бының менән генә бөтмәй, олатай был малайҙың йәшәгән йортона барып, атаһы менән дә һөйләшә. Бабайҙарҙың тәрбиәүи һүҙҙәре кешегә ниндәйҙер этәргес биргән, улар әле лә күҙ алдында тора, юҡ-юҡта ижадта ла сағылыш таба. Йәмғиәт тотҡаһы булған шундай ихтирамлы кешеләр бөгөн дә йәшәһә, илебеҙҙең хәле күпкә яҡшыраҡ булыр ине, бәлки. Ауыл кешеһенең эскерһеҙлеген, кешелеклеген, күршеһе менән бергә ҡыуана белеүен күреп үҫкән быуын беҙ. Ҡыҙғанысҡа күрә, XXI быуатта бик һирәктәр генә ошо сифаттарға эйә, һоҡлана белеү, ғәжәпләнә алыу тойғоларын киҫерергә һәләтле. Үҙе тураһында юғары фекерҙә булыусылар унан оторо күбәйә, һөрөф-ғәҙәттәрҙе белмәгән тәрбиәһеҙҙәр үҙенең эшенә баһа биреп, ҡупырайып йәшәй. Иң юғары баһа - халыҡтың баһаһы. Эшең халҡыңа кәрәкмәй, файҙаһыҙ икән, маһайып йәшә ни, йәшәмә ни...

### Ижадҡа ҡараш

Ижад - ул тау кеүек ҙур бер үр. Кеше шуға үрләүҙе маҡсат итеп алып, барып етмәй, кире әйләнеп китһә, ул ысын ижадсы була алмай. Минә йыш ҡына: "Нисек скульптор булып киттегеҙ?" - тигәнгә оҡшаш һорау бирәләр. Мин бер ваҡытта ла алға сығып, үҙемде күрһәтергә тырышып, һөрәнләп йөрөмәнем. Хатта әрмелә хеҙмәт иткәндә, һүрәт төшөрә белгәндәргә бер аҙым алға баҫырға ҡушһалар ҙа, урынымда тороп ҡала инем. Был осраҡта эш битарафлыҡта, оялсанлыҡта түгел, үҙеңде күрһәтеп ҡалырға тырышмаһаң да, ваҡыт барыбер һәр нәмәне үҙ урынына ҡуя: йә үҙ арбаһына ултыртып ала йә арбанан төшөрөп ҡалдыра. Әммә кеше иҫәбенә юғары вазифа биләүгә өлгәшкәнсе, түрәләрҙең тупһаларын тапап, маҡтаулы исемдәр алғансы, үҙенә тәғәйен эште тейешенсә атҡарып, маҡсатына өлгәшеү мең артыҡ.

Ҡайны саҡта күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, ни эшләргә белмәй аптырап ҡалған осраҡтар ҙа була. Шундай минуттарҙа мин үҙемде ҡулға алып, маҡсатымды билдәләп, шуға өлгәшеү өсөн бар көсөмдө һалып эшләй башлайым. Альпинист бер тауҙың үренә артылғас, тағы ла бейегерәк һәм текәрәк икенсе тауҙың башына менергә ашҡынған кеүек, бер маҡсатҡа өлгәшкәндән һуң, икенсеһе килеп тыуа. Шул саҡ яңыраһын, үҫәһең, алдан булған үкенеүҙәрең, ҡайғыларыңдың сүп кенә булып күренә.

Ҡуйған маҡсатыңа өлгәшеүгә, өҫтөңә алған бурысты үтәп сығыуыу ни тиклем ауыр булһа ла, эшеңдән башҡа проблемалар иңеңдә баҫҡанда ла, юлдан ситкә тайпылмаҫлыҡ көсөң булырға тейеш. Ул көстө мин, әлбиттә, тәү сиратта ғаиләмдән алам. Ҡатыным Рәмилә, улым һәм ҡыҙым минә яңы ижади үрҙәр яуларлыҡ илһам, дәрт биреүселәр. Мин дә, әсәләре лә яҙмышыбыҙҙы сәнғәт менән бәйләһәк тә, балаларыбыҙ юрист һөнәрен үҙләштерҙе. Скульптор һөнәренең еңелдәрҙән түгел икәнен яҡшы белгәс, береһе дә торһаң, ул, әлбиттә, туған телен хөрмәт итмәйәсәк.

Оҫтаханамда эшләгән саҡта башҡорт халыҡ йырҙарын тыңларға күнеккәнмен. Бигерәк тә "Ашҡаҙар" радиоһында яңғыраған элекке быуын йырсылары башҡарыуындағы моңло, йөрәк түренән сыҡҡан илаһи музыка аҫтында ижад итеүе оҡшай. Минеңсә, скульптура композицияһында сағылдырыласаҡ образдарҙы ла, музыканы ла халҡыбыҙҙың рухи гәүһәрҙәренә таянып үҙ юлымды дауам иттерәм, тип ныҡышманым. Ғөмүмән, мин балаларға баҫым яһай торған кеше түгел. Бөгөн ҡайһы бер милләттәштәр бәләкәстәрен туған телендә һөйләштереү өсөн ниндәй генә саралар күрмәй, хатта мәжбүри рәүештә башҡорт мәктәбендә уҡыта. Уларға мин аптырап бөтә алмайым: балаһын башҡорт мәктәбенә йөрөткәне лә өйҙә уны русса хәбәр һөйләп ҡаршылай. Улым менән ҡыҙым ҡала мөхитендә рус балалары менән уйнап үҫһә лә, саф башҡортса һөйләшә. Был ата-әсәнең балаға ирек бирә белеүенән килә, тип уйлайым. Шул уҡ йәмғәт транспортында ла баланы ҡыҫҡырып башҡортса һөйләшеүенән тыйып, үҙең русса өндәшеп, тартҡыслап ижад итергә кәрәк. Сөнки халыҡтан һут алмаһа, ижад халыҡсан булмай. Ә бер-ике көнлөк эштәр башҡорт халҡының рухын ҡаҡшата. Ҡыҙғанысҡа күрә, был тенденция "Сәнғәт" тип исемләнгән бөйөк һүҙ артына йәшеренгән башҡа жанрҙарға ла ҡағыла. Башҡорт халҡының бөтөн булмышын, унын рухи көсөн, миллилеген сағылдырыуҙан алыҫ булған эштәр һуңғы осорҙа "заманса" тигән һылтанма менән ишәйә бара.

Ижад - ул сәнғәт менән әҙәбиәткә генә ҡағылмай. Һәр бер һөнәр эйәһе үҙ урынында ижадсы. Урмансы ла ағастарҙы тота килеп тотош ҡырҡып һалып бөтмәй бит, ул киләсәктә йәш урман ҡалҡып сығыуын да хәстәрләй. Тимәк, үҙ эшенә етди ҡараған, киләсәкте хәстәрләгән, бөтәһен дә уйлап эш иткән һәр кем - ижадсы.

# АҠБУҘАТ ОРАН батырын



*"Урал батыр" эпосы буйынса төбәк-ара кимәлдә ойошторолған иң яҡшы скульптура проекты бәйгеһендә ҡатнашҡан эшем еңеүсе тип табылды. 1978 йылда Өфө дәүләт сәнғәт училищеһының һуңғы курсында белем алып йөрөгәнемдә ҙур күләмле "Башҡорт халыҡ эпосы" китабы баҫылып сыҡты, мин шул саҡта уҡ Урал батыр һәм Аҡбуҙат образдарына скульптура композициялары эшләй башлағайным. Әммә ул осорҙа беҙҙең эпостарыбыҙға иғтибар бик аҙ ине. Шулай ҙа Башҡортостандың дәүләт символдары буйынса үткәрелгән конкурсҡа ла "Урал батыр" эпосына таянып эшләгән бер-нисә вариант тәҡдим иткәйнем. Киләсәктә "Урал батыр ере" туристик маршрутына ингән Бөрйән районындағы Йылҡысыҡҡан күле буйында ҡуйыласаҡ Аҡбуҙат һыны бына шул йылдарҙан уҡ күңел түремдә йөрөтөлгән, һәр бер детале тиерлек уйланылған проект.*

### Батырын көтә Аҡбуҙ

"Урал батыр" эпосы буйынса төбәк-ара кимәлдә ойошторолған иң яҡшы скульптура проекты бәйгеһендә ҡатнашҡан эшем еңеүсе тип табылды. 1978 йылда Өфө дәүләт сәнғәт училищеһының һуңғы курсында белем алып йөрөгәнемдә ҙур күләмле "Башҡорт халыҡ эпосы" китабы баҫылып сыҡты, мин шул саҡта уҡ Урал батыр һәм Аҡбуҙат образдарына скульптура композициялары эшләй башлағайным. Әммә ул осорҙа беҙҙең эпостарыбыҙға иғтибар бик аҙ ине. Шулай ҙа Башҡортостандың дәүләт символдары буйынса үткәрелгән конкурсҡа ла "Урал батыр" эпосына таянып эшләгән бер-нисә вариант тәҡдим иткәйнем. Киләсәктә "Урал батыр ере" туристик маршрутына ингән Бөрйән районындағы Йылҡысыҡҡан күле буйында ҡуйыласаҡ Аҡбуҙат һыны бына шул йылдарҙан уҡ күңел түремдә йөрөтөлгән, һәр бер детале тиерлек уйланылған проект. Бәлки, күптәрҙә: "Ни өсөн Урал батырҙы йә Шүлгәнде түгел, нәҡ Аҡбуҙаттың скульптураһын эшләнегеҙ?" - тигән һорау тыуалыр. Ошо сихри көскә эйә булған, эйәренең ҡашына алмас ҡылыс, йылан ҡамсы тағылған ҡанатлы ат бөгөнгө көндә лә батырын табыр, тигән өмөт бар. "Ҡайҙа батыр?" - тип, Аҡбуҙат үҙе оран ташлай. Киләсәк быуынды милли рухта тәрбиәләү өсөн ел-дауыл ҡуптарып, артынан мал ҡотон алып сыҡҡан шундай арғымаҡты ауыҙлыҡлаған, халыҡ ҡанын һурған дейеүҙәргә сик ҡуйған

***✓ Башҡорт булһа, мотлаҡ ҡамсат бүрек кейеп, иңенә елән һалып, ҡулында ҡурайы булырға тейеш, тигән штамп бар. Был беҙҙең йәшәйеште аңламауҙан, беҙҙең тарихты, этнографияны, башҡа төрлө сығанаҡтарҙы өйрәнмәүҙән килә.***

# ТАШЛАЙ – эҙләй

Урал батыр кеүек герой кәрәк. Тик шундай батырыбыҙ булғанда ғына беҙ милләтте ҡотҡара алабыҙ. Минеңсә, ундай тәрбиәүи әһәмиәте ҙур булған эштәр мәңгелек материалдан эшләнергә тейеш. Шуға күрә, суйындан ҡойолған һынды гранит постаментҡа ҡуйып эшләтһәк, яҡшы буласаҡ. Композицияның бейеклеге нигеҙе менән бергә 7 метрҙан артып китәсәк, тояҡтарынан алып үлсәгәндә оҙонлоғо 5 метр тирәһе буласаҡ. Скульптураны тағы ла өҫтәп деталләштерәм, сөнки бөйөк һүҙ оҫталары, сәсәндәр меңәр йыл дауамында Аҡбуҙат образын ауыҙ-тел ижады аша шымартҡан. Эпосты тәрәндән өйрәнеп, декоратив-монументаль сәнғәт төрөнә күсерә алһаң, шунан да артыҡ итеп Аҡбуҙатты эшләп булмаясаҡ.

Тормоштағы атҡа ҡанат ҡуйып эшләһәң, унан Пегас килеп сыға. Ә ул поэтик образ, шағирҙарҙың илһам сығанағы, илаһи ат. Аҡбуҙат иһә, героик эпостан алынған батырҙар аты. Ул күк күкрәтеп, диңгеҙ шаулатып, һауа ярып килгән тылсымлы ат. Пегас шулайтып осоп йөрөймө һуң? Осһа ла, уның тауышын бирәү ҙә улай тип яҙмаған. Ғөмүмән, "Урал батыр" эпосында башҡорт халҡының тормош философияһын сағылдырған бик колоритлы образдар күп һәм улар, бөтәһе лә тиерлек, географик атамалар менән бәйләнгән. Йәнбирҙе менән Йәнбикәне, Һомайҙы, Урал батырҙың улдарын, Шүлгәнде, Әзрәҡәне, дейеүҙәрҙе һ.б. бөтәһен дә текстҡа таянып, ундағы һүрәтләүҙәргә нигеҙләнеп эшләп ҡуйырға була. Йәки бүтән эпостарҙан, ҡобайырҙарҙан аныҡ бер географик урынға ҡағылышлы өҙөктәрҙе, сәсәндәр һүҙен өс телдә (башҡортса, русса, инглизсә) ташҡа яҙып урынлаштырырға мөмкин. Ул саҡта туристик маршруттар иҫ киткес буласаҡ! Башҡорт халҡының боронғолоғон, рухи байлығын бөтөн сит ил туристарына ла күрһәтерлек, аңлатырлыҡ итеп эшләргә кәрәк, тик әле "Урал батыр ере" туристик маршрутын төҙөкләндереүҙә ҡулланыласаҡ эштәр араһында милли колорит, башҡорттоң рухын күтәрерлек булғандары юҡ тиерлек. Урал батырҙы һынландырғандар, ул японға ла, монголға ла, индеецҡа ла тартым килеп сыҡҡан. Уны Ер йөҙөнөң ҡайһы ҡитғаһына булһа ла алып барып ҡуйырға мөмкин. Ә беҙҙең халҡыбыҙҙы күтәрә торған, рухыбыҙҙы нығыта торған эштәр улай булырға тейеш түгел. Ул сит ерҙә лә башҡортлоғон күрһәтеп, айырылып торорға тейеш.

## Ҡамсат бүректәме эш…

Башҡорт булһа, мотлаҡ ҡамсат бүрек кейеп, иңенә елән һалып, ҡулында ҡурайы булырға тейеш, тигән штамп бар. Был беҙҙең йәшәйеште аңламауҙан, бөтә нәмәгә лә еңел ҡарауҙан, беҙҙең тарихты, этнографияны, башҡа төрлө сығанаҡтарҙы өйрәнмәүҙән килә. Беҙҙең милли кейемебеҙ ифрат бай, уның төрлөлөгөнөң иге-сиге юҡ. СССР заманында милли кейемдәрҙе, иҫкелек ҡалдығы, тип, бөтөрҙөләр. Халыҡ уны сәхнәлә генә күреп өйрәнде. Ә бит сәхнә өсөн тегелгән кейемдәрҙе был өлкәлә ысын белеме булмаған кешеләр ҙә эшләүе мөмкин. Әлбиттә, сәхнә кейемдәре зауыҡлы, матур, башҡорттоң олпатлығын, характерын күрһәтә, был насар түгел. Әммә быны менән генә сикләнергә ярамай. Башҡорттарҙы һүрәтләгән немец, француз, рус рәссамдарының һүрәттәрен, гравюраларын ғына ҡараһаҡ та, башҡорт халҡының кейеме ни тиклем төрлө булыуын күрәбеҙ. Баш кейемдәренең генә лә әллә нисә төрлөһө бар. Оҙон ҡалпаҡтар, йәнлек тиреһен файҙаланып тегелгәндәре, ҡайтармалы башлыҡтар бар. Ҡатын-ҡыҙҙар ҡашмауҙарының ниндәйе генә юҡ! Бик ҙур территорияла йәшәгән башҡорт халҡының һәр ырыуға, араға хас биҙәкле кейемдәре булған. Былар барыһы ла шул гравюраларҙа сағылдырылған. Ә беҙҙең костюмерҙар шуларҙы өйрәнмәй, анһатҡа һалышып, алтмыш йәшлек бабайҙы ла, алты йәшлек баланы ла тирләтеп, бер төрлө кейем кейҙереп сығаралар. Хатта сәхнәгә йөҙ кеше сыға икән, барыһын да инкубатор себештәре шикелле итеп теҙеп ҡуялар. Был беҙҙең үҙенсәлектәрҙе йәйлап оноттора, ярлыландыра. Миҫалға БР Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестрын килтерәйек. Егеттәр барыһы ла бер төрлө түбәтәй кейеп ултыра, ҡыҙҙар - яулыҡ ябынған. Ә уйын ҡоралдарыкүп төрлө: ҡурай, думбыра, ҡылҡумыҙ һ.б. Был уйын ҡоралдары барыһы ла башҡорт түбәтәй кейә башлағансы уҡ меңәр йыл алда барлыҡҡа килгән, булған. Шуға күрә, оркестрҙа боронғо милли кейемдәребеҙҙең төрлөлөгө сағылыш табырға тейеш. Ә шулай ҙа сәхнәгә сыҡҡан артистың да, скульптура композицияһының да миллилеге тик кейемдән генә тормай. Миллилек ата-әсәнән алған, ҡандан килгән тәрбиәнең тышҡа бәреп сығыуы. Шуны йөрөтөү, мегаполиста башҡортлоғонды һаҡлап ҡалыу, сит милләттәр араһында яңғыҙ ҡалғанда ла шул сифатыңды күрһәтә алыу - ҙур батырлыҡ. Кешенең күңелендә булмаһа, башҡорт халыҡ кейеменең әллә ниндәй зауыҡлыһын кейҙерһәң дә, уны башҡорт тип атарға тел әйләнмәүе мөмкин. Ә бит мотлаҡ башҡорт тоҡомло булмаһалар ҙа, айыу йәки атты нәҡ башҡорт айыуы һәм башҡорт аты итеп эшләргә була.

## Яуаплылыҡ тойғоһо көслө

Баш ҡалала башҡорт милләте тураһында фекер тыуҙырырлыҡ скульптуралар бар ул, әммә етерлек түгел. Монументаль сәнғәт өлгөләре һәр ваҡыт кешенең күҙ алдында, шуға уның тәрбиәүи әһәмиәте ҙур. Беҙ йоҡлағанда ла, уянғанда ла һинең эшең ҡайҙалыр кеше күҙе күргән ерҙә тора. Үҙең башыңды бороп, урау юлдан йөрөһәң дә, башҡалар күрә. Шуға ла, ижадың өсөн бик ҙур яуаплылыҡ тояһың. Бәлки, бөгөн ҡоростан ҡойоп ултыртҡан бер һын шул урында меңәр йылдар торор. Битеңә ҡыҙыллыҡ килтерә, тип, ябып ҡуйып булмай уны. Баш ҡалабыҙҙың йөҙөн билдәләгән, башҡорттоң рухын сағылдырған иң юғары профессиональ скульптура бөгөнгө көндә милли батырыбыҙ Салауат Юлаев һәйкәле. Сөнки Сосланбәк Тавасиев үҙ эшенә оло яуаплылыҡ менән ҡараған, ул халыҡтың рухын күтәрерлек образ тыуҙырған. Башҡорт әллә ҡайҙа йөрөһә лә, Өфөнән ситтә торһа ла, Салауат Юлаев һәйкәле үҙ урынында булған саҡта, баш ҡалабыҙҙа беҙҙең рух һаҡланасаҡ. Монументаль сәнғәттән тыш, архитектура ла бик ҙур көскә эйә. Ҡыҙғанысҡа күрә, беҙҙең архитектурала миллилек сағылмай. Әле бына яңы төҙөлөп ятҡан мәсетте, башҡорт милли орнаменттары ҡулланып биҙәйҙәр, тип күрһәткәйнеләр. Әммә ябай торлаҡ йорттарында ла шундай биҙәлеш булырға тейеш, тип уйлайым. Милләтте тел, дин, йолалар аша ғына һаҡларға тимәгән, күҙгә салынған бөтөн нәмә милли колоритлы булырға тейеш. Быны тик башҡорттар ғына эшләй ала, сит милләт кешеләренең бөтәһе лә башҡорт асылын сағылдыра алмай. Шуға ла бөгөн беҙҙә олпат, ҙур, иҫ киткес матур һындар күбәйһә лә, улар араһында беҙҙең милләткә ҡыҫылышы булғандары һирәк. Скульптура жанры, монументаль сәнғәт һәүәҫкәрҙәр эше түгел. Ләкин һуңғы йылдарҙа һәүәҫкәр скульпторҙар күбәйҙе. Ниндәйҙер проекттар эшләп, гипс йәки бетондан ҡоялар ҙа, шуны ҙур хәбәр итеп һөйләйҙәр. Граниттан эшләгәс кенә үҙеңде ысын скульптор итеп тоя башлайһың бит! Бынан тыш, Башҡортостанда гранит, мәрмәр, баҡыр, тимер, алтын өҫтөнән тапап йөрөгәндә, нишләп беҙ шулай бер көнлөк эш менән булышырға тейеш?

Йәш башҡорт скульпторҙарын уҡытыу, тәрбиәләү мәсьәләһе ауыр хәл ителә. Скульптура жанрында эшләргә үҙе теләп килгән, скульптор булам тип йөрөгән кешене күргәнем юҡ әле. Һөнәр үҙләштереп, уҡып сыҡҡан булалар, әммә араларында рухлы йәштәр һирәк. Бынан тыш, скульптура жанрында эшләү өсөн бик күп нәмәне белергә кәрәк, физик яҡтан да ауыр, технологияларын үҙләштереүе лә еңел түгел. Иҫ киткес ҡатмарлы, күп ваҡыт, көс талап иткән эш. Ә замана йәштәре анһатҡа һалышҡан, компьютер менән унысын-бынысын эшләргә күнеккән. Улар араһында минең кеүек иртәнге туғыҙҙан төнгө сәғәт 1-гә тиклем эш урынында тороп ҡалырға теләүселәр ҙә юҡ. Уның араһында башҡа төрлө тормош мәсьәләләрен дә хәл итергә өлгөрөргә кәрәк бит әле, етмәһә. Кеше үҙенең эшен еренә еткереп башҡарам тиһә, бик күп фиҙаҡәрлек талап ителә шул. Ә скульптурала һин эшләгән һындарҙың күплегенән бигерәк, халыҡҡа хеҙмәт итә торғаны булыуы мөһим. Берәү булһын ул, әммә берәгәй булһын. Шуны аңлаған кеше генә скульптор була ала, шуға минең уҡыусыларым да күп түгел. Рухлы егеттәрҙе генә алырға, өйрәтергә тырышам.



"Урал батыр" эпосы буйынса иң яҡшы скульптура проектына конкурста еңеүсе Аҡбуҙат.

***Башҡорт әллә ҡайҙа йөрөһә лә, Өфөнән ситтә торһа ла, Салауат Юлаев һәйкәле үҙ урынында булған саҡта, баш ҡалабыҙҙа беҙҙең рух һаҡланасаҡ. Монументаль сәнғәттән тыш, архитектура ла бик ҙур көскә эйә. Ҡыҙғанысҡа күрә, беҙҙең архитектурала миллилек сағылмай. Әле бына яңы төҙөлөп ятҡан мәсетте, башҡорт милли орнаменттары ҡулланып биҙәйҙәр, тип күрһәткәйнеләр. Әммә ябай торлаҡ йорттарында ла шундай биҙәлеш булырға тейеш, тип уйлайым. Милләтте тел, дин, йолалар аша ғына һаҡларға тимәгән, күҙгә салынған бөтөн нәмә милли колоритлы булырға тейеш. Быны тик башҡорттар ғына эшләй ала, сит милләт кешеләренең бөтәһе лә башҡорт асылын сағылдыра алмай.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Рәссам һәм скульптор - икеһе лә шағир, ләкин һуңғыһы бер ҡасан да шарж кимәленә төшмәй. Скульптура мәҙәкте лә, кәмитләнеүҙе лә, ҡыҙыҡты ла күтәрә алмай, хатта көлкөнө лә һирәк күтәрә. Мәрмәр көлмәй", - тигән билдәле француз яҙыусыһы Дени Дидро. Моғайын да, скульптор нәҡ ана шул Сократ иҫкә алған миллилекте, күңел торошон сағылдырырға бурыслы булған өсөн дә уның һөнәре етдилек талап итәлер.**

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

✓ *Мин үҙемдең Мөкәрәмә өләсәйемдең намаҙҙан һуң мотлаҡ аҙ ғына булһа ла мөнәжәт әйтеп, эргә-тирәһендәгеләрҙе илатыуын хәтерләйем. Ул саҡта тыңлаусыларҙың ниңә илағанын аңламағанмын.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!















**Хәҙер һәр кем ваҡыт ағымының тиҙерәк елеүен раҫлай. Ысынлап та, донъя арбаһы йылдан-йыл шәберәк тәгәрәй кеүек шул, йәтешләп ултырып өлгөрмәгәндәр этелеп-төртөлөп төшөп ҡала бара. Ошо йән-фарманға елеп барған арбаның бер мөйөшөндә, шөкөр, башҡорттар ҙа ултырып килә. Тамырҙарын онотҡан, быуындар араһындағы күсәгилешлек һәм рухи бәйләнешен юғалтҡан милләттәрҙең яҙмышы аянысло булыуын күреп, аңыбыҙға килә, асылыбыҙға ҡайта башланыҡ кеүек, ниһайәт. Был көндәрҙә Сибай ҡалаһында үткәрелгән Мөнәжәт башҡарыусыларҙың 2-се асыҡ ҡала бәйгеһен тамаша ҡылғанда ошо турала уйланылды.**

# РУХЫН ЮҒАЛТҠАН ТҮГЕЛ...

## мөнәжәт һәм нәсихәттәр әйткән халыҡ беҙ!

Башҡорт халҡының холоҡ-фиғеле тураһында боронғо рус ғалимдарының да, хәҙерге заман тикшеренеүселәренең дә яҙмалары байтаҡ. Кемдең баһаламаһын ғына алма, бөтәһе лә башҡорттар тураһында ҡунаҡсыл, ҡыйыу, эскерһеҙ, баҫалҡы, түҙемле, ғорур, үтә ғәҙел, тыныс холоҡло, үҙенсәлекле фәлсәфәле булыуҙары тураһында яҙа. Күп кенә рус яҙыусылары башҡорт кешеһенең бөгөнгө көн менән генә йәшәүен, киләсәк тураһында уйланмауын да билдәләй. Билдәле этнограф һәм фольклорсы, крайҙы өйрәнеүсе Сергей Рыбаков үҙенең яҙмаларында башҡорттарҙы: "Башҡорттар, тәү сиратта, тәбиғәт балалары. Ышаныусанлыҡ, шәфҡәтлелек, ярҙам итергә әҙер булыу, алсаҡлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ уларҙың йөҙөнә сыҡҡан, ҡиәфәттәре шундай эскерһеҙ һәм йәшерен уйниәтһеҙ, ҡырағайлыҡ һәм ажарланыу һис кенә лә юҡ", - тип тасуирлай. Ә бына крайҙы өйрәнеүсе В. М. Черемшанский XIX быуаттың икенсе яртыһында былай тип яҙа: "Ҡырағай һәм түҙемһеҙ, үҙенсә эшләргә күнеккән, азат һәм үҙ иркен сикләүҙәр менән килешмәгән, бер һүҙ менән әйткәндә - һуғышсан һәм үҙ белдеге менән эшләргә яратыусан халыҡ бөгөн тыныс, түҙемле һәм күндәм булып ҡалған, элекке баш бирмәҫ рухын юғалтҡан..."

Мөнәжәтселәр конкурсы тураһында яҙа башлап, башҡорттоң холоҡ-фиғеленә күсеп китеү юҡҡа түгел. Әгәр ҙә башҡорт милләте тап ошо үрҙә әйтелгән сифаттарға эйә булмаһа, көйө лә, һүҙҙәре лә ябай ғына яңғырауға ҡарамаҫтан, күңелгә шул тиклем оло һиллек килтергән мөнәжәттәрҙе, уйға һалырлыҡ нәсихәттәрҙе ижад итә алмаҫ ине, тип әйтмәксебеҙ. Был сараға Башҡортостандың төрлө район, ҡалаларынан һәм сит өлкәләрҙә йәшәүсе милләттәштәр йыйылды. Быуындан-быуынға күсә килгән, өләсәй-әсәйҙәренән отоп ҡалған мөнәжәттәрҙе йәштәргә ишеттерергә ниәтләп килеүсе етенсе тиҫтәне ашатлаған оло ағинәйҙәр ҙә, үҙҙәренең төбәгендә ауыҙ-тел ижадының был төрөн яңынан тергеҙеүҙе маҡсат итеүсе йәш ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ҙур ихласлыҡ менән ҡатнашты унда. Ойоштороусылар әйтеүенсә, конкурс икенсе тапҡыр үткәрелеүгә ҡарамаҫтан, мөнәжәт һәм нәсихәт жанрҙары тураһында хәбәрҙар булмаған, уны ишетмәгән кешеләр ҙә булған. Хатта ҡайһы бер районның мәҙәниәт бүлеген етәкләүселәрҙән дә ишетелгән "Нимә һуң ул мөнәжәт?" тигән һорау. Белмәүселәр был хаҡта дин әһелдәренән һорай, йә булмаһа башҡорт тарихын, уның мәҙәниәтен өйрәнеүсе элекке ғалимдарҙың хеҙмәттәренә күҙ һала алыр ине. Мәҫәлән, Сергей Рыбаков аңлатмалары буйынса, мөнәжәт - ул "Аллаға өндәшеү, дини йөкмәткеле шиғырҙар". Мөнәжәттәрҙең барлыҡҡа килеүе Ислам динен ҡабул итеүгә тиклемге осорға барып тоташһа ла, һуңынан улар Ҡөрьәнде йырлап уҡыу, өгөт-нәсихәт һәм дини китаптарҙы тасуири уҡыуға бәйле киң таралып китә. Бөгөн башҡорт ауыҙ-тел ижадының был төрө аҙ өйрәнелгән. "Бының сәбәбе билдәле: Совет осоронда динебеҙгә бәйле барлыҡ йолаҡағиҙәләребеҙҙе лә онотторҙолар бит, - тине конкурстың баһалама ағзаһы, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире, Бөтөн донья башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева. - Мөнәжәттәр ҙә шуға бәйле юҡҡа сыға яҙҙы. Әммә ул заманда ла тәҙрәгә ҡорған ҡороп булһа ла намаҙ уҡыуҙан, мөнәжәттәр әйтеүҙән туҡтаманы оло быуын. Мин үҙемдең Мөкәрәмә өләсәйемдең намаҙҙан һуң мотлаҡ аҙ ғына булһа ла мөнәжәт әйтеп, эргә-тирәһендәгеләрҙе илатыуын хәтерләйем. Ул саҡта тыңлаусыларҙың ниңә илағанын аңламағанмын. Әммә күңелгә инеп уйылған ул көй, ул һүҙҙәрҙе хәҙер ишетһәм, өләсәй мөнәжәтеләй ҡабул итеп, күҙҙәр йәшләнә..."

Конкурс барышында мөнәжәт менән ҡобайыр жанрын бутап сығыш яһаусылар ҙа булды. Баһалама комиссияһы ағзалары әйтеүенсә, мөнәжәт текстары борондан килә һәм улар әллә ни күп тә түгел, ә бына нәсихәттәрҙе хәҙерге заман шағирҙарының әҫәрҙәрен көйгә һалып башҡарырға ла була. Нәсихәт - ул кешегә ихлас күңелдән әйтелгән кәңәш һүҙе, изгелек ҡылырға һәм игелекле булырға әйҙәү, хаҡ юлға йүнәлтеү.

- Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижадының мөнәжәт төрө - уникаль күренеш. Аллаға өндәшеү, Уға таяныу, Унан ярҙам һорау, Уның ғына һине һаҡлай алыуына ышаныу, Уның алдына барып баҫҡас, эшләгән эшең, ҡылған ҡылыҡтарың өсөн нимә тип яуап биреүеңде уйлау - башлыса бына ошондай йөкмәткегә сағыла уларҙа. Шул тиклем тыйыуҙарға ҡарамаҫтан, ошондай йөкмәткеле мөнәжәттәрҙең һаҡланып ҡалыуы ҡыуаныслы. Ошо хәтерҙе һаҡлаусыларҙың сарабыҙға дәрт итеп, алыҫ араны яҡын итеп йыйылыуы ҡыуаныслы. Мөнәжәт һәм нәсихәттәр тыңлаусыға бик көслө йоғонто яһай бит ул, һәр кемдең күңел ҡылдарын сиртә, берәүҙе лә битараф ҡалдырмай. Киләсәктә конкурстың кимәлен төшөрмәй, артабан уны үҫтереүҙе хәстәрләргә кәрәк, - тине конкурсты ойоштороусыларҙың береһе, Сибай ҡалаһының "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе, баһалама комиссияһы рәйесе Асия Ғәйнуллина.

Конкурстың киләсәген бөтәһе лә яҡшыға юраны. "Быуылып ятҡан йылға йырылған кеүек. Халыҡ күңелендәге нисәмә йылдар быуылып ятҡан ижади маһирлыҡ, рухи байлыҡ шул тиклем күп. Халыҡ уның төмен белеп алды, инде юғалтмаҫ", - тине яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева ла.

Мөнәжәтселәр конкурсында төрлө йәштәге кешеләр ҡатнашты. Иң бәләкәй конкурсант 6 йәшлек булһа, иң олоһо һигеҙенсе тиҫтәһенә аяҡ баҫырға торған, һигеҙ ожмах асҡысы һәм ике донъя ҡиммәттәре тураһында уйланыр йәшкә еткән ағинәй ине. Силәбе өлкәһе Сосновка районы Әлеш һәм Табын ауылдарынан килеүсе оло ағинәйҙәр конкурста мөнәжәттәрҙе классик формала башҡарып таң ҡалдырҙы. Улар "Айы ла юҡ, ҡояшы ла", "Ата-әсәһенең балаға үтенесе", "Манара" мөнәжәттәрен көйләп ишеттерҙе. "Башҡорттар мөнәжәт әйтмәй ултырмаған, беҙ әле лә был йоланы ташламайбыҙ. Ауылдаштарға аятҡа йыйылғанда һәр ваҡыт мөнәжәт әйтәбеҙ, тик уны әйтеү ҡайғылы урында ғына тыйыла. Бәндә мәрхүм булып ҡалһа, уның йыллығы үтмәйенсә, был өйҙә мөнәжәт һөйләмәйбеҙ", - ти Әлеш ауылының хөрмәтле ағинәйе Заза Дауытова. Силәбе өлкәһендә йәшәүсе милләттәштәребеҙ ошо сарала башҡорт донъяһын күреп, фекерҙәштәре менән аралашып, дәртләнеп, ҡайтҡас, үҙҙәрендә лә "Ағинәйҙәр ҡоро"на ойошоп, Белорет ағинәйҙәре кеүек бер иштән күлдәктәр тектереп, балалар һәм йәштәр менән берлектә эшләргә, ошондай рухлы саралар үткәрергә ниәтләнеүен дә белдерҙе.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

# АҠ ҠАҒЫҘ АЛДЫНДА ТАҘАРЫНЫУ...

## Башҡортостан Яҙыусылар берлегенең 80 йыллығын ҡаршылап

**Яҙыусы. Замандың юлдашымы ул, юл күрһәтеүсеһеме, хакимымы, әллә ҡоломо? Кем ул ысын яҙыусы? Моғайын, ул ике, хатта бер-нисә заманды бәйләүселер. Беҙ, уҡыусылар, яҙыусыларҙы барыбер үҙебеҙсә, үҙебеҙгә кәрәккәнсә генә күҙ алдына килтерәбеҙҙер. Ә яҙыусы үҙе заманы, ҙурҙан ҡупҡанда, дәүере алдындағы бурысын нисегерәк тоя икән? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап табыу маҡсатында редакциябыҙға ошо көндәрҙә 80 йыллыҡ юбилейын билдәләгән йәмәғәт ойошмаһы - Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе, драматург Наил ҒӘЙЕТБАЙҙы саҡырҙыҡ.**

**▸ Наил Әсхәт улы, юбилейҙы иҫәпкә алып, тәүге һорауҙы ошо юҫыҡҡа йүнәлтмәксебеҙ. Башҡортостан Яҙыусылар союзына кемдәр нигеҙ һалған? Ул ни өсөн төҙөлгән? Быға ниндәй хәлдәр, процестар сәбәпсе булған?**

- Бынан 80 йыл элек республикабыҙҙың Яҙыусылар берлеге барлыҡҡа килтерелгән. Был ваҡыт эсендә берлек Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Дауыт Юлтый, Назар Нәжми, Һәҙиә Дәүләтшина, Баязит Бикбай һымаҡ классиктарыбыҙҙы донъяға билдәле иткән, меңләгән әҙипте берләштергән, уларҙың әҫәрҙәрен 56 телгә тәржемә итеп, миллионлаған тираж менән баҫтырып сығарған.

1927 йылда Башҡортостан пролетар яҙыусылар ассоциацияһы барлыҡҡа килә. Ләкин, рәсми берләшмә булһа ла, идеологик ҡапма-ҡаршылыҡтар арҡаһында, төрлө төркөмдәргә тарҡалған яҙыусылар бер-береһенә ҡаршы көрәш алып барыуын дауам итә. Уларҙы берләштереү маҡсатында төҙөлә лә инде Яҙыусылар берлеге. Әлбиттә, яңы ҡоролошҡа хеҙмәт итеүсе яҙыусы тәрбиәләү маҡсаты ҡуйыла яңы ойошма алдына. 1932 йылда БАПП бөтөрөлә, ВКПб-ның Башҡортостан өлкә комитеты Башҡортостан Яҙыусылар союзын булдырыу тураһында ҡарар сығара. Ойоштороу комитетын Башҡортостан Үҙәк башҡарма комитеты рәйесе Афзал Таһиров етәкләй. 1934 йылдың март айында БАССР яҙыусыларының I съезы уҙа. Идара рәйесе итеп Афзал Таһиров һайлана. Көн тәртибендә һуңғы йылдарға йомғаҡтар яһала, Союздың Устав проекты ҡарала, идара ағзалары, I Бөтә Союз яҙыусылар съезы делегаттары билдәләнә.

Яҙыусылар союзы барлыҡҡа килеү менән элекке айырым-айырым төркөмдәр "һуғыш"ы хәҙер инде Союз эсендә дауам итә. Тарихта репрессия йылдары булып яҙылып ҡалған 1937 йылдың 27 июлендә идара ултырышында бер ниндәй нигеҙһеҙ яла яғып, бер төркөм яҙыусылар: А. Таһиров, Д. Юлтый, Б. Ишемғол, Ғ. Дәүләтшин, тағы бик күп әҙиптәр союздан сығарыла, Т. Йәнәби, Ғ. Амантай, Һ. Дәүләтшина, И. Насыри, М. Марат һәм башҡалар эҙәрлекләүҙәргә дусар ителә. Бөтәһе 28 яҙыусыбыҙ золом ҡорбаны була. Уйлап ҡараһаң, репрессияға эләккән яҙыусыларыбыҙҙың һаны Бөйөк Ватан һуғышына алынып, һуғышта һәләк булған яҙыусыларыбыҙ һанынан да артығыраҡ булыуы аяныслы. Һуғышта 20 яҙыусыбыҙҙы юғалтҡанбыҙ.

Әйткәндәй, яҙыусыларыбыҙҙың кешеләрҙә илгә мөхәббәт, патриотизм тәрбиәләүе һуғышта еңергә ярҙам итә. Әгәр ошондай сәйәсәт алып барылмаһа, беҙҙең ил фашист илбаҫарҙарына ҡаршы тора алмаҫ ине. Халыҡты изге һуғышҡа күтәреүҙә шағирҙарҙың, прозаиктарҙың һәм драматургтарҙың өлөшө баһалап бөткөһөҙ ҙур бит. Әгәр бөгөн һуғыш башлана ҡалһа, халыҡ элекке һымаҡ уҡ дәррәү күтәрелеп сығырмы? Әйтеүе ауыр. Бөгөн ҡайһы бер киң мәғлүмәт саралары халыҡтың аңын тарҡата. Был эштең башында, әлбиттә, беҙҙең илде тарҡатыу маҡсатын алға һөргән сит ил хеҙмәттәре тора. 1945 йылда СССР-ҙы тарҡатыу маҡсатында Аллен Даллес төҙөгән план тормошҡа ашты, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы. Ошо пландың һөҙөмтәһелер - әҙәбиәтебеҙ ҙә һуңғы йылдарҙа ҙур ауырлыҡ кисерә. Халыҡҡа көнбайыш сәйәсәте яманды - яҡшы, ҡараны - аҡ тип тылҡый торғас, күптәр хәҙер бөтөнләй буталып ҡалды. Ошондай заманда халҡына дөрөҫ юл күрһәтеү - яҙыусының төп бурысы ла инде. Яҙыусы булараҡ, мине ошо проблемалар борсоуға һала. Драматургия өлкәһендә әүҙем яҙышыусыларыбыҙ ҡалмауы хәүефкә һала. Бөгөн килеп, драматургиябыҙҙың хәле ҡыл өҫтөндә ҡалды, ә прозаиктарыбыҙ: "Йәштәр юҡ", - тип, зарлана башланы.

**▸ Хәлдәр шулай уҡ насармы ни? Аҙ ғына ла өмөт саткылары юҡмы?**

- Әлбиттә, өмөт бар. Күптән түгел Яҙыусылар берлегенә 14 йәш авторҙы ағза итеп алдыҡ. Яңыраҡ Сибай ҡалаһында 9 районлан йыйылған ҡәләм тирбәтеүсе бер төркөм йәштәр менән осрашып, уларҙың ҡульяҙмаларын тикшерҙек, араларынан иң яҡшыларын һайлап, йыйынтыҡ итеп баҫтырырға тип, З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтенә тапшырҙыҡ. Урта быуын әҙиптәребеҙ менән дә эште йәнләндерҙек. Тәү сиратта, ижад емештәре өсөн бер ниндәй хуплау, маҡтау һүҙҙәре ишетмәгән яҙыусыларыбыҙға төрлө премиялар биреүҙе тиҙләтәбеҙ. Аптырарлыҡ: әҙәбиәттең төп йөгөн тартҡан йөҙләп ҡәләм оҫтаһы бер ниндәй наградала ла алмаған. Тел ҡәҙерен аңлаған кешегә - яҙыусыға иң тәүҙә йыйылы һүҙ кәрәк.

**▸ Бәләкәйҙән "Мин яҙыусы буласаҡмын" тип йөрөгән кеше киләсәктә һәләтле, танылған яҙыусы булып китә аламы?**

- Тәүге шиғырҙар өсөн әллә ни күп нәмә лә кәрәкмәй: тыумыштан бирелгән һәләтең дә етә. Әммә ысын шағир булыр өсөн күп итеп китаптар уҡыу талап ителә. Драматург булыу өсөн бигерәк тә. Бер мәл улым драма әҫәре яҙып ҡарарға булды. Был теләге барлығы тураһында миңә әйтеп, уға өйрәтеүемде һораны. Улыма китап кәштәһен күрһәттем дә: "Ошонда меңдән ашыу драма әҫәре бар, шуларҙы уҡып сыҡһаң, өйрәтермен", - тинем. Ул: "Бигерәк күп бит", - тип, албырғап ҡалды. Йәш драматургтар тәрбиәләү маҡсатында Талҡаҫ күле буйында күп тапҡырҙар семинарҙар үткәргәйнек. Семинарға килгән бер төркөм йәш яҙыусыға бер-нисә оҫта драматургтың әҫәрҙәр исемлеген бирҙем дә, киләһе дәрестә ошо әҫәрҙәрҙе тикшерәсәкбеҙ, тинем. Әммә йәштәр был китаптарҙы бөтөнләй тотоп та ҡарамаған булып сыҡты. Драматургия классиктарын белмәй тороп, драматург булып буламы? Юҡ, әлбиттә. Йәштәребеҙ китап уҡымағаны өсөн дә әлеге мәлдә әҙәбиәтебеҙ көрсөк кисерә. "Минең һәләтем бар", тип кенә яҙыусы булып булмай ул. Тағы бер нәмәне әйтеп үтергә кәрәктер. Яҙыусымын тигән яҙыусы һәр ваҡыт күңелендәген йәшермәй яҙырға тейеш. Талантлы шәхес кенә шулай ижад итә ала. Матур яҙырға тырышыу, яһалмалыҡ талантһыҙҙарға хас. Хәҙер күп кенә әҫәрҙәрҙә уҡыйһың да, ихласлыҡ етешмәй, күңелендәген яҙмайҙар, тигән фекергә киләһең. Ысын яҙыусылар бер хисен дә уйлап сығарып һүрәтләмәй, матур күренгәнде ысын тип расларға тырышмай. Шиғриәттә төп урында шулай ҙа образлылыҡ һәм парадоксаль фекерләү торорға тейешлекте лә онотмайыҡ...

**▸ "Яҙыусылар дөрөҫтө яҙырға бурыслы" тигән фекергә бәйләп, тағы бер һорау тыуа: ә яҙыусының үҙенең ер кешеһенә хас булған берәй етешһеҙлеге, алама холҡо булһа, ул юғары төшөнсәләр тураһында яҙырға хоҡуҡлымы, юҡмы?**

- Беҙ йыш ҡына яҙыусыларҙы, артистарҙы тәнҡитләргә әүәҫбеҙ. Яҙыусыға килгәндә, әгәр ул ниндәйҙер берәй етешһеҙлеккә эйә икән, яҡшылыҡ, изгелек, камил образдар тураһында яҙырға хоҡуғы юҡ, тигәнде аңлатмай. Һәр кем юғарыға ынтылып йәшәй. Яҙыусы ла - кеше. Әммә, аҡ ҡағыҙ алдында уның күңеле таҙара. Әйғни, аҡ ҡағыҙ алдына килеп ултырған саҡта яҙыусы "бысраҡ" әйберҙәр тураһында яҙа алмай. Шул тойғо, шул хәл-торош уны ижадҡа ылыҡтыра.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Наил Әсхәт улының шәхси һыҙаты - эшсәнлек, фиҙакәрлек икәнен беләбеҙ. Мәҙәниәт министрлығының беренсе урынбаҫары булып эшләгән сағында ул республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә мәҙәни усаҡтар, уҡыу йорттары асҡан икәнлеген дә хәтерләйбеҙ. "Тамаша" һәм "Рампа" журналдарын, Сибай ҡалаһындағы "Сулпан" балалар театрын, сәнғәт училищеһын ғына хәтергә төшөрөү ҙә етәлер, моғайын. Әлеге һөйләшеүҙә ҡунағыбыҙ фиҙакәрлек тураһында ла әйтеп үтте. Ҡәләмдәштәрен ул ысын эштәр башҡарырға саҡырҙы. "Яҙыусының ысын хеҙмәте - белемгә таянып, уҡымлы әҫәр яҙыу ул", - тине әҙип. Яҙыусы эше, ижад тураһында бындай һөйләшеүҙәр алда ла дауам итәсәк - киләһе 2015 йыл Рәсәйҙә лә, Башҡортостанда ла Әҙәбиәт йылы тип иғлан ителде бит. Был йыл көрсөккә терәлә барған әҙәбитебеҙ донъяһына йән өрөп ебәрер әле, тигән өмөтөбөҙ бар.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ЭХИНАЦЕЯ ҮҪЕМЛЕГЕ...

## ауырыуҙы иҫкәртә генә

■ Өлкәнәйә барған һайын, кешенең ишетеү һәләте түбәнәйә. Уның бер сәбәбе булып беҙҙе уратып алған шау-шыу тора, ти белгестәр. Был хәлдән В3 витамины барлыҡҡа килгән никотинамид матдәһе ҡулланып, һаҡланып була. Әммә әлегә һынауҙар бары тик лаборатор сысҡандарҙа ғына үткәрелгән. Эске ҡолаҡтағы һөйәк лабиринты өлөшө, йәғни, ҡусҡар күҙәнәктәре бик һиҙгер. Улар ҡолаҡтың эске шыйыҡсаһы тирбәлеүен тиҙ генә тоя, шул рәүешле беҙ төрлө тауыштарҙы ишетәбеҙ. Көслө тауыштан тыш, ҡусҡарҙарға ҡайһы бер антибиотиктар ҙа зыян килтерә. Уларҙың эшмәкәрлеген һаҡларға В3 витаминын барлыҡҡа килтергән матдә ярҙам итә. Төньяҡ Каролина университетының медицина мәктәбе ғалимдары билдәләүенсә, никотинамид менән ишетеү һәләте түбәнәйеүен генә түгел, өлкәнәйгәс барлыҡҡа килгән башҡа күңелһеҙлектәрҙән дә ҡотолорға мөмкин.

■ Көнөнә 3 тапҡыр ашауҙан баш тартыу, шулай уҡ яртышар тәүлек ашамай тороу артыҡ ауырлыҡты ғына түгел, ә диабет, яман шеш, Альцгеймер, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын еңергә булышлыҡ итә. Ғалимдар фекеренсә, эволюция күҙлегенән ҡарағанда, көнөнә өс тапҡыр туҡланыу бөтөнләй хата күренеш. Боронғо кешеләр даими туҡланыу тигән нәмәне белмәгән, әммә ашамайынса ла уйлау һәм эшләй алыу һәләтен юғалтмаған. Шуға ла ваҡыты-ваҡыты менән организмға ял биреп алыу файҙалы, ти улар. Ашауҙан тыйылып тороу стресты еңергә ярҙам итә, был ваҡытта ялҡынһыныу процестары туҡтала, яман шеш туҡланыу сығанағын юғалта, зарарланған күҙәнәктәрҙән ҡотолоу эшмәкәрлеге әүҙемләнә.

■ Һалҡын тейгәндә халыҡ дауаһына өҫтөнлөк биреүселәр әйтеүенсә, эхинацея үҫемлеге экстракты һауығырға ярҙам итә. Дарыуханалар ҙа был үҫемлек нигеҙендә әҙерләнгән дарыуҙарҙы ауырыуҙарға йыш тәҡдим иткәнен беләһегеҙҙер. Мэдисондағы Висконсин университеты ғалимдары эхинацея нигеҙендәге дарыуҙарҙы тикшергән һәм уларҙың һалҡын тейеүҙән дауалай алмауын асыҡлаған. Шулай ҙа эхинацея препараттарының ауырыуҙы профилактикалауҙа файҙаһы бар. Был тикшеренеүҙәрҙе үткәреүсе белгестәр раҫлауынса, был препараттарҙың күбеһе тикшереү үтмәй һәм аҙыҡҡа биологик өҫтәмә булып тора. Әйткәндәй, киҫкен вируслы ауырыуҙар менән яфаланыусылар дарыуға, шул иҫәптән, эхинацея өҫтәмәләренә йылына уртаса 8 млрд доллар исраф итә.

■ Голландия тикшеренеүселәре фекеренсә, Интернет шаяртыу һәләтенә кире йоғонто яһай. Кешеләр яйлап шаяртыу һәләтен юғалта, тип раҫлай Левена университетының социология уҡытыусыһы, профессор Йохан Верберкмоес. "Яҡшы итеп һөйләнгән көләмәс ваҡыт һәм үҙенсәлекле мөнәсәбәт талап итә, уны һөйләүсе кеше уға үҙенән дә нимәлер өҫтәп, уны яңыса балҡытып ебәрә. Зирәклек беҙҙең мәҙәниәттән юҡҡа сығып бара, кешеләр яйлап әңгәмәләшеп ултырыуҙы хәҙер кәрәк, тип тапмай", - ти ғалим.

ШАҢДАУ

# "БЕР БАЛА МЕНӘН СИКЛӘНЕҮ ИНАНЫУМЫ,

## әллә яҙмыш ҡушыуымы?"



### АЛЛАҺ БҮЛӘГЕ БУЛҺА, БЕР БАЛА ЛА - БАЛА

**"Киске Өфө"нө яратып уҡыйым. Үткән һандарҙың береһендә Зилә Ноғомmanagedованың "Бер бала менән сикләнеү инаныумы, әллә яҙмыш ҡушыуымы?" тигән мәҡәләһен уҡып, балаһыҙ йәки бер генә бала тәрбиәләгән ғаиләләргә мөнәсәбәт тураһында байтаҡ ҡына уйланып йөрөгәндән һуң, үҙемдең фекерем менән дә уртаҡлашмаҡсы булдым.**

Тәүҙә үҙем менән таныштырып китәйем: 19 йәштән генә эш өҫтөндә имгәнеп, ғәрип булып ҡалдым. Атайәсәйһеҙ яңғыҙ үҫкәнгә күрә, үҙемдең тормошҡа сығып, күп итеп балалар үҫтергем килә ине. Ошо теләк барлыҡ күңелемде биләп алғандыр, күрәһең: күп балалы туған-тыумасаларға барып, бала ҡарашып, һуңыраҡ бәләкәй кластарҙа вожатый булып та эшләп йөрөнөм. Аҙаҡ уҡытыусы һөнәрен һайлауым да шул бала ятратыуҙан ине. Ҡазаланып, умыртҡа һөйәген һындырғас, операция башланырҙан алда наркоз кимәлен тикшереү маҡсатында табип мине һөйләндермәксе булып: "Тормоштаһыңмы, балаң бармы?"- тип һораған, мин уға: "Юҡ, кейәүгә сыҡһам, ун бала табам", - тигәнмен. Аҙаҡ, иҫемә килеп, хәл керә башлағас, врачтар мине: "Венера, нисә бала табырға уйлайһың әле?"- тип мәрәкәләр булдылар. Бала хаҡындағы уйҙарҙы күңелемә нығлап тап улар һалғандыр ҙа, бәлки, тик ул ваҡыт ҡайҙа был хаҡта уйлау: ҡул-аяҡ бармаҡтарын да ҡыбырҙатыр хәл юҡ!

Эргәмдә бәпесем ята икән, тип, төштәремдә күрһәм дә, бала тураһында уйларға ла ҡурҡа инем, ә хыялым уйҙырма, төпһөҙ, хатта мәғәнәһеҙ булып тойола ине. Тик өйҙә генә ултырам, ингән-сыҡҡан кеше юҡ, урамға инде күптән сығырлыҡ хәлдә түгелмен. Үҙемә ни бары 20 йәш, 1-се төркөм инвалидымын. Ошо хәлдә 14 йыл да үтеп китте. Ниһайәт, мин дә осраттым үҙ яртымды, өйләнештек. Өс йылдан һуң ғына балаға уҙҙым. Илаһым, ҡөҙрәтеңдең иге-сиге юҡ! Уйларға ла ҡурҡҡан теләгем ҡабул булды. Мәле еткәс, шалҡандай ап-аҡ, оҙон буйлы, зәпзәңгәр күҙле ҡыҙ бала алып ҡайттым. Мөғжизәме? Эйе, уйлап - уй етмәҫлек, һөйләп - һүҙ бөтмәҫлек мөғжизә! Ул саҡ табиптарҙың сабыйҙың ағза-һаны, аңы теүәл микән, күрәме, ишетәме икән тип ғауғалашыуы! Баш табип хатта өйгә килеп: "Балаң бигерәк матур, һап-һау, тик үҙең ҡарай алмаҫһың, сабыйҙар йортона бир, үҫкәс, ҡайтарып алырһың", - тип йөрәгемде өҙгөләне... Юҡ, юҡ, кеше өсөн түгел, үҙем өсөн таптым, тип ҡысҡырыу хәленә килтереп еткерәләр ине. Ҡыҙымды үҫтереүем - үҙе бер китап яҙырлыҡ: әсәй ҙә, уҡытыусы ла, тәрбиәсе лә булдым уға. Аллаға шөкөр, бик тә итәғәтле, әҙәпле, уңған, ғәҙел холоҡло булып буй еткерҙе. Үҙем белгән ҡул эштәренә, ашһыу әҙерләргә өйрәнеп үҫте. Тәүҙә - техникум, аҙаҡ институтты ҡыҙыл дипломға тамамланы.

...Ҡыҙыма 6 йәш кенә ине әле - шул йылды халыҡты иҫәпкә алыу кампанияһы үтте. Атаһы урыҫ булһа ла, балам үҙен башҡорт тип яҙҙыртты, ә ун йәше тулғас, үҙ аҡылы менән ҡала хакимиәтенә йөрөп, минең фамилияға күсте - ана шундай ул минең ҡыҙым!

Шуныһын да әйткем килә: мин бала үҫтергәндә дәүләттән һуҡыр бер тин дә ярҙам булманы... Атаһы эшһеҙлек буйынса сиратҡа теркәлгәйне, шул саҡ донъя ҡуйҙы. Ни бары икмәккә етерлек кенә пособие килә ине. Үҙемә пенсияны өсәр ай тотҡарлатҡан саҡтарҙы ла баштан үткәрергә тура килде...

Йәмғиәтебеҙҙә әсәләрҙең төрлөһө бар: күп балалылар ҙа, яңғыҙ бала ҡарағаны ла, ғәрип әсәләр ҙә... Кемделер алғы планға ҡуйып, икенселәрҙе ситкә тибәреүҙе мин аңлай алмайым һәм быны менән килешмәйем. Белеүемсә, ата-әсәләре ғәрип булып та, икешәр-өсәр бала үҫтергән бынамын тигән ғаиләләр бар. Ә балаларын ҡара һин уларҙың: аҡыллы, сабыр, уңғандар. Бына шундай ғаиләләрҙе лә иҫәпкә-иғтибарға алһын ине дәүләтебеҙ. Ундайҙар ҙа ошо уҡ йәмғиәт ағзалары бит! Йәшәйешебеҙҙе шулай уҡ бер ҡалыпҡа һалып булмай һәм ярамай ҙа. Кемдер бик теләп, икенселәре - уйлап, бәғзеләре - уйнап, хатта ки көсләү һөҙөмтәһендә лә табалар баланы. Был фәҡәт Тәбиғәт эше, тип уйлайым мин. Әсәлек бәхетен татығаным өсөн бик тә рәхмәтлемен Хоҙайға. Инде лә үҙең һаҡлап, яҡлап, ҡурсалап, рәхмәтең үә рәхимең менән илт тормош юлынан баламды, тип кенә теләйем хәҙер Раббымдан.

**Венера АБДУЛЛИНА.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

### ЯҘМЫШ ЯҢЫЛЫШ ОСРАШТЫРМАЙ...

**"Киске Өфө" гәзитенең 44-се һанында Зилә Ноғомmanagedованың "Бер бала менән сикләнеү инаныумы, әллә яҙмыш ҡушыуымы?" тигән мәҡәләһендә ҡуйылған һорауға мин: "Әлбиттә, яҙмыш ҡушыуы", - тип яуап бирер инем. Сөнки Аллаһы Тәғәлә Ерҙә китек күңелле, Йыһанға зыян килтерерҙәй яңылыш ҡарашлы йәндәрҙең артыуын теләмәй. Агрессив әсәләрҙән шундай балалар тыуа. Ә агрессия ҡайҙан барлыҡҡа килә һуң?**

Күпселек Әҙәм балалары, мин яҙмышымды үҙем яҙам, яҙмышыма үҙем хужа, тип шәпләнһә лә, барыбыҙға ла мәғлүм, яҙмышты Хоҙай тәҡдир итеп яҙып төшөрә, ә яҙмышыңды үҙгәртеү - үҙеңде ҡырҡа үҙгәртеүҙе аңлата. Ни өсөн берәүҙәрҙең тормошо, артыҡ көс һалмаһа ла, ал да гөл китеп бара, ә ҡайһылырҙың һикәлтәле-соҡорло, һынау өҫтөнә һынау өҫтәлеп кенә тора? Барыһы өсөн дә беҙҙең үткән быуындар, олатай-өләсәйҙәребеҙ "ғәйепле". Улар йәшәгән осорҙағы эмоциялары, уй-ҡараштары, тормоштары киләһе быуындарының яҙмышы, холҡо булып яҙыла. Был хәҡиҡәтте биоэнерготерапевт Лазарев Сергей Николаевич үҙенең тикшеренеүҙәрендә аңлата. Уның китаптары менән күптәр таныштыр, тип уйлайым: "Диагностика кармы", "Человек будущего", "Опыт выживания". Ни тиклем кеше ыңғай йәки негатив эмоция кисерә, ни тиклем риза булып йә зарланып йәшәй, тойғолар шул тиклем тәрәнгә, кешенең төпкөл аңына күсеп, уның киләһе бер-нисә быуын балаларының яҙмышына әйләнә.

Хәҙер инде рустарҙың "Муж и жена - одна сатана" тигәнен иҫкә төшөрәйек. Юҡҡа ғына шулай әйтелмәй икән, баҡтиһәң, әлеге лә баяғы шул С.Н. Лазарев буйынса, иреңең тышҡы холҡо ҡатынының эске торошона, төпкөл аңында йәшеренгән характерына тура килә, имеш. Йәки - киреһенсә. Мәҫәлән, ире тәкәббер, һаран икән, ҡатынында ла шул уҡ сифаттар була, тик улар кеше күҙенә салынып бармай, әммә эске булмышында һалынған була. "Йәшәп ҡалыу тәжрибәһе. 6 өлөш" ("Опыт выживания. 6 часть") китабында әйтелгәнсә, Хоҙай кешене билдәле бер принцип буйынса осраштыра. Бына уның китабынан өҙөк килтерәм: "...ир менән ҡатындың йәне улар ысынбарлыҡта танышҡанға тиклем күпкә алдан осраша. Улар оҡшашлыҡтары буйынса һайлап алына. Әгәр ҙә яҙмыш насар ир менән осраштырһа, тимәк, ҡатында ла шул сифат бар. Әммә ул һыҙат йыш ҡына асыҡ сағылмай, күренмәй. Был осраҡта уларҙың 3-4 быуын ата-бабалары нисек йәшәүе менән ҡыҙыҡһынырға мөмкин".

Аллаһы Тәғәлә ҡатын-ҡыҙға, иреңде үҙгәртергә теләһәң, үҙеңә ҡара, үҙең үҙгәр, тигән ишара яһай. Ирең, яҙмышың менән риза булмау - Хоҙайҙың биргән яҙмышына, тәҡдиренә риза булмау, Уға агрессия белдереү, Уға ҡаршы сығыу, Уның ихтыярын танымау булып килеп сыға - был инде ҙур гонаһ һәм язаһы көттөрмәй. Һин риза булмаған һайын, Алланың ихтыярын танымаған һайын, Ул һынауҙарын да арттыра: берәй ауырыу килә, бәлә-ҡаза сыға, проблема тыуа. Шул гонаһты ҡатын-ҡыҙ аңламаһа, тәүбәгә килеп, дөрөҫ фекергә килмәһә, агрессив йәнле быуын китә. Ҡатын-ҡыҙ әсә булараҡ, үҙенең ыңғай һәм кире сифаттарын балаһына күпкә арттырып күсерә, шуның өсөн дә ул киләһе быуын өсөн күберәк яуаплы.

Хоҙайға булған агрессия кире ҡайта һәм тәү сиратта язаһы төрлө ауырыуҙар, ауыр яҙмыш булып балаларға төшә. Был сәбәп һәм һөҙөмтә бәйләнеше, йәки карма тип атала. Ә беҙ, ир - баш, ҡатын - муйын, ҡайһы яҡҡа теләйем, шунда борам, тип көләбеҙ, Хоҙайға ҡаршы сыҡҡаныбыҙҙы аңламайбыҙ. Ул, рәхмәт төшкөрө, һуңынан илата-илата аҡылға ултырта.

Дин менән имандың айырмаһы бармы? Динле булып та, әгәр ритуалдарға ғына әһәмиәт биреп, йөкмәткеһенә төшөнмәһәң, имандың ысын мәғәнәһен аңламауың ихтимал. Иман, тәү сиратта, күңелдә, йәндә һәр ваҡыт илаһи мөхәббәт булыуын талап итә: ниндәй генә хәл килеп тыуһа ла, риза

✓ *Был күренеш Йыһан, Аллаһы Тәғәлә ҡанундарына тап килмәй. Иң мөһиме - илаһи мөхәббәт һәм йән икәнен онотоп барабыҙ. Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух түгел, киреһенсә, йән таҙалығы тәнгә сәләмәтлек килтерә.*



булып, Хоҙайҙың юҡҡа ул хәлде тыуҙырмағанын аңлап ҡабул итеү...

Бөгөн беҙ дингә кире ҡайта башланыҡ кеүек тә, шул уҡ ваҡытта алыҫлаша барабыҙ ҙа һымаҡ. Шундай парадокс килеп сыға. Сөнки ата-бабаларыбыҙҙың йәшәйешен инҡар итеп, Көнбайышҡа тиңләшергә тырышабыҙ. Ә унда - педофилия, гомосексуализм... Былар беҙгә лә килеп етте түгелме? Сәбәбе үтә лә ябай: ир заты - рух, Хоҙайға яҡын булыуға, ҡатын-ҡыҙ - матди байлыҡҡа, тормош рәхәтлектәренә өҫтөнлөк бирә. Ерҙә матриархат хакимлыҡ итә, матди байлыҡҡа сат йәбештек, ә рух һәм ир заттары артҡы планға күсеп бара. Тигеҙлек, демократия, имеш... Был күренеш Йыһан, Аллаһы Тәғәлә ҡанундарына тап килмәй. Иң мөһиме - илаһи мөхәббәт һәм йән икәнен онотоп барабыҙ. Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух түгел, киреһенсә, йән таҙалығы тәнгә сәләмәтлек килтерә.

**Зәлифә ЗӨЛҠӘРНӘЙЕВА.**
**Баймаҡ районы.**

# ӘСӘ БУЛЫУҘАН ТЫЙЫЛМАЙЫҠ!

**Иҡтисадсы Илдар Ғәбитов "Киске Өфө"лә лә, "Йәшлек" гәзитендә лә күп балалы ғаиләләргә, күп балалы әсәләргә миҙал биреү-бирмәү проблемалары тураһында бер нисә мәҡәлә яҙып сыҡты. Беҙ ҙә ғаиләбеҙ менән ошо актуаль, көнүҙәк проблемаға ҡарата бер нисә фекеребеҙҙе әйтеп китергә теләнек.**

Беренсенән, лайыҡлы әсәйҙәргә генә миҙал бирергәме? Кем ул лайыҡлы әсәй? Беҙҙеңсә, Аллаһы Тәғәлә баланы бөтәһенә лә бирмәй. Күпме кеше бала таба алмай интегә! Был осраҡта, бала бар икән - факт. Әсәһе эсәме, ҡараймы-ҡарамаймы балаһын, быныһы - икенсе шарт. Иң беренсе урында: Аллаһы Тәғәлә был әсәгә бала биргән, был ҡатын аша яҡты донъяға ниндәйҙер йән тыуған. Тимәк, был әсәй (тәртибе ниндәй генә булһа ла) - лайыҡлы! Аллаһы Тәғәлә алдында әсәй булырға лайыҡлы, был тормошта бер нәмә лә бушҡа түгел бит! Шулай булғас, беҙҙең (ябай кешеләрҙең) ниндәй хаҡыбыҙ бар ошо әсәләргә "лайыҡлы" йә "лайыҡһыҙ" тип мөһөр баҫып ултырырға? Әгәр кем дә булһа үҙенән башҡаны әүлиә тип белмәй икән, был гонаһтың башы һанала.

Әхлаҡ, тәрбиә - тәү ҡарашҡа ябай, әммә бик тәрән мәсьәләләр. Бер кешенең дә икенсе кешене кәмһетергә хоҡуғы юҡ. Күңелебеҙ менән генә булһа ла Аллаһы Тәғәлә алдында кемдәндер юғарыраҡ торам тип уйлау - ҙур гонаһ. Әлбиттә, беҙ был мәҡәләбеҙҙә тәртипһеҙ әсәләрҙе аҡламайбыҙ, ләкин әсәй кеше ниндәй генә булмаһын, ул - Әсә! Тәртибе насар кешеләр үҙ язаһын суд аша аласаҡ, әммә күңел язаһы инде кеше ҡулында түгел, Хоҙай ҡулында. Шуға күрә, Илдар Ғәбитовтың мәҡәләләрен уҡығандан һуң, уның һүҙен фәлсәфәүи яҡтан ҡеүәтләп, шуны әйтәбеҙ: ҡатын кеше нисә тапҡыр булһа ла әсә булған икән - был күренеш, һис шикһеҙ, маҡтауға лайыҡ!

Икенсенән, башҡорт халҡында "Һәр бер бала был донъяға үҙ өлөшө менән тыуа" тигән әйтем бар. Шулай булһа ла, ярлылыҡты арттырмайым, тип, юҡһыҙлыҡтан, етешһеҙлектән ҡурҡып, күпме ҡатын әсә булыуҙан тыйыла! Был юҫыҡта донъяға дини ҡараш ҡына ярҙам итә алалыр. Сөнки материаль фәлсәфәүи ҡараш менән йәшәп, кеше тормошон "файҙалы - файҙаһыҙ", "кәрәкле - кәрәкһеҙ" бизмәненә һалып, прагматик рәүештә генә йәшәһәк, кешелек булараҡ юҡҡа сығыуыбыҙ бар. Ғөмүмән, кеше тормошондағы иң ҡәҙерле, иң татлы хистәр, бала һөйөү шатлығы, ейәндәр күреү бәхете - бер ниндәй ҙә матди хаҡ менән иҫәпләнә алмай бит! Тәүфиҡлы кеше тәрбиәләр өсөн балаларҙың һөйөп-һөйөләп йәшәүе шарт, яндарында ниндәй генә булһа ла үҙ ата-әсәләре булыуы шарт. Тағы бер тапҡыр үрҙә яҙылған фекерҙе ҡабатлайбыҙ: хис-тойғоларҙы, ябай кеше мөнәсәбәттәрен аҡса бизмәненә һалып үлсәргә ярамай.

Тәүфиҡлы, мөхәббәтле ғаиләләр ҡороп, итәғәтле балалар үҫтерәйек, милләттәштәр! Нисек кенә булмаһын, кешеләр мөнәсәбәттәренә ниндәй генә яңылыҡтар килеп инмәһен, ғаилә - кешелек йәмғиәтенең төп нигеҙе булып ҡала.

**Гүзәл һәм Урал ВИЛДАНОВтар.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*

# ДИНҺЕҘ МЕНӘН ДИНДАР БӘХӘСЕ




## Ожмах һәм тамуҡ

Был юлы дуҫым бик тыныс һәм үҙен ышаныслы тотоп, хәбәрен яйлап ҡына башланы:

- Алланы мәрхәмәтле, шәфҡәтле тиһегеҙ, ләкин ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ҡылған гонаһтарыбыҙ өсөн ул беҙҙе нисек язалай, мәңгелеккә тамуҡта яндыра. Нинә шул тиклем үсләшергә? Тотош ғаләм менән сағыштырғанда, кеше бер сүп кенә, ә Алланың бөйөклөгө менән сағыштырғанда - юҡ хөкөмөндә.

- Хаталарыңды төҙәтербеҙ, дуҫҡайым. Беренсенән, беҙ Йыһандағы сүп түгел һәм Алла алдында дәрәжәбеҙ кимәле лә юҡ хөкөмөндә түгел, ә бик бөйөк. Беҙгә Ул йән өргән бит, күкте һәм ерҙе мираҫ итеп әйткән, бәйғәмбәрҙәр беҙҙең алда баш эйгән, һәм Ул беҙҙең хаҡта Ҡөрьәндә: "Беҙ Әҙәм балаларын хөрмәт иттек, уларҙы ҡоро ер һәм диңгеҙ буйлап йөрөттөк, рәхәтлектәр менән сорнап алдыҡ һәм барлыҡҡа килтергән күп нәмәләр алдында уларға өҫтөнлөк бирҙек", - ти.

Йыһандың сикһеҙлеге менән сағыштырғанда беҙ сүп кенә кеүек тойолабыҙҙыр, бәлки. Ләкин беҙ ғаләмде, күк көмбәҙе закондарын өйрәнәбеҙ, һәр планета өсөн уның орбитаһы һүрәтен төшөрәбеҙ. Һуңынан космонавтар Айға төшөп, беҙҙең ерҙән тороп һүрәтләгән күҙаллауҙарыбыҙҙы раҫлай. Был беҙҙең рухыбыҙ менән ғаләмдән мөһабәтерәк икәнебеҙҙе күрһәтә түгелме?

Ысынлап та, суфыйҙар раҫлағанса, кеше - сикһеҙ китап, ә ғаләм - уның биттәре. Кешелә Алла рухының өлөшсәһе бар, һәм уның эштәре отчет талап итә.

Алланың язаһына дусар ителгән гонаһ тураһындағы һүҙҙәрең дә - хата. Алла йәшәгән саҡта эшләп өлгөрмәгәнен эшләү өсөн яҡты донъяға ҡайтарыуҙы үтенгән мәңге тамуҡта яфаланыусылар хаҡында: "Әгәр улар ҡайтарылһа, барыбер тыйылғанға кире ҡайтырҙар ине. Улар бит - алдаҡсы, - ти. - Уларҙың гонаһы - ваҡытта сикләнгән гонаһ түгел, ә һәр ваҡыт ҡабатланып тороусы даими холоҡтары. Мәңге йәшәһәләр ҙә, мәңге гонаһ ҡылырҙар ине".

Тимәк, был үҙенсәлек -улар рухының мәңгелек билдәләнеше, ә донъялыҡтағы көтөлмәгән шарттарҙа осраҡлы хата түгел. Гонаһлылар менән ут араһында ниндәйҙер оҡшашлыҡ барлығына шик юҡ. Уларҙың рухында көнсөллөк, нәфрәт, алдашыу, асыу уты яна, енәйәти тойғолар ҡайнай - былар барыһы ла ялҡынға оҡшаған. Бындай рухтар һуғыш уты тоҡандырмайынса тыныс ҡына йәшәй алмай, сөнки ут -уларҙың мөхите, уларҙың стихияһы, тәбиғәте. Бындай рухтарҙың урыны - тамуҡ, тигән фекерләү дөрөҫ. Бындай кешеләр ожмах рәхәтлектәре менән файҙалана алмаҫ, ундағыларҙың тормошон ағыулар ине. Ерҙәге тыныслыҡтан баш тартҡандар бит.

Беҙ "тамуҡ" һәм "ожмах" төшөнсәләрен аңларға тейешбеҙ. Тамуҡ - ул, күптәр күҙ алдына килтергәнсә, янғын йәки эҫе табала ҡыҙҙырыу ғына түгел, тамуҡ - киң төшөнсә. Был ут һүҙҙең туранан-тура мәғәнәһендә генә түгел. Алла, гонаһлылар тамуҡта бер-береһе менән һөйләшә, әрләшә, ти. Унда "зәҡҡум" ағасы бар, уның емештәре шайтан баштарына оҡшаған, тамуҡтағы сылбырҙар менән бәйле гонаһлылар ошо ағастың емештәрен ашай , эренле, ҡайнар һыу эсә, был уларҙың "эске ағзаларын телгеләй". Ҡайнап торған һыуға сәсәп, берберeһен ҡарғай. Тамуҡ - ут, ялҡын символы. Тик ул ут - ерҙәге ут кеүек түгел, тәндәребеҙ ҙә был уттан йәндәребеҙ кеүек янмай, һынып, онталып бармай. Яза, ысынында, һиҙелерлек, ләкин аныҡ ҡына нисек икәне сер. Ожмахта ла шул уҡ хәл. Ожмах - емеш-еләктәр тулып торған баҙар ҙа, ғәжәйеп ҡоштар һайрап торған баҡса ла түгел. Ҡөрьәндә: "Алланан ҡурҡыусыларға вәғәҙә ителгәнсә, ожмах образы боҙолмай торған һыулы йылғалар, тәме һис ҡасан үҙгәрмәгән һөт йылғалары", - тиелгән. Был ожмах төшөнсәһенә яҡынайтылған ғына аңлатма, ә ысынында ул билдәһеҙлек. Аллаһы Тәғәлә әйткәнсә, ожмах емештәре бөтөрлөк түгел һәм тыйылмаған, эсемлектәренән баш ауыртмай һәм аң юғалмай. Беҙҙең рухтарыбыҙ бында беҙ белмәгән ысулдар менән таҙартыла. Ожмахтағы ләззәт һәм тамуҡтағы яза үҙенсәлектәре - Аллаһы Тәғәлә үҙе генә белгән сер. Теге донъялағы яза - Алланың үҙ ҡолдарын мәжбүр итеүе түгел, ә сафландырыуы, аңлатыуы, төҙәтеүе һәм мәрхәмәте. Яза һәр ваҡыт ғәҙел. Алла дингә ышаныусыларҙы язаламай, ләкин төҙәтеү һәм аңлатыу файҙаһыҙ булғандарға яза билдәләй. Яза -ул шулай уҡ Алла мәрхәмәте. Әгәр ул залимға ла, йәберләнеүсегә лә, үлтереүсегә лә һәм үлгәнгә лә берҙәм мәрхәмәтлек күрһәтһә, ғәҙел булыр инеме ни?

Изгелекте һәм яуызлыҡты тигеҙләү ғәҙелме? Алланың яза биреүенә ышанмаусыларға шуны әйтәбеҙ: "Алла был донъяла язаһын бирмәйме ни? Ҡартлыҡ, ауырыуҙар яза булмай нимә булһын? Ә микробтарҙы кем барлыҡҡа килтергән? Был беҙҙең яҙмышыбыҙ Алла ҡулында булыуын, Ул беҙҙе был һәм теге донъяла ла язалай алыуын күрһәтә.

**"Динһеҙ менән бәхәс" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## "Аҡыл вирустары" менән идара итеү: аң өсөн көрәш

Беҙ дусар ителгән аныҡ хәүеф анды аҫтыртын программалауға бәйле. Ул һеҙҙең аңығыҙҙа билдәле бер мәғлүмәтте һаҡлай. Мәҫәлән, бала саҡта ғаиләгеҙ менән матур йорт эргәһенән үтеп киттегеҙ икән, ти. Һеҙ был йортҡа ҡарап һоҡланыу белдерәһегеҙ, ә әсәйегеҙ, бындай йорттарҙа йәшәүселәр, нигеҙҙә, бәхетһеҙ була, тип әйтеп ҡуя. Тап шул ваҡытта "аң вирусы" менән зарарланаһығыҙ һәм "Бәхетте аҡсаға һатып алып булмай", тигән һығымта яһайһығыҙ. Был мәғлүмәт аңығыҙҙа ғүмер буйы һаҡлана, ә һеҙ хатта үҙегеҙгә шундай программа һалынғанлығы хаҡында уйлап та ҡарамайһығыҙ.

Иң хәүефлеһе - программалауҙың 90 проценты кире булып сыға һәм кешене сикләй йәки ҡурҡыу тойғоһона дусар итә. Бындай программалау үҙ уңышығыҙҙы үҙегеҙ быуыуға, бәхет һәм сәләмәтлектән баш тартыуға килтерә. Уның һөҙөмтәһе телевизор ҡарағанда йәки ошо хаҡтағы мәғлүмәт менән осрашҡанда арта бара.

## Нисек итеп хөкүмәт уңышҡа аяҡ сала?

Әйтеп үтеүемсә, киң мәғлүмәт саралары - ғәйеплеләрҙең береһе генә; унын тыш, халыҡты сикләү һәм мохтажлыҡ мемдары менән ағыулау өҫтөндә туҡтауһыҙ эшләүсе бик күп йәмәғәт ойошмалары бар. Миҫал өсөн, хөкүмәтте генә алайыҡ. Әгәр һеҙ коммунистик йәки социалистик режимлы илдә йәшәһәгеҙ, хөкүмәткә һеҙҙең аңығыҙға, байлыҡ - насар, барлыҡ граждандар башҡалар тураһында хәстәрлек күрергә бурыслы һәм коллектив именлек өсөн шәхси бәхетен фиҙа ҡылыу - йәмғиәттең һәр ағзаһының изге бурысы, тигән инаныу һеңдереү отошло.

Бигерәк тә Америка Ҡушма Штаттарында, Берләшкән Короллектә, Францияла, Канадала, Австралияла һәм башҡа, үҙен демократик дәүләт йәки республика тип иғлан иткән, ирекле эшҡыуарлыҡ системаһы буйынса эшләгән илдә аныҡ хәүеф йәшәй. Уларҙа ирекле баҙар тураһында күп һөйләнелә, әммә социаль программалар, монополияға ҡаршы көрәш һәм дәүләттең һаулыҡ һаҡлау системаһы инновациялар файҙаланыуға, хаҡтарҙы төшөрөүгә аяҡ сала, һ.б.

Азат демократия принциптары буйынса эшләүсе хөкүмәт, ҡағиҙә булараҡ, ваҡыт үтеү менән ике партияға бүленә. Һуңынан уларҙың һәр ҡайһыһы икенсеһе менән власть өсөн көрәшә башлай. Сәйәси партиялар халыҡҡа властың күберәк вәғәҙә итеп, еңеү яулай һәм шул юл менән тотоп тора.

Әлбиттә, бушлай сыр булмай. Барлыҡ ошо алтын тауҙарын тәьмин итеүҙең берҙән-бер юлы - бик күп булмаған байыраҡ һайлаусыларҙың аҡсаһын алып тороп, уларҙы күп һанлы ярлы һайлаусыларға бүлеп биреү (улар үҙҙәрен системаның бер ғәйепһеҙ ҡорбандары булыуына ышана һәм, әгәр байҙарҙан әҙ генә булһа ла "тамһа", ғәҙел була икәненә ныҡлы инана).

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 15 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 02.45, 03.05 "Мужское/Женское".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Вегас". Сериал (18+).
03.00 Новости.
03.40 "В наше время".
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Небесный щит". Док. фильм.
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". "Последние гастроли". Сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-14". "Оторва", "Компромат". Сериал (12+).
00.45 "Химия нашего тела. Витамины". Док. фильм.
01.50 "Улицы разбитых фонарей" (16+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина" (6+)
15.00 Резеда Әминева. Концерт (6+)
20.00 "Тәмле" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы (12+)

### БСТ

**Профилактика до 14.00.**
**14.00 Новости недели (16+).**
**14.45 "Живое село" (12+).**
**15.15 "Царь горы".**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Борсаҡ". Веселая физкультура.**
**16.15, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (6+).**
**16.45 "КЛИО".**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 04.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**18.55 Хоккей. КХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Динамо" (Балашиха). Трансляция из Нефтекамска (12+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Время спорта" (6+).**
**23.30 "Дознание" с Ильдаром Исангуловым (16+).**
**24.00 "Внутри Льюина Дэвиса". Худ. фильм. По окончании: Новости (на башк. яз.) (16+).**
**02.15 А.Атнабаев. "Дети мои". Спектакль (12+).**
**05.30 "Антология Антитеррора". "Кавказский спрут" (16+).**
**06.00 "Весело живем" (12+).**
**06.15 "Орнамент".**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 16 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Мажор". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет".
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.15 "Мужское/Женское".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". 3-я и 4-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Структура момента" (16+).
01.30, 03.05 "Вегас". Сериал (18+).
03.00 Новости.
04.00 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". "Киднеппинг" (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-14". "Сердечная недостаточность", "Лишние люди" (12+).
00.45 "Нюрнберг. 70 лет спустя". Док. фильм (16+).
01.45 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Автограф". Мөфтәдин Ғиләжев (6+)
20.00 "Дарман" (6+)
21.00 "Кис ултырып"."Ҡартаямы ни ул йөрәк" (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильм.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Зеркальце".**
**11.00, 16.15, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 06.15 "Орнамент. Новоселье".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Доктор Тырса". Сериал (12+).**
**12.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**12.45, 04.30, 06.00 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30 Новости.**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык" (12+).**
**14.45 "Башкорттар".**
**15.15 "Семәр".**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.00 "Ғәләмәт донья".**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 04.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**18.45, 20.00 "Телецентр" (12+).**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**21.00, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Автограф" (12+).**
**23.30 "Милый друг". Худ. фильм. По окончании: Новости (16+).**
**01.45 "ЧП в секретном городе" (12+).**
**02.45 Спектакль (12+).**
**05.30 "Антология Антитеррора" (16+).**

## 17 ДЕКАБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Мажор". Сериал (12+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". 5-я и 6-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Политика" (16+).
01.30, 03.05 "Вегас". Сериал (18+).
03.00 Новости.
04.00 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Сталин. Последнее дело". Док. фильм (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12+).
12.55 "Особый случай" (12+).
12.40 "Сердце звезды". Сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". "Свой чужой" (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-14". "Парик", "Добрый человек" (12+).
00.45 "Томография судьбы. Извилины таланта" (12+).
01.45 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Замандаштар". Гөлсөм Хәбибуллина (6+)
21.00 "Кис ултырып". "Өс егет" (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00, 16.15, 06.45 "Современник" (6+).**
**11.15, 06.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Доктор Тырса". Сериал (16+).**
**12.30 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**12.45, 06.00 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бэхетнэмэ".**
**13.30, 14.30 Новости.**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык".**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.45 "Шатлык йыры".**
**16.00 "Борсаҡ".**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.15 Позывной "Барс" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 04.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**18.30, 22.30 Новости (12+).**
**18.45, 20.00 "Телецентр" (12+).**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**20.30 "Р-240. Уфа - Оренбург" (12+).**
**20.55 "Счастливый билет" (16+).**
**21.00, 06.30 "Полезные новости".**
**21.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Автограф" (12+).**
**23.30 Гала-концерт. По окончании: Новости (на башк.яз.) (12+).**
**01.15 "Страшно красив". Худ. фильм (16+).**
**02.45 Спектакль (12+).**
**05.30 "Антология Антитеррора" (16+).**

## 18 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.39 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.10 "Мажор". Сериал (16+).
14.00 Пресс-конференция Президента Российской Федерации Владимира Путина. Прямая трансляция.
17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Время покажет" (16+).
19.00 "Наедине со всеми" (16+).
20.00 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
22.00 "Мажор". 7-8-я серии (16+).
00.05 Хоккей. Кубок Первого канала. Сборная России - сборная Финляндии.
21.30 "Уходящая натура". Сериал (16+).
02.15 "Вечерний Ургант" (16+).
02.50, 02.50 "Вегас". Сериал (18+).
03.00 Новости.
04.40 "Контрольная закупка" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Подруги". Сериал (16+).
14.00 Пресс-конференция Президента Российской Федерации Владимира Путина. Прямая трансляция.
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". Сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-14". Детектив (12+).
00.45 "Гений разведки. Артур Артузов"
22.55 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.45 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+).
03.20 "Шифры нашего тела. Сердце". Док. фильм (12+).
04.10 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Куш беләҙек" (6+)
16.00 Ҡәҙим Аралбаев тураһында тапшырыу (6+)
21.00 "Кис ултырып". "Байыҡ". Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Царь горы".**
**11.00, 16.15, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 06.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Доктор Тырса". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**12.45, 06.00 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Башҡорт йыры" представляет… (12+).**
**14.45 "Үткән ғүмер" (12+).**
**15.15 "Шәп арба".**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.00 "Семәр".**
**16.45 "Алтын тирмә".**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 04.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**18.45, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**21.00 "Наука 102" (12+).**
**22.00 "Аль-Фатиха".**
**23.00 "ФК "Уфа" - наша команда!"**
**23.30 Гала-концерт фестиваля "Уфа - город дружбы и единства". По окончании: Новости (на башк. яз.) (12+).**
**01.15 "Руд и Сэм" (12+).**
**02.45 Н.Гаитбаев "Любви все возрасты покорны" (12+).**
**05.30 "Антология антитеррора" (16+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 19 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Мажор". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет".
16.00, 05.10 "Мужское/Женское".
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.40 "Вечерний Ургант".
23.35 "Голос". Музыкальный конкурс (12+).
01.50 Группа "The who". История альбома "Tommy" (16+).
03.00 "Смерть негодяя". Криминальная драма (16+).

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.10 "От всей души".
10.05 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". Сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир".
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Специальный корреспондент" (16+).
23.00 "От праздника к празднику". Мелодрама (12+).
01.00 "Отчим" (12+).
02.50 "Горячая десятка" (12+).
03.45 "Жить на войне. Оккупация" (12+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йома" (0+)
20.00 "Рампа" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Нурия Абдуллина (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00, 16.15, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 17.45 "Орнамент".**
**11.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Доктор Тырса" (12+).**
**12.30, 22.30 Новости (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бэхетнэмэ".**
**13.30, 14.30, 18.30 Новости.**
**13.45 "Учу башкирский язык".**
**14.45 "Автограф" (6+).**
**15.15 "Зеркальце".**
**15.30 "Гора новостей" (6+).**
**15.45 "Сулпылар".**
**16.00 "Байтус" (6+).**
**16.30, 21.30 Новости (6+).**
**16.45 ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости экономики (на русск. яз.) (16+).**
**18.00 "Йома".**
**18.45, 20.00 "Телецентр" (12+).**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**21.00, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "История признания" (6+).**
**22.00 Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Дарман" (12+).**
**23.45 "Смелая музыка" (12+).**
**00.45 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**01.15 "Отцы поневоле" (12+).**
**02.15 В.Дельмар "Дальше тишина" (12+).**
**05.00 "Странный город" (12+).**
**06.00 "Антология антитеррора" (16+).**

## 20 ДЕКАБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Алые паруса". Худ. фильм (6+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Валентина Толкунова. "Ты за любовь прости меня..." (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.25 "Идеальный ремонт".
13.20 "В наше время" (12+).
14.10 "ДОстояние РЕспублики".
16.00 Кубок Первого канала - ежегодный международный турнир по хоккею с шайбой. Проводится с 1967 года Федерацией хоккея России. Сборная России - сборная Швеции. Прямой эфир. В перерыве - Новости (с субтитрами).
18.15 "Ледниковый период".
21.00 "Время".
21.30 "Голос" (16+).
23.45 "Что? Где? Когда?"
00.55 Хоккей. Кубок Первого канала. Сборная Финляндии - сборная Чехии.
02.55 "Как обменяться телами". Комедия (18+).
04.20 "Продюсер Джордж Мартин" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00 "Зудов, вы уволены!"
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.25 "Вести-Башкортостан".
11.30 "Честный детектив".
12.05, 14.34 "Четвертая группа" (16+).
14.00 "Вести".
14.25 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Это смешно" (12+).
18.00 "Таблетка от слез". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести".
20.30 "Позови и я приду". 4 серии. Сериал (12+).
00.20 "Девушка в приличную семью" (12+).
02.25 "Невеста на заказ" (16+).
04.10"Планета собак".
04.45 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Ф.Ғәскәров исемендәге халыҡ бейеүҙәре ансамбле. Концерт (6+)
19.00 "Супер киленсәк". Фильм (6+)
21.00 "Кис ултырып". Ян Лира (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05, 12.30 Новости (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Барби и 12 танцующих принцесс".**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (12+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт".**
**12.45 "Учу башкирский язык" (12+).**
**13.30 "Орнамент" (6+).**
**13.45, 19.30 "Весело живем" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**16.00 "Баик-2014" (6+).**
**17.00 "Уроки длиною в полвека" (12+).**
**18.15 "Хазина" (6+).**
**18.45 "Замандаш".**
**19.00 "Башкорттар".**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**20.00 Конкурс исполнителей мунажат (12+).**
**20.15 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "Живое село" (12+).**
**21.00 "Бизнес-сфера" (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**22.00 "Попкорм" (16+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**23.00 "Башҡорт йыры" представляет…" (12+).**
**23.45 "Странный город" (12+).**
**00.45 "Бегущая по волнам". Худ. фильм (16+).**
**03.00 З.Атнабаева "Прерванная свадьба". Спектакль (12+).**
**05.15 "Автограф" (12+).**
**06.15 "Антология антитеррора". "Дорога в один конец" (16+).**
**06.45 "Замандаш" (6+).**

## 21 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Случай с Полыниным" (12+).
08.10 "Служу Отчизне!"
08.45 "Смешарики". "Пин-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.18 "Теория заговора".
13.05 "Черно-белое".
14.15 "Человек с бульвара Капуцинов" (12+).
16.00 Хоккей. Кубок Первого канала. Сборная России - сборная Чехии. Прямой эфир. В перерыве - Новости (с субтитрами).
18.35 "Клуб Веселых и Находчивых" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Нерассказанная история США". Док. фильм (16+).
23.40 Хоккей. Кубок Первого канала. Сборная Финляндии - сборная Швеции.
01.40 "Живая сталь". Фантастика (16+).
04.00 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1

05.35 "Нежданно-негаданно" (12+).
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Кулинарная звезда" (12+).
12.10 "Служанка трех господ". Лирическая комедия (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Смеяться разрешается".
16.15 Праздничный концерт ко Дню работника органов безопасности РФ.
18.05 "В плену обмана". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
23.50 "Берега любви". Мелодрама (12+).
01.40 "Сокровище". Худ. фильм (12+).
03.20 "Моя планета" представляет: "Одна на планете. Италия. Остров Искья".
04.10 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
16.00 "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме". Спектакль (6+)
20.00 "Рампа" (6+)
21.00 "Кис ултырып". "Төрквижн" (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.15 "Йома".**
**08.45 "Принцесса солнца" (12+).**
**10.00 "Физ-ра".**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ал да гол" (6+).**
**11.00 "Шәп арба" (6+).**
**11.15 "Байтус" (6+).**
**11.30 "Сулпылар".**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели.**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню".**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Автограф" (12+).**
**17.00 "Историческая среда".**
**17.30 "Наука 102" (12+).**
**18.00 "История признания" (6+).**
**18.30 "Солнечная мелодия".**
**20.00 "Любимое дело".**
**20.30 Диспут-клуб "Пятый угол" (16+).**
**21.15 "Бизнес-обзор" (12+).**
**21.30 Новости недели (12+).**
**22.15 "Полезные новости" (16+).**
**22.30 "Баик-2014" (12+).**
**23.30 "Вечер.com".**
**00.15 "Свидание с джазом" (16+).**
**00.45 "Дополнительное время".**
**02.15 М.Карим "Страна Айгуль". Спектакль (12+).**
**04.30 "Сосуды" (12+).**
**05.30 "Попкорм" (16+).**
**06.00 "Смелая музыка" (12+).**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ЙОҠО БАҪМАҺЫН ӨСӨН...

## хәтерҙе уятып алыу ҙа кәрәк




**Ошо көндәрҙә Салауат ҡалаһындағы башҡорт милли хәрәкәтенең башында тороусы "Аҡбуҙат" ойошмаһының 25 йыллығына арналған тантаналы сара уҙғарылды.**

Ҡасан ғына әле Башҡортостан Республикаһына дәүләт суверенитеты, башҡорт мәктәптәре, балалар баҡсалары, уларҙа башҡортса уҡытыу һәм тәрбиә эштәре алып барыу, башҡортса матбуғат баҫмаларын булдырыу өсөн ваҡытын, сәләмәтлеген йәлләмәй сабып йөрөгән егет-ҡыҙҙар хәҙер инде сәстәренә сал төшкән абруйлы, ихтирамлы оло быуын дәрәжәһенә еткән. Быны улар сара уҙған Салауат башҡорт драма театры бинаһында һаман да йә бәхәсләшә, йә шатлыҡ ауаздарына күмелеп, ҡунаҡтар ҡаршылай, йә бер йәшлектә, бер ҡартлыҡта, тигәндәй, ер һелкетеп бейеп китә. Эйе, уларҙың бөгөн ни ҡылһа ла хаҡы бар: сөнки тап улар ҡасандыр республиканың үҙаллылығы өсөн ҡалҡан булып баҫҡан милләттәштәребеҙ. Һаман да уларҙың йөрәгендә илен, телен, ерен, милләтен һаҡлар көс дөрләп яна һәм янасаҡ та. Шуныһы ҡыуаныслы, тамаша залы үткәндәренә байҡау яһарға килгән оло-лар менән генә түгел, уларҙан эстафетаны үҙ ҡулдарына алырға тейешле йәштәр менән дә тулы ине.

Юбилей булғас, әлбиттә, ул халыҡ хәтерендә ҡалырлыҡ ҡына түгел, уның йоҡо баҫып барған күңелен, рухын ҡабат уятырлыҡ матур байрам булырға тейеш. Шуны иҫтә тотоп, ҡотлауҙар һәм сығыштар йыр-моң менән үрелеп алып барылды. Ә ҡунаҡтар ат еткән ерҙән дә, хат еткән ерҙән дә килгән: Ишембай аҡһаҡалдары, Стәрлетамаҡ ағинәйҙәре, Салауат ҡалаһының милли ойошмалары, Өфө ҡалаһынан "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәге вәкилдәре. Һәм, әлбиттә, уларҙың һәр ҡайһыһы тантана сәбәпселәренә - ойошманың төүге нигеҙ ташын һалып, күңелдәрендә ҡабынған осҡондо ялҡын кимәленә күтәреп, бөгөнгәсә уны һүндермәй йөрөтөүселәргә үҙҙәренең бүләктәрен тапшырҙы. Ә инде Салауат ҡалаһы хакимиәте башлығының кадрҙар һәм ижтимағи мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Дмитрий Склокиндың сарала ҡатнашып, рәсми власть исеменән ҡотлау адресын еткереүе тағы ла мәртәбә өҫтәне.

- Юбилейҙарҙа үткәндәрҙе иҫкә алыу - матур йола, - тине үҙенең сығышында "Аҡбуҙаттың" өсөнсө рәйесе Самат Мостафин. - Беҙҙең ойошманың тарихы бөтөн Башҡортостан тарихына тығыҙ бәйләнгән. Республикабыҙҙың 1990 йылдан башланған һуң тарих китабының һәр битендә "Аҡбуҙат"тың да ҡатнашлығы бар. 1989 йылда, Бөйөк Советтар Союзы тарҡалыу хәләнә етеп, Балтик буйы илдәре үҙаллылыҡ өсөн көрәшкә күтәрелгәндә, беҙҙә лә халыҡ уяна, үҙ милләтен таный, башҡорт булған өсөн ғорурлыҡ арта бара. Ошо уяныу осоронда ҡалабыҙҙа республикала беренселәрҙән булып милли башҡорт ойошмаһы төҙөлә. Уның беренсе ағзалары булып Ирек Агишев, Мөхтәр Сабитов, Мәжит Әминевтар тора. Беренсе рәйесе итеп ул ваҡытта йәш, дәрте ташып торған Мәжит Әминев һайлана. Ул йылдарҙа ойошмаға милләте өсөн, Башҡортостаны өсөн янып-көйөп йөрөүселәр әүҙем ылыға. Уяныу осоро тиҙҙән осҡондан сыҡҡан ут кеүек, тотош республиканы азатлыҡ өсөн ялҡынлы көрәшкә әйләндерҙе, суверенитет өсөн эштәр башларға әйҙәне һәм этәрҙе. Үҙаллылыҡ яулағандан һуң, бик күп эштәр башҡарҙыҡ. Мәктәптәрҙә башҡорт телендә уҡытыуҙы юлға һалыу, халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен, гөрөф-ғәҙәттәрен, башҡорт халҡының үҙаңын, рухын тәрбиәләү буйынса эштәргә ең һыҙғанып тотондоҡ. Салауат башҡорт драма театрына яңы бина юллау, башҡорт гимназияһы булдырыу, башҡортса гәзит сығарыу эштәрен юлға һалыу күп көс һәм ваҡыт талап итте. Ҡалабыҙҙа башҡорт ҡурайын тергеҙеп, ҡурай уйнауҙы тормошобоҙға индереп, ҡурай конкурсын мәртәбәле төбәк-ара конкурс кимәленә күтәрҙек. Был эштәр бөгөн дә дауам итһен ине. Сөнки тормош тәғәрмәсе артабан тәгәрәй. Йәштәрҙе лә, пенсияла булып ваҡытын нисек уҙғарырға белмәгән ағай-апайҙарҙы ла йәлеп итергә кәрәк...

Самат Мостафиндың һүҙҙәрен "Алағыуат" ойошмаһы вәкилдәре лә элеп алды. "Беҙ һәр ваҡыт "Аҡбуҙат" менән бергәләшеп эшләнек, сөнки уларҙың эшмәкәрлегенең беренсе пункты булып башҡорт халҡының милли мәнфәғәттәре торһа, икенсе пунктта башҡа милләттәр менән дуҫ һәм татыу йәшәү бурысы ҡуйылғайны. Башҡортостан - башҡорт халҡының аҫаба ере, беҙ, башҡа милләт вәкилдәре, башҡорт ерҙәренә килеп һыйыныу тапҡанбыҙ, шуға ла һәр саҡ "Аҡбуҙат" менән йәнәш атлайбыҙ һәм дөрөҫ юл һайлағанбыҙ, тип ышаныслы әйтә алам", - тине уның өлкән ағзаларының береһе Миҙхәт Рәхимҡолов.

...Ҡасандыр Ғәлимов Сәләм үҙенең "Шоңҡар" поэмаһында, риторик һорау ҡуйәрә: "Әйтсе, Бурыл, әйтсе, йәшәү өсөн, ниндәй һуҡмаҡ менән барырға?". Ә инде "Аҡбуҙат"тың юбилей кисәһе был һорауға яуап бирҙе кеүек: халыҡ булып, милләт булып йәшәү өсөн телебеҙҙе, еребеҙҙе, динебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе, иманыбыҙҙы, рухыбыҙҙы, асылыбыҙҙы, ғорурлығыбыҙҙы, сәмебеҙҙе һ.б. һаҡлап ҡалырға тейешбеҙ. Быны атҡарыу ауыр ҙа, ауыр түгел дә һымаҡ. Үҙенең бер шиғырында Риф Тойғон "Башҡорт булыу өсөн күп кәрәкмәй", тиһә, аҡһаҡалыбыҙ Рәшит Шәкүр иһә ошолай ти:

*Юҡ, туғаным, улай түгел дә ул,*
*Башҡорт булыу үтә яуаплы.*
*Башҡорт булыу өсөн бик күп кәрәк,*
*Башҡорт булыуҙары сауаплы.*

*Күпме беҙҙә, башҡорт була тороп,*
*Башҡорт булып етлекмәгәндәр.*
*Башҡортлоҡ тип, аҫыл заттарыбыҙ*
*Күп кисергән, күпте күргәндәр...*

*Башҡорт булыу өсөн бик күп кәрәк,*
*Тәрән аҡыл кәрәк, хис кәрәк,*
*Илде һаҡлар өсөн, яҡлар өсөн*
*Ҡайнар йөрәк кәрәк, көс кәрәк!*

*Башҡорт булыу үҙе изге бурыс -*
*Яуызлыҡҡа ҡаршы торорлоҡ,*
*Урал батыр һымаҡ, Урал илен*
*Гөл баҡсаһы итеп ҡорорлоҡ!*

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Декабрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, ахшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 15 (23) дүшәмбе | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 16 (24) шишәмбе | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 17 (25) шаршамбы | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 18 (26) кесе йома | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 19 (27) йома | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 20 (28) шәмбе | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 21 (29) йәкшәмбе | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙән алынды.*

**48-се һандағы кроссворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** 4. Хазанкин. 9. Эскимос. 10. Камалова. 11. Әхиәров. 13. Ҡарағас. 15. Проспект. 19. Тарлауыҡ. 23. Декан. 24. Икмәк. 25. Ауыҙса. 27. Алатыр. 28. Көйә. 29. Фетнә. 30. Сенат. 32. Тел. 36. Теләк. 37. Дамолла. 38. Хант. 40. Фекер. 41. Әпкәләй. 44. Ҡайны. 45. Айва. 46. Әсәҙуллин. 48. Трейлер. 50. Система. 51. Капитан. 53. Мина. 54. Ганг. 55. Буталыш. 57. Нева. 58. Ҡаңтар. 59. Баҡта.

**Вертикаль буйынса:** 1. Психика. 2. Сиҙем. 3. Хохоҡ. 5. Аманат. 6. Атабаска. 7. Клон. 8. Нуар. 12. Ваза. 14. Бак. 15. Плащ. 16. Обыденнова. 17. Пассат. 18. Келәт. 19. Тәхел. 20. Ләлә. 21. Урта. 22. Ҡорт. 26. Мөхәмәтйәнова. 27. Ангар. 29. Февраль. 31. Темперамент. 33. Локаут. 34. Пленум. 35. Ахшам. 37. Дефис. 39. Сәүек. 42. Аспирант. 43. Аҙналыҡ. 47. Ниагара. 49. Ратуша. 52. Парта. 56.Шар.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 декабрь "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), музыкаль комедия

**14 декабрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури)

**16 декабрь "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм Ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл

**19 декабрь** театрҙың 95 йыллығына арналған юбилей кисәһе

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**16 декабрь "Люстра"** (И. Зәйниев), трагикомедия

**20 декабрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 12.00, 15.00

**21 декабрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 12.00, 15.00, 17.00

### Ф. Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле

Ансамбль тамашасыларҙы Мәҙәниәт йылына бағышланған концерттарына саҡыра.

**12 декабрь** Конгресс-Холл, башлана 19.00

**13 декабрь** Конгресс-Холл, башлана 18.00

**19 декабрь** "Химик" мәҙәниәт йорто, башлана 19.00

**КЕМ АЛЫҠ?**

Бейеү сәнғәтен яратыусылар һорауға дөрөҫ яуап биреп, 13 декабрь көнөндәге концертҡа саҡырыу ота ала.

Ансамбль репертуарында ҡатын-ҡыҙ исемдәрен йөрөткән 3 бейеүҙе атағыҙ.

**Телефон: 8-927-956-68-89**

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**13 декабрь "Аҙашҡан ҡунаҡ"** (Н. Птушкина), комедия

**19 декабрь "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ТЫЙНАҠЛЫҠ - ОЛО ҒӘМӘЛ

• Бер ваҡыт Умм-Салама Бәйғәмбәребеҙҙән: "Эй, Алла илсеһе, мин ҡыҙҙарымды, улдарымды ҡараған өсөн Хоҙай рәхмәтенә иҫәп тота аламмы?" - тип һораған. Бәйғәмбәр: "Эйе, үҙеңдән айырып алып балаларың өсөн тотонған бөтә сығымдарың өсөн дә һине сауап көтә", - тигән.

• Аллаһы Тәғәләнең илсеһе тағы ла бер хәҙисендә: "Алла юлында бер динар түкһәң, ҡолдарыңа һәм мохтажға бирәр динар түкһәң һәм дә ғаиләңә бер динар түкһәң, шулар араһынан иң ҙур сауап ғаиләң хаҡына киткәненә булыр", - тип аңлатҡан.

• Аллаһы Тәғәләгә үҙеңде рәхәтлек ваҡытында таныт, ул һине ауырлыҡта ҡалдырмаҫ, тигән Мөхәммәт бәйғәмбәр.

• Бәндәләр менән бергә йәшәп, уларҙың төрлө ауырлыҡтарын уртаҡлаша белгәндәр бәндәләрҙән ситләшеп, уларҙың ҡайғы-хәсрәттәренә битараф булып ҡалғандарға ҡарағанда әжер-сауаптарҙы күберәк аласаҡ.

• Әбүл-Ғаббас Сәһл ибн Сәйед Әс-Сәиди әйткән: "Бәйғәмбәргә килеп бер әҙәм: "Эй, Аллаһ илсеһе! Аллаһтың да, бәндәләрҙең дә ризалығына лайыҡ булырлыҡ бер ғәмәл өйрәтеп бирһәң ине", - тигән. "Был фани донъяла тыйнаҡ була белһәң - Аллаһтың һөйөүеңә, һәр нәмәлә сама белеүселәрҙән булһаң - бәндәләр һөйөүенә лайыҡ булырһың", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# РУХЫН ЮҒАЛТҠАН ТҮГЕЛ...

## мөнәжәт һәм нәсихәттәр әйткән халыҡ беҙ!



(Башы 10-сы биттә).

Әйткәндәй, Белорет районы Үткәл ауылы ағинәйҙәре был конкурста беренсе тапҡыр ғына ҡатнашты. "Мөнәжәт һәм нәсихәттәр һөйләү беҙҙә онотолоп бара, - тине Үткәл ауылы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Айһылыу Йомағужина, элек өләсәйһенең әйткән мөнәжәттәренә тейешле әһәмиәт бирмәүенә үкенес белдереп. - Конкурста ҡатнашырға булғас, үҙаллы эҙләп, һорашып, Шығай ауылында йәшәүсе ҡурайсыбыҙ Мөхәммәт Түләбаевтан мөнәжәттең ике төрлө көйөн өйрәнеп, Таңһылыу Вәхитованың өләсәһе һөйләгәндә иҫкә төшөрөп, замандаш шағирәләребеҙ Зөлфиә Ханнанова һәм Гүзәл Ситдиҡованың һүҙҙәрен көйгә һалып, нәсихәт әйттек. "Ағинәйҙәр ҡоро" ойошмаһын булдырғас та, үҙебеҙҙең төбәктең онотолған йолаларын тергеҙә башлағайныҡ, хәҙер был мөнәжәт һәм нәсихәттәрҙе лә яҡшылап өйрәнеп ҡайтырға ниәтләйбеҙ. Коллектив менән бергә йырлауыбыҙҙың да төп маҡсаты шунда - ун ике кеше мөнәжәт әйтергә өйрәнде икән, киләсәктә, тимәк, ун ике урында улар шуны башҡарып күрһәтәсәк, бүтәндәр отоп аласаҡ..."

Мөнәжәт башҡарыусыларҙың 2-се асыҡ ҡала конкурсының төп призына лайыҡ булыусы Учалы районы вәкилдәре "Йома сәйе"н сәхнәләштерҙе. Учалы ҡала мәсетенең һәм Учалылағы Зәйнулла ишан мәсете мөслим һәм мөслимәләре тәрән мәғәнәле нәсихәттәре, күңелдәрҙе таҙартырлыҡ мөнәжәттәре менән жюри ағзаларын да, тамашасыларҙы ла, килгән абруйлы ҡунаҡтарҙы ла хайран итте. "Йома - ул Аллаһы Тәғәләнең беҙгә биргән бүләге. Был көндөң файҙаһы, уның ҡиммәттәре тураһында Ҡөрьәндә бик күп яҙылған. Быны ошо оло йома көндө ғилем тураһында мөнәжәттәр һөйләнек. Мөьмин мосолман ғилемде ҡайҙа юғалтты, шунан табып алырға тейеш, тиелгән Ҡөрьәндә. Унда ғилем тураһында 170 урында яҙылған, ғилем йәннәттең юлы, бишектән ләхеткә тиклем ғилем алыу талап ителә, тиелгән. Беҙ әйткән бер мөнәжәттә шундай юлдар бар: "Бер ғәмәлһеҙ үлеп китһәк, Ҡиәмәттә нишләрбеҙ?" Ғәмәл ҡылырға тейешбеҙ, бының өсөн белемле булырға кәрәк. Ошоларҙың барыһы ла Ислам диненең төп хәҙистәре, улар еңел һәм аңлайышлы формала мөнәжәт итеп йырланған, ошоға беҙ үҙебеҙҙең шәкерттәрҙе, мөслим-мөслимәләрҙе өйрәтергә тырышабыҙ", - тине Учалы ҡалаһының Зәйнулла ишан мәсете мөғәллимәһе Зәкиә Әделйәнова. Учалы мөнәжәтселәре араһында йәштәрҙең күп булыуы иғтибарҙы йәлеп итте. Бөгөн йәштәр ололар һүҙенә бик иғтибар итеп бармай, уларға ниндәйҙер мөғлүмәтте йәштәштәре үҙҙәре еткерергә тейеш, тигән фекер ҙә йәшәүен иҫәпкә алғанда, Учалыла оло быуын мөнәжәтселәре эргәһендә йәш мөнәжәтселәр ҙә булыуы үтә яҡшы күренеш булып сыға түгелме? Әммә был фекерҙе айырым башҡарыусылар араһында I урын яулаусы йәш егет Сәмиғулла Лоҡманов бик үк хупламаны. "Йәштәштәремдә яҡшы белгәс, уларға әлеге нәсихәттәремде һөйләргә бик ынтылып тормайым, сөнки улар ниндәйҙер өгөт, аҡыл өйрәтеүҙе хушһынмай, ҡабул итмәй. Шуға күрә, мин нәсихәттәрҙе күберәк туғандарыма, олораҡ йәштәге кешеләргә әйтеп ишетерәм. Ә шулай ҙа өмөт бар. Йәштәр хәҙер дингә күпләп килә бит, мөнәжәт тыңларға, уны башҡарырға ла өйрәнерҙәр, иншалла". Сәмиғулла Лоҡманов конкурста үҙенең "Әсәйҙәргә" тигән нәсихәтен әйтте, уның сығышы залда ултырыусыларҙың береһен дә битараф ҡалдырманы, ул оҙаҡ ҡына ҡулҡтарҙа сыңлап йөрөнө хатта. Тимәк, ошондай мөнәжәт сыңы йәштәрҙең дә күңел ишектәрен үтеп инер әле, тип ышанайыҡ.

Сараға мәртәбә өҫтәп, конкурстың йомғаҡлау өлөшөндә Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫарҙары Хәләф Ишморатов һәм Буранбай Күсәбаев, "Башбланкиздат" ойошмаһының генераль директоры Гөлсәсәк Әлибаева, Сибай ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Илгиз Хәйруллин ҡатнашты. Был конкурстың башҡорт халыҡ йолаларын тергеҙеүҙәге әһәмиәтен юғары баһалап, Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы киләсәктә уның беренсе туры һәр район кимәлендә үткәрелергә тейеш, тигән тәҡдим индерҙе. Ә Хәләф Хәлфетдин улы киләсәктә был конкурсты республика йә Рәсәй кимәлендәге сара итеп нарыҡлау кәрәклеге тураһындағы фекере менән уртаҡлашты. Уның фекерен Сибай ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Илгиз Рәхимйән улы ла хупланы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мөнәжәт башҡарыусыларҙың 2-се асыҡ ҡала конкурсы буйынса фекер алышыуҙар барышында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Хәләф Ишморатов әйткән һүҙҙәр мөнәжәт һүҙҙәре менән аралаш оҙаҡ ҡына ваҡыт ҡолаҡта яңғырап торҙо. "Үтеп китеп барған поездың һуңғы вагонына һикереп менеп өлгөрҙөк, йәмәғәт! Киләсәктә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты БР-ҙың Мәҙәниәт һәм Мәғариф министрлыҡтары менән берлектә мөнәжәт тигән ынйы-гәүһәрҙәрҙе йыйып, йәш быуынға алып барып еткереү сараһын күреүҙе, конкурсты республика кимәлөнә сығарыуҙы төп бурысыбыҙ итеп алырға тейешбеҙ", - тигәйне Хәләф Хәлфетдин улы. Поезд вагонында ултырып өлгөрҙөкмө, әллә ваҡыт арбаһында дилбегәгә яҡыныраҡ күстекме, быныһы билдәһеҙ, иң мөһиме - халҡыбыҙҙың матди байлыҡтарҙан рухи ҡиммәттәрҙе өҫтөн ҡуйырға тырышыуын тағы бер миҫалда күрҙек. Киләсәктә йәштәргә лә мөнәжәт, нәсихәттәрҙә әйтелгән өгөттө, аҡылды күсерә алһаҡ, Аллаһы Тәғәләнең яратҡан балалары - башҡорттар үҙ асылына ҡайтыр! Амин!**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# БЕЛГӘН ЙОҪОҠҠА, ОНОТОП БАРАБЫҘ...

**Беҙҙең Салауат районында йәшәгән башҡорттар һөйләшендә урын алған ҡайһы бер һүҙҙәр:**

**Ишек келәһе** - ишек биге, ишекте эстән йә тыштан бикләп ҡуйыу ҡулайламаһы
**Күгән** - ишек яңағына нығытылған тишекле тимер, ишекте тыштан бикләгәндә, келәне кейҙереп, күгәнгә йоҙаҡ эленә һәм асҡыс менән биклənə
**Сергетүш (күк) иткән** - бик бысранған әйбер хаҡында әйтәләр (ә ат өҫтөнә ябыр өсөн йөрөтөлгән әйберҙе шулай тип атағандары онотолған)
**Септә** - йүкә һалабашынан үрелгән, туҡылған ҡулайлама, уны ла, ат тирләһә, ябалар, ишек алдына, аяҡ аҫтына йәйәләр
**Һыйғыр (шыйғыр) сыбыҡ** - тал сыбығын ишек ҡашына элеп ҡуйғандар: "тәртип" өсөн
**Кәсир бысаҡ** - элек буятылмаған иҙәнде бысаҡ менән һап-һары итеп ҡырып, эҫе һыуға һалабаш йыуғысты манып, һыҙырып, йыуып сығара ине уңған ҡатындар
**Сауыл, сауылдыҡ** - ҡарт ҡайын, ҡайынлыҡ
**Араптай итеп утыртып ҡуйғанһың** - урынды күп алған әйбер хаҡында
**Арабалай (аравалай)** - килбәтһеҙ ҙур, тау ише әйбер; кәүҙәгә ҙур кеше
**Абалап сыкты** - эт өрөп сыҡты; әрләшергә яратҡан кеше хаҡында ла шулай тиҙәр
**Ҡомарҙанып (яратыу)** - бирелеп китеп, бар хис-тойғоһо менән.

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АШАҒАНДА ТЕЛҺЕҘ БУЛ...

## эшләгәндә өнһөҙ бул

Һөймәгәнгә һөйкәлмә - теле менән төрткөләр; көймәгәнгә көйөнмә - теле менән сәнскеләр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Изге эш Ер йөҙөндәге бар мөйөштәрҙең туҙанын һәм сүп-сарын йыуыусы кеүәтле тулҡын ул.

**(Джон Апдайк).**

Әгәр ҙә кеше һәм фәрештә теле менән һөйләшеп тә, йөрәгемдә һөйөү булмаһа, мин бары тик буш яңғыраҡлы баҡыр ғынамын.

**(Апостол Павел).**

Тереләр һәм үлеләр ере бар, ә уларҙы тоташтырыусы күпер - ул мөхәббәт.

**(Торнтон Нивен).**

Көнсөл кешенең бойоғоуының сәбәбе - йә үҙенә бәхетһеҙлек килгән, йә кемдер икенсе берәү уңышҡа өлгәшкән.

**(Бион Борисфенит).**

Күңелһеҙлектәр беҙҙең менән була торған иң насары түгел, беҙҙең менән бер ни ҙә булмауы иң насары.

**(Ричард Бах).**

Ҡыйыулыҡ ҡурҡыу тойғоһо юҡлыҡтан барлыҡҡа килмәй, ҡыйыу кеше лә ҡурҡа, әммә алдына алғанын атҡара.

**(Билдәһеҙ автор).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер йәш егет тырышып-тырышып уҡ атырға өйрәнгән. Сираттағы күнекмәләр мәлендә сәпкә туп-тура тейгәс, шул тиклем шатланған. Уны был шөғөлгә өйрәтеүсе остазы егеттең шат йөҙөн күргәс, былай тип һораған:**
**- Ә һин ни өсөн сәпкә тура тейеүеңде беләһеңме?**
**- Юҡ, белмәйем, - тигән егет.**
**- Тимәк, һин уксы оҫталығына өлгәшмәгәнһең әле, - тигән һығымта яһаған остаз.**
**Егет остазының был баһаһынан һуң уксы оҫталығын тағы өс йыл камиллаштырған. Шунан һуң үҙ оҫталығын күрһәтеү өсөн тағы остазы эргәһенә килгән. Уғы туп-тура сәпкә тейгәс, һораулы ҡарашын остазына төбәгән.**
**- Ә хәҙер ни өсөн сәпкә тейеүеңде беләһеңме инде?- тип һораған остазы.**
**- Эйе, беләм, - тигән егет.**
**- Бына хәҙер инде һин уксы оҫталығына өлгәшкәнһең, - тигән остазы. -Был оҫталығыңды һаҡла һәм юғалтма. Уҡ атҡанда ғына түгел, башҡа эштәр башҡарғанда ла үҙеңде камиллаштыр, үҙеңдең теге йәки был эште ни өсөн атҡарыуыңды бел. Аҡыллы кеше һәр ваҡыт үҙе өлгәшкән ғәмәлдең сәбәбен аңларға тырышырға тейеш..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Азамат ӘБҮТАЛИПОВ, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 12 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индекстары — **50665, 50673**

Тиражы - 4700
Заказ 4552

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.